ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Кискe Өфө

3-9 декабрь (аҡъюлай) 2022

№48 (1038)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Ҡыҙҙарыбыҙҙың...**

ситтәргә китеүе аяныс



3

**Байсалҡы байрам,**

йәки Башҡорт казактарының яҡынан ойошҡаны



8

**Ауырлыҡты йырҙар еңеләйтә...**



11

**Сәхнәләрҙән генә йылмаймаһын,**

көндәлек тормошобоҙҙо биҙәһен асылыбыҙ...



12-13

@KISKEUFA

Беҙҙең Телеграм каналға рәхим итегеҙ!

смартфон камераһын төбә

***Иғтибар! "Киске Өфө" гәзите менән бергә булыусы аңлы, зыялы уҡыусыларыбыҙҙы 5 декабрҙән 15 декабргә тиклемге ун көнлөктә ПР905 индекслы "Киске Өфө"гә 2023 йылдың беренсе яртыһы өсөн ташламалы хаҡ менән 642 һум 38 тингә яҙылырға саҡырабыҙ. Гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргәндәр араһынан кемдәрҙер бүләккә бик шәп китаптар аласағы тураһында ла онотмағыҙ. Бергә булайыҡ!***

***МӨХӘРРИРИӘТ.***

## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

**?**

***Ошо арала РФ Президенты Рәсәй халҡының традицион рухи-әхлаҡи ҡиммәттәрен һаҡлау һәм нығытыу буйынса дәүләт сәйәсәте нигеҙҙәрен раҫлау хаҡында указға ҡул ҡуйҙы. Рухи ҡиммәттәребеҙҙе һаҡлау буйынса беҙ нимә эшләйбеҙ һәм эшләй алабыҙ?***

***Лилиә ҒҮМӘРОВА, сенатор, РФ Федерация Советының Фән, мәғариф һәм мәҙәниәт буйынса комитеты рәйесе, педагогика фәндәре кандидаты:*** Был указ "Рәсәй Федерацияһында стратегик планлаштырыу тураһында"ғы Федераль законға ярашлы барлыҡҡа килде. Тимәк, был документ илебеҙҙә рухи һәм әхлаҡи ҡиммәттәрҙе нығытыу, патриотизм идеяларын үҫтереү, тарихи мираҫыбыҙҙы күҙ ҡараһылай һаҡлау буйынса күп йылдарға иҫәпләнгән мәсьәләләрҙең нигеҙен тәшкил итәсәк.

Указда традицион ҡиммәттәр төшөнсәһенә шундай аңлатма бирелә: "Рәсәй граждандарының донъяға ҡарашын булдырыусы һәм быуындан-быуынға тапшырыла килгән әхлаҡ йүнәлештәре"н тәрбиәләү, "...күп милләтле Рәсәй халҡының рухи, тарихи һәм мәҙәни самимилығында сағылыусы граждандыҡ берҙәмлеген нығытыу" . Бындай ҡиммәттәр иҫәбенә тормош, ғүмер, кешелек дәрәжәһе, кеше хоҡуҡтары һәм уның азатлығы, илһөйәрлек һәм гражданлыҡ тойғолары, юғары әхлаҡ идеалдары, Ватанға хеҙмәт итеү, тарихи хәтер, быуындар күсәгилешлеге, хеҙмәт һөйөүсәнлек, ныҡлы һәм татыу ғаилә кеүек төшөнсәләр инеүе тәҡрарлана. Президент указында рәсәйҙәргә ят булған емергес идеология саралары: эгоизм, сама сиктәрен ашатлау, күп балалыҡты һәм тәбиғи ғүмер ағышын инҡар итеү, ЛГБТ-ны пропагандалау юлдары менән традицион ғаилә ҡиммәттәрен юҡҡа сығарырға маташыуҙарҙың илебеҙҙәге демография хәленә хәүеф янауы хаҡында ла иҫкәртелә. Ошо юҫыҡта традицион ҡиммәттәребеҙҙе нығытыу буйынса мәсьәләләрҙе хәл итеү өсөн йәш быуынға тәрбиә һәм белем биреү сараларын камиллаштырыу бурысы ҡуйыла.

Бында беҙ белем биреүҙең тәрбиә эше менән ныҡлы бәйләнешен күҙҙә тотабыҙ, юғиһә, һуңғы йылдарҙа "белем биреү хеҙмәте" (образовательные услуги) тигән төшөнсә өҫтөнлөк итә башланы. Был хаҡта мин "Вместе-РФ" телеканалында ла әйтеп үткәйнем инде: белем биреү - ул комплекслы эш, ул ысын граждандар, илһөйәрҙәр, илебеҙ тарихын белгән һәм уның күп милләтле халыҡтары традицияларын ихтирам иткән кешеләр тәрбиәләү менән өҙлөкһөҙ бәйләнештә алып барылырға тейеш. Тап шуға күрә лә депутаттар "Рәсәй Федерацияһында мәғариф тураһында" Федераль законға тәрбиә биреү мәсьәләләре буйынса төҙәтеүҙәр индереүҙе бер тауыштан хупланы. Президент билдәләүенсә, мәғариф законына был төҙәтеүҙәр илдә белем биреү системаһын тәрбиә эше менән бәйләүгә һәм нығытыуға булышлыҡ итәсәк. Тәрбиә эшенең үҙәге - педагогтар, әлбиттә, шуға ла хәҙер предметын алып барыусы уҡытыусы ғына түгел, ә тәрбиә эшен заман методикаһына ярашлы белеп, дөрөҫ ойоштороусы белгестәр әҙерләү көн тәртибенә килеп баҫа.

Тарих буйынса мәктәп, вуз дәреслектәре хаҡында ла һүҙ күп булды. Шуға өҫтәп, уларҙың йөкмәткеһендә патриотик тәрбиә биреү йүнәлеше өҫтөнлөк итергә тейеш, тигән фекерҙәмен. Әйткәндәй, балалар һәм йәштәр бөгөн интернет сығанаҡтарҙан күп мәғлүмәт ала, тик улар араһында тарихты боҙоп күрһәтеүсе, шулай уҡ әхлаҡ ҡанундарына һыйғыһыҙ зарарлы башҡа төрлө мәғлүмәт таратыла, шуға күрә беҙгә Википедияға альтернатив булған интернет-энциклопедия булдырырға кәрәк. Фәҡәт хәҡиҡәти ысынбарлыҡты сағылдырыусы бындай альтернатив майҙан булдырыу өсөн беҙҙең ресурстар етерлек.

Бөгөн бөтә ил буйынса йәштәр һәм балалар өсөн хәрби-патриотик үҙәктәр, оборона-спорт лагерҙары, башҡа төр проекттар тормошҡа ашырыла. Ошо йүнәлештә тормошта осрап торған хәүефле хәл-ваҡиғаларҙа батырлыҡ, ҡыйыулыҡ һәм хатта фиҙакәрлек күрһәтеүсе балалар һәм үҫмерҙәрҙе айырым рәүештә тантаналы билдәләү, бүләкләү кеүек дәртләндереү сараларына дәүләт һәм йәмәғәтселек тарафынан ҙур иғтибар бирелә. Күптән түгел, 3 ноябрҙә, Федерация Советында тап ана шундай бер төркөм йәш ҡыйыуҙарҙы наградлау тантанаһы булып үтте. Улар араһында Башҡортостандан бәләкәй яҡташым - Күгәрсен районынан 14 йәшлек Арыҫлан Шафиҡовты күреү менең өсөн бик ҡыуаныслы булды. Ул янғын сыҡҡан өй эсенән аяҡһыҙ ултырған 2-се төркөм инвалидты алып сыға һәм уның ҡатынына ла ярҙам итә. Ошондай ҡыйыулығы өсөн Арыҫлан Федерация Советының "Күрһәткән батырлығы өсөн" миҙалы менән бүләкләнде. Халыҡтар берҙәмлеге көнө алдынан Федерация Советында йәш геройҙарҙы наградлау матур йолаға әүерелде. Был сара күп милләтле илебеҙҙең ауыл һәм ҡалаларында Ватанын һөйгән, кешелек ҡиммәттәрен аңлаған һәм ауыр ваҡыттарҙа кешеләргә ярҙамға ташланырға һәр ваҡыт әҙер тороусы ысын граждандар тәрбиәләнеүе тураһында һөйләй.

## АФАРИН!

# БАШҠОРТ ТЕЛЕ...

## Мәскәүҙә бәйге тотто



**Уҙған аҙна ҡыуаныслы яңылыҡ менән тамамланды: Мәскәүҙә үткән Туған тел уҡытыусыларының Бөтә Рәсәй оҫталыҡ дәресе конкурсының һөҙөмтәләре билдәле булды һәм унда барлыҡ пьедесталды тиерлек республикабыҙ педагогтары яуланы. 2-се "СМАРТ" Республика полилингваль киң профилле гимназияһының башҡорт теле уҡытыусыһы Ләйсән Мостафина менән 308-се Башҡорт балалар баҡсаһы тәрбиәсеһе Рәшиҙә Ғибәҙуллина (һүрәттә) үҙ номинацияларында беренсе урынға лайыҡ булды. Шулай уҡ Мәсетле районы Оло Ыҡтамаҡ ауылындағы Башҡорт гимназияһының башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы Зилә Миңлебаева, Дыуан районы Мәсәғүт ауылының 2-се балалар баҡсаһы тәрбиәсеһе Юлиә Фәтҡуллина үҙ номинацияларында 3-сө урынға лайыҡ булды.**

(Дауамы 6-сы биттә).

12+

БАШ ҠАЛАМ

# ӨФӨ ЯЙЛАП, әммә сифатлы үҙгәрә

**Өфөгә, республиканың баш ҡалаһы булараҡ, төбәк етәкселеге тарафынан иғтибар ҙур. Шулай уҡ ҡала хакимиәте лә үҙ эшен урын-еренә еткереп эшләй, тип әйтергә була. Һәр хәлдә, илдәге башҡа республикаларҙың баш ҡалаларынан ҡайтыш еребеҙ юҡ. Шулай ҙа һәр саҡ тағы ла яҡшыраҡ булырға ынтылыуҙан туҡтарға ярамай. Ә бының өсөн ҡалалағы һәр ойошма, шәхси эшҡыуарҙар Өфөбөҙҙө тағы ла күркәмләндереү, яҡшы шарттар булдырыу өсөн үҙ тырышлығын һалырға бурыслы.**

Ҡалала күп төрлө спорт үҙәктәре эшләй. Мәҫәлән, шул уҡ олоһо ла, кесеһе лә ябырылып йөрөгән "Динамо" спорт-һауыҡтырыу үҙәген алайыҡ. Эш яҡшы ойошторолған, һәр нәмә тәртиптә һәм үҙ урынында. Ләкин килеүселәрҙең машинаһын ҡуйыр урын тапмауы ғына уның эшмәкәрлегенә тап өҫтәй. Ә, бәлки, ундағы шлагбауымды алып ҡуйыу хәлде яҡшыртыр, сөнки был осраҡта әллә күпме машина ҡуйыу урыны барлыҡҡа килер ине.

Шулай уҡ ҡайһы бер ойошмалар алдында түшәлгән плитә ҡышын бик тайғалаҡҡа әйләнә. Һәм, күп осраҡта, был хаҡта иҫкәртҡән иглан да булмай. Ошо йәһәттән дә тейешле эштәр атҡарылыр, тип өмөтләнәм.

Өфөләр һәм баш ҡала ҡунаҡтарына ял итеү шарттарын яҡшыртыуҙарын күреү ҡыуаныс. Мәҫәлән, Черниковка бисҭәһендәге "Беренсе май" паркы күҙгә күренеп үҙгәрҙе: оҙаҡ йылдар ҡоро торған фонтандан һыуҙар урғыла, балалар өсөн майҙансыҡтар һәр яҡтан уйланылған, спорт яратыусылар өсөн дә шарттар булдырылған. Парктың хатта үҙ амфитеатры бар. Беҙ, ошо бисҭәлә йәшәүселәр, был үҙгәрештәргә һөйөнөп бөтә алмайбыҙ.

Студент ҡыҙымдың Өфөләге иң яратҡан урыны - тотош бер кварталды биләп торған "Арт-квадрат". Ысынлап та, бында тәмле итеп ашап алырға ла була, төрлө магазиндар күп, концерт һәм спектаклдәр йыш була, ғөмүмән алғанда, "Арт-квадрат" бөтәһенең дә күңеленә хуш килгән урын. Юҡҡамы ни, баш ҡалаға килгән һәр ҡунағын өфөләр нәҡ ошо урынға алып килергә тырыша. Шулай уҡ ҡала буйлап сәйәхәт иткәндәрҙе лә мотлаҡ был урынды күрһәтергә алып киләләр.

Беҙҙең Өфө үҙгәрә, был шикһеҙ. Ләкин ул ҡабаланмай, яйлап ҡына үҙгәрә. Баш ҡалала ниндәйҙер ҙур үҙгәреш булһын өсөн Өфөлә күләмле сара үтергә тейеш. Мәҫәлән, ШОС һәм БРИКС саммиттары өсөн әҙерлек барышында Өфө иҫ киткес үҙгәрҙе. Һәм бына баш ҡаланың 450 йыллығына ҡарата ла байтаҡ эштәр башҡарыла. Шуға күрә Өфөнөң тиҙ үҙгәреүен көтөргә ярамай, миненсә - бында барыһы ла һәлмәк кенә, әммә юғары кимәлдә үҙгәрә. Ошо үҙенсәлегебеҙ менән дә беҙ, өфөләр, бәлки, күптәрҙән айырылабыҙҙыр әле. Һәр эштә лә тиҙлек түгел, ә сифат тәүге урында тора икәнлеген онотмайынса ғына үҙгәрештәр кисереп йәшәп ятабыҙ.

**Илдус ӘХМӘТЙӘНОВ.**

БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР

# ТЫНЫСЛЫҠТА ЙӘШӘРГӘ ИНЕ



**Йыһанда дежур итеүсе: "Американың йыһан карабы боҙолоп, Айға төшөргә мәжбүр булды. Юғары техник приборҙар ярҙамында өс ай төҙәткәндән һуң ғына кире Ергә осоп киттеләр. Ә бер аҙна элек Айға Рәсәй йыһан карабы боҙолоп төшкәйне, улар балға (кувалда) һәм ниндәйҙер "Инәң..." тигән һүҙ ярҙамында өс көн эсендә төҙөкләнеп, осоп киттеләр", - тип доклад яһай. Был көләмәс булды...**

Бик күптән бер кино ҡарағайным. Ул фильмда ла йыһан карабы һәләкәткә осрап, Айға туҡталыш яһай. Карапта ике генә космонавт. Уңышлы ғына барып төшәләр, әммә ҡурҡып, ҡаушап, артабан ни ҡылырға белмәй ултыралар былар тынып. Шул саҡ күрәләр: Ай кешеләре килеп етеп, быларға ҡул болғай - тәбрикләй башлайҙар, аҙаҡ бәшмәк ашы менән һыйлайҙар. Бер-береһенең телдәрен белмәһәләр ҙә, йыһан "тылсымы" буйынса аңлашалар. Ай кешеләре шундай ихластар, гел яҡшылыҡ, гел гүзәллек хаҡында һөйләйҙәр. Космонавтар ҙа ягымлылыҡ менән яуап бирергә тырыша, уларҙы төрлө тиҙгенән тәмләп һыңлап сығарыла торған ризыҡтар менән һыйлайҙар.

Бер көндө иң оло йәштәге Ай кешеһе Ерҙәгеләрҙең тормошо менән ҡыҙыҡһынып, төрлө һорауҙар бирә башлай. Космонавтарҙың береһе: "Ерҙә тыныс түгел, бер туҡтауһыҙ һуғыштар ҡубып ҡына тора", - тип, һуғыштың ни икәнен һөйләп бирә. Оло йәштәге Ай кешеһе һуғыш тигән һүҙҙе тәү тапҡыр ишетә һәм ҡурҡыуға ҡала...

Бына, ниһайәт, карапты ремонтлау тамамлана. Космонавтарҙың береһе Ай кешеләре менән хушлашҡанда, теге оло йәштәгеһе шулай ти: "Беҙҙә, Айҙа, көкөрт яткылыҡтары ҡалын ҡатламдар булып ята. Планетабыҙҙы һаҡлау өсөн беҙ ҙә шул көкөрттән бомбалар яһай башларбыҙ, ахыры...", - ти. Космонавтар һуғыш тураһында һөйләп, Ай кешеләрен ҡурҡытыуҙарына бик үкенә. Уларҙың береһе Айҙа йәшәргә ҡалырға хәл итә. Ә кино икенсе космонавтың Ергә ҡайтып китеүе менән тамамлана...

Һуғыш нимә икәнен, ҡайғы нимә икәнен белмәй йәшәһәң ине шулай...

**Фәүзиә ЯХИНА.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

?

***Ошо арала РФ Президенты Рәсәй халҡының традицион рухи-әхлаҡи ҡиммәттәрен һаҡлау һәм ныҡытыу буйынса дәүләт сәйәсәте нигеҙҙәрен раҫлау хаҡында указға ҡул ҡуйҙы. Рухи ҡиммәттәребеҙҙе һаҡлау буйынса беҙ ниҙәр эшләйбеҙ һәм эшләй алабыҙ?***

***Ғәли ФӘХРЕТДИНОВ, педагог, Башҡортостандың атҡаҙанған мәғариф отличнигы, Баймаҡ ҡалаһы:*** Һуңғы осорҙа мәғлүмәт сараларында Рәсәй Президенты Владимир Путиндың мәктәптәрҙә тыуған төбәк тарихын уҡытыуҙың берҙәм ысулдары хаҡында, шулай уҡ традицион рухи ҡиммәттәребеҙҙе һаҡлау һәм ныҡытыу, йәш быуынға ошо ҡиммәттәр нигеҙендә тәрбиә биреү хаҡында фекер алышыуҙар бара. Был мәсьәләгә ҡарата мин дә үҙ фекеремде белдерергә киткем килә.

Бөгөн ил яҙмышы, уның хәүефһеҙлеге, именлеге, хатта киләсәге көн тәртибендә торғанда, йәш быуынды илһөйәрлек рухында тәрбиәләү алға ҡуйылырға тейеш. Тарихын, рухи тамырҙарын белмәгән халыҡтың киләсәге юҡ, тибеҙ. Башҡортостан мәктәптәрендә 1993 уҡыу йылынан Башҡортостан тарихы һәм мәҙәниәте предметы уҡытыла башлағайны. Үҙем ул ваҡыт ошо дәрестән уҡытҡанға күрә, уның балалар өсөн ниндәй кимәлдә әһәмиәтле булыуын яҡшы беләм. Үкенескә, 2010 йылдарҙа мәктәптәрҙә тыуған яҡты өйрәнеү предметы программанан төшөрөп ҡалдырылды, урынына уҡытыусылар өсөн дә аңлашылып етмәгән донъя ҡиммәттәрен өйрәтеү буйысы ҡуйылды. Ә бит һәр бала бәләкәй сағынан иң тәүҙә үҙенең тыуған телен, мәҙәниәтен, тарихын белеп, өйрәнеп үҫергә тейеш. Шул саҡта ғына ул башҡа милләт вәкилдәрен хөрмәт итергә, тарихын белергә өйрәнә. Шуның өсөн дә бит Рәсәй үҙенең төбәктәре менән көслө, тибеҙ. Һәр милләттең үҙ мәҙәниәте, тарихы, башҡа рухи байлыҡтары бар һәм улар барыһы ла ватаныбыҙҙың ураҡ ҡиммәттәре иҫәпләнә. Тимәк, һәр милләттең йәш быуыны мәктәп йылдарынан уҡ туған телен, тарихын, рухи-мәҙәни хазиналарын өйрәнергә, белергә, һаҡларға тейеш.

Шәхси архивымда "История Башкирской АССР" (учебное пособие для учащихся 7-10 классов, 4-е издание. Уфа, 1980 г.) дәреслеге һаҡлана. Тимәк, совет осоронда уҡ төбәк тарихын өйрәнеүгә иғтибар булған, тип әйтмәксемен. Тик әлеге буласаҡ уҡыу әсбабы авторҙарына тарихи дөрөҫлөктө сағылдырған дәреслектәр әҙерләү кәрәк. Мәктәптәрҙә тыуған яҡ тарихын уҡытыуға берҙәм ҡараш булдырыу - бөгөнгө көн талабы ул.

Илһөйәрлек тураһында һүҙ барғанда, уҡыусыларҙы кесе йәштән үк, балалар баҡсаһынан, башланғыс кластарҙан уҡ тәрбиәләй башларға кәрәк. Һәм, әлбиттә, был юҫыҡта ғаилә тәрбиәһе тураһында әйтеп тороу ҙа кәрәкмәйҙер. Атаәсәнең балаһына үҙ нәҫелырыуы, йәғни ғаилә шәжәрәһе, тыуған ауылы, уның ер-һыу атамалары хаҡында һөйләп, аңына һеңдереүе көндәлек тормош ҡағиҙәһенә әүерелһен ине. Артабан бала үҙенән-үҙе ҡыҙыҡһына, һорауҙар менән күмә башлаясаҡ. Совет осоронда пионер, комсомол ойошмалары йәш быуынға тәрбиә биреүҙә, уларҙы илһөйәрлек рухында үҫтереүҙә ҙур әһәмиәткә эйә булды. Мәктәптәрҙә хәрби әҙерлек дәрестәре бар ине. Ярайһы бай ғына матди база ла булды һәр мәктәптә. Был дәрестәрҙе лә юҡҡа сығарҙылар. Бына хәҙер ҡатмарлы осорҙа шул дәрестәрҙе ҡайтанан тергеҙеү мәсьәләһен күтәреп сыҡтылар. Ул ғына ла түгел, ҡайһы бер мәктәптәрҙә ошо программаға ярашлы дәрестәр үткәрелә лә башланы, ә был, һис шикһеҙ, хуплауға ғына лайыҡ. Элек бит урта мәктәптә тамамлаған егеттәр армия хеҙмәтенә башланғыс әҙерлек алып, ҡоралды нисек тотонорға, йыйып-ҡорорға белеп китә инеләр. Күбеһе мәктәптә үк водитель, тракторсы һөнәрен үҙләштерҙе. Бөгөн был эш яңынан башлана. Шул уҡ мәктәптәрҙә шайморатовсылар, кадет кластары асыу быға аныҡ миҫал, һәм был дөрөҫ йүнәлеш, тип иҫәпләйем. Боронғо Рим тарихсыһы Корнелий Непот беҙҙең эраға тиклем 1 быуатта уҡ яҙып ҡалдырған: "Тыныслыҡ теләһәң, һуғышҡа әҙерлән". Беҙ һуғыш теләмәйбеҙ, әммә егет-ҡыҙҙарыбыҙҙы илде һаҡларлыҡ шәхестәр итеп тәрбиәләргә, уҡытырға тейешбеҙ, заман шуны талап итә.

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Рәсәй Президенты Владимир Путин Хөкүмәт менән кәңәшмәлә 2023 йылдың ғинуарында бюджет хеҙмәткәрҙәренең эш хаҡын индексацияларға ҡушты. Президент билдәләүенсә, әлегә ун төбәк кенә бюджет хеҙмәткәрҙәренең эш хаҡы буйынса маҡсатлы күрһәткестәрҙе үтәй, "уныһы ла йөҙ процентҡа түгел". Рәсәйҙең финанс министры Антон Силуанов билдәләүенсә, "Киләһе йылда пенсия 1 мең һумға, бюджет өлкәһе хеҙмәткәрҙәренең эш хаҡы иһә 8 проценттан ашыуға арта". Хәрбиҙәргә килгәндә, барыһы ла ҡабул ителгән ҡарарҙар сиктәрендә бара, тип билдәләне Силуанов.

✓Дәүләт Думаһына махсус хәрби операцияла ҡатнашыусыларҙың иҫәбендәге аҡсаға арест һалыуҙы тыйған төҙәтмәләр индерелде. "Был үҙгәрештәр мобилизацияланғандарға һәм ирекмәндәргә ҡарата суд эштәрен туктатыу тураһындағы закон проекты икенсе уҡыуға иҫәпкә алына", - тиелә Дәүләт Думаһының рәсми белдереүендә.

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров республиканан мобилизацияланған ир-егеттәргә һәм уларҙың ғаиләләренә өҫтәмә ярҙам саралары исемлегенә үҙгәрештәр индереү тураһындағы бойороҡҡа ҡул ҡуйҙы. Хәҙер махсус хәрби операцияла ҡатнашыусылар һәм уларҙың ғаилә ағзалары ҡаты коммуналь ҡалдыҡтар менән эш итеү буйынса хеҙмәттәр, торлаҡ йәки коммуналь хеҙмәттәр өсөн ваҡытында түләмәгән осраҡта пеняларҙан, шулай уҡ йорттоң дөйөм мөлкәтен капиталь ремонтлауға аҡса түләүҙән азат ителде.

✓Башҡортостанда тиҙҙән "Медсанбат" колл-үҙәге эш башларға тейеш. Операторҙар махсус хәрби операцияла ҡатнашыусыларға нисек һәм ҡайҙа тикшереү йәки реабилитация үтеү, Башҡортостан шифаханаларында сәләмәтлекте нығытыу кеүек һәм башҡа һорауҙарға яуап бирә. Был хаҡта Республика һуғыш ветерандары клиник госпиталенең баш табибы Хәлил Мостафин белдерҙе. Уның һүҙҙәренсә, әлеге ваҡытта республикала 349 кеше - стационарҙа, 999-ы амбулатор шарттарҙа дауаланған, 6 пациентҡа юғары технологиялы медицина ярҙамы күрһәтелгән.

✓Башҡортостанда Донецк, Луганск халыҡ республикалары, Херсон һәм Запорожье биләмәһендә махсус операцияла ҡатнашҡан яугирҙәрҙең балалары дәүләт колледждарында һәм техникумдарында урта һөнәри белем алыу өсөн сертификаттар менән тәьмин ителә. Был тураһағы ҡарарға республика премьер-министры Андрей Назаров ҡул ҡуйған.

ЙӘН ӘРНЕҮЕ

# ҠЫҘҘАРЫБЫҘҘЫҢ...

## ситтәргә китеүе аяныс



**Яңыраҡ юғары һәм унан да юғарыраҡ белемле әһелдәр араһында бер мәжлестә булдым. Һүҙ, ғәҙәттәгесә, балаларыбыҙ хаҡында башланды. Күптән күрешмәгәнбеҙ, һөйләшер һүҙ, бер-беребеҙҙе һөйөндөрөрлөк яңылыҡтарыбыҙ күбәйеп киткән. Алмаш-тилмәш һүҙ алалар, телмәр тоталар...**

Бына бер ҡунағыбыҙ ҡыҙының инглиз егетенә кейәүгә сығыуын әйтте. Әйтеп кенә ҡалманы, инглиздәрҙең башҡорт егеттәре һымаҡ эсеп, ғаиләһен хәстәрләмәй йөрөмәүен, ә иҫ китмәле донъясыл, бик мәҙәниәтле, әҙәпле, итәғәтле булыуын маҡтап алып китте. Тағы бер ҡатын ике ҡыҙының да төрөк егеттәрен һайлауын белдерҙе. Икенсе бер ҡатын, уларға яуап итепмелер: "Үҙебеҙҙәге урыҫ егеттәре бынамын тигән, ҡыҙҙарығыҙҙы урыҫ егеттәренә бирегеҙ", - тип ысҡындырҙы. Ауыҙыма ҡапҡан икмәкте йота алмай, бөтөн тәнем ҡалтыранып, тынəслана алмай аҙапландым. Улай ҙа була икән - тамаҡ һыҡыны ла ҡуйҙы. Мин ауыл мәктәбендә ғүмерем буйы тарих уҡыттым, һуңғы йылдарҙа мәктәптәрҙә "Башҡортостан тарихы" ингәс, ихласлап ошо дәресте алып бара башланым. Был башҡорт бисәләре (ни өсөндөр ирҙәр өндәшмәне, ә бит улар телмәрендә башҡорт ирҙәре кәмһетелә ине) кейәүҙәрен маҡтаған мәлдә, күҙ алдымдан башҡорт яуҙарын үткәрҙем. Илем, телем, ерем, халҡым, киләсәгем, милләтем, тип баш һалған, ҡабырғаларынан аҫтырылған, ауылы-ауылы менән яндырылған, ҡаҙыҡтарға ултыртылған атай-олатайҙарыбыҙ рухы алдында тубыҡландым. Күңелемдән тубыҡландым, шул уй тамағыма төйөр булып тығылды ла ҡапҡан ризығымды йота алмай ултырҙым...

- Һинекеләр ҡайҙарҙа? - тип, минән дә һорар сират етте. Ҡатыным ауылда ҡалғайны, мин ҡунаҡҡа осраҡлы ғына барып юлыҡҡайным.

- Ҡыҙҙарымды башҡа милләткә тоттороуҙан һаҡлаған Хоҙайға рәхмәт. Ҡыҙҙарымды илһөйәр итеп тәрбиәләгән ҡатыныма рәхмәт. Инде Раббым ейән-ейәнсәрҙәремде лә ул афәттән һаҡлаһын! - тинем яуап итеп.

- Хоҙай алдында барыбыҙ ҙа бербеҙ. Хоҙай өсөн милләт юҡ, - тине ике кейәүе ике төрлө милләттән булған ҡатын.

- Библияла ла, Ҡөрьәндә лә Хоҙайҙың ырыуҙар һәм халыҡтарҙы айырым яралтыуы тураһында әйтелгән. Шуны белмәйһегеҙҙәме ни?

Ҡатын өндәшмәне. Әммә икенсеһе, ҡыҙҙарын төрөккә биргәне, һөжүмде дауам итте.

- Ауылда йәшәйбеҙ, тиһегеҙ бит. Ауылда ни әллә кемде һайлап булмай инде...

- Иң кинйә улым Мәскәү дәүләт университетын тамамланы. Әле уға кәләш әйттерергә йөрөйбөҙ. Киленебеҙ ҙә Мәскәүҙә уҡыған Бөрйән башҡорто, - тип ауыҙын яптым ябыуға был ҡатындың. Әммә... Бындағы юғары белемле, хатта профессор дәрәжәһенә еткән ҡунаҡтарға ни ҙә булһа аңлатыу йәки хаталарын таныттырыу ғәмәлдә тормошҡа ашмаҫ ынтылыш икәнен аңлағайным инде...

Дөрөҫ, Хоҙай алдында барыбыҙ ҙа бербеҙ. Бер милләт тә бер-береһенән кәм дә, артыҡ та түгел. Һәр милләт матур, аҡыллы, зирәк, әҙәпле, тәрбиәле. Һәр милләт йәшәргә хаҡлы. Әммә ни өсөн башҡа милләт вәкилдәрен башҡортто кәмһетеү иҫәбенә маҡтарға? Бер кем дә, бер сәйәсәт тә ғаилә тәрбиәһенә ҡыҫылмай, уға ҡаршы яу асмай. Әммә милләтебеҙ киләсәген-тамырын ҡороторлоҡ бындай яуҙы үҙебеҙгә ҡаршы үҙебеҙ асып, өҫтәүенә, ошо хатаны - Хоҙай юлынан тайпылышты - аҡлар өсөн, үҙ милләтеңде кәмһетеп, яманлап, асылда иһә, тәғәйен үҙеңдән көлөп ултырыу бер ниндәй ҡалыпҡа һыйырлыҡ эш түгел. Ябай ғына шул хәҡиҡәтте лә төшөнмәйҙәрме икән ни! Тарихҡа төшөп уйланмағанда ла эргәңдә ултырған иреңдән, һине үҫтергән атай-әсәйеңдән, ниһайәт, үҙеңдән көлөү, мыҫҡыллау бит был. Башҡорт ирҙәре, башҡорт егеттәре, ысынлап та, ер йөҙөндәге бөтөн милләт егеттәренән дә кәмерәкбеҙме ни беҙ? Ҡыҙҙарыбыҙ кемдәргә генә кейәүгә сыҡмай ҙа, кемдәргә генә бала үҫтермәй хәҙер!

Береһенән-береһе уҙҙырып, кейәүҙәренең, килендәренең милләтен маҡтай-маҡтай ултырып ҡалды ҡунаҡтар. Мин ҡайтып киттем. Тик ҡайҙа барғанымды ла, ҡайһы яҡҡа атлағанымды ла тоймаһым. Бер аҙ атлағас ҡына: "Ҡайҙа барам әле мин?" - тип, күтәрелеп ҡараным да урам исемен уҡыным. Барыр йүнәлешемде таптым. Һеҙ ҙә, ултырҙаштар, табындаштар, "Ҡайҙа барабыҙ һуң беҙ?" тигән һорау менән (әгәр төҙөлгән булһа) ырыу шәжәрәгеҙгә күҙ ташлағыҙсы!

**Ишмырҙа ТАШБУЛАТОВ.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

?

***Ошо арала РФ Президенты Рәсәй халҡының традицион рухи-әхлаҡи ҡиммәттәрен һаҡлау һәм нығытыу буйынса дәүләт сәйәсәте нигеҙҙәрен раҫлау хаҡында указға ҡул ҡуйҙы. Рухи ҡиммәттәребеҙҙе һаҡлау буйынса беҙ низәр эшләйбеҙ һәм эшләй алабыҙ?***

***Мәрйәм БУРАҠАЕВА, яҙыусы, педагог, журналист, "Тормош һабаҡтары" дәреслеге авторы:*** Рухи-әхлаҡи ҡиммәттәребеҙҙе һаҡлау буйынса дәүләт сәйәсәте нигеҙҙәрен раҫлау тураһында ҡарар сығарылды, ниһайәт! Ниһайәт, тием, сөнки нисә йылдар инде Башҡортостаныбыҙҙа туған телебеҙҙе, халҡыбыҙҙың рухи хазиналарын, традицияларыбыҙҙы, тыуған төйәгебәҙ тарихын өйрәнеү һәм шул нигеҙҙә йәш быуынды илебеҙҙе һөйгән граждандар, кәрәк була икән, уның мәнфәғәттәрен яҡларға һәм һаҡларға әҙер торған илһөйәрҙәр итеп тәрбиәләү өсөн ыҙғыш-тартышҡа тап булдыҡ; был йәһәттән изге маҡсаттарыбыҙға чиновник тыйыуҙары, волокита юлыбыҙҙы быуып торҙо.

Шуға ҡарамаҫтан, ошоға тиклем барыбер ҙә милли мөхитебеҙҙә рухи традицияларыбыҙ нигеҙендә тәрбиә биреү йолаһы йәшәп килде һәм киләсәктә лә йәшәйәсәк. Ул алыҫ 90-сы йылдарҙа, коммунистар партияһы идеологияһы юҡҡа сыҡҡас, халҡыбыҙ аптыранып ҡалған саҡтарҙа, үҙебеҙҙең милли рухыбыҙға тап килгән идеология кәрәк ине. Беҙ быны эшләй ала инек һәм эшләнек тә, сөнки бының өсөн нигеҙ, ерлек бар ине - беҙҙең башҡорт халҡы рухын, милли үҙенсәлектәрен, традицияларын, иң мөһиме - милли аңын, рухын һаҡлап ҡалған. Ошо хазиналарыбыҙҙы киләсәк быуындар өсөн һаҡлап ҡалыу маҡсатында башҡорт кластары, балалар баҡсаларында башҡорт төркөмдәре асылды. Улар өсөн халҡыбыҙ педагогикаһы нигеҙендә эшләнгән "Тормош һабаҡтары" концепцияһы: яңы предмет һәм уның буйынса программа тап ана шул йылдарҙа барлыҡҡа килде лә инде. Ҡыҙғаныսҡа, ҡыуанысыбыҙ оҙаҡҡа барманы, уҡытыусылар ҙа, балалар ҙа яратып өлгөргән был дәресте уҡытыу программаһынан алып ташланылар. Ә бит Президентыбыҙҙың әлеге указында тап ана шул ваҡытында беҙҙә тыйылған концепция - Рәсәйҙең күп милләтле халҡының рухи, тарихи һәм мәҙәни үҫеше, йәш быуынды Ватаныбыҙҙы һөйгән, тарихыбыҙға, юғары әхлаҡ ҡиммәттәребеҙгә ихтирамлы, дөйөм кешелек хазиналарына тоғро һәм уны һаҡлаусылар итеп тәрбиәләү бурысы тураһында һүҙ алып барыла түгелме?

Шуныһы ҡыуандыра: ҡайһы бер энтузиаст һәм юғары кимәлле илһөйәр уҡытыусыларыбыҙ программала юҡ тип, "Тормош һабаҡтары"н уҡытыуҙы ташлап ҡуйманы. Ошо урында "Башҡортостан тарихы" дәрестәрендә олуғ ғалимдарыбыҙ Ғайса Хөсәйенов менән Рәшит Шәкүрҙең тарихи шәхестәребеҙ өлгөһөндә хәҙерге быуынды тәрбиәләрлек хеҙмәттәрен уңышлы файҙаланырға булыр ине, тип тә әйтмәксемен. Һүҙ уларҙың "Алдар батыр ҡиссаһы", "Пугачев фельдмаршалы", "Мөхәммәтсәлим Өмөтбаев", "Арҙаҡлы башҡорттар", "Ҡанлы илле биш", "Быуаттар аманаты" әҫәрҙәрен билдәләп киткем килә. Тағы ла шуны ҡабатлауҙан туҡтамайым: үлемһеҙ "Урал батыр" эпосыбыҙ - тотош ҡына халыҡ педагогикаһы мәктәбе ул. Уны мәктәптә лә, вуздарҙа ла, шулай уҡ бигерәк тә ғаиләләрҙә бергәләп уҡыу, өйрәнеү һәм анализлап, төп фекер ебенә төшөнөү, аңға һеңдереү кәрәк, сөнки эпоста төрлө ғилем тармаҡтары буйынса фекерҙәр байтаҡ. Бынан тыш, һәр кемебеҙгә лә әҫәрҙең фәлсәфәһен, әхлаҡи, тәрбиәүи ҡанундарын төшөнөү фарыз. Урал батырҙың кешелеккә әйтеп ҡалдырған васыяты - "Яҡшылыҡ булһын атығыҙ, кешелек булһын затығыҙ; яманға юл ҡуймағыҙ, яҡшынан баш тартмағыҙ!" тигән һүҙҙәре бөгөнгө көнөбөҙҙөң иманы, аҡылы, мәңгелек тәрбиә һабағы бит ул.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**

Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостанда биш һәм унан да күберәк бала тәрбиәләгән 30 ҡатын-ҡыҙ "Әсәлек даны" миҙалы менән бүләкләнә. Бүләкләнеүселәр араһында - Баймаҡ, Балтас, Белорет, Бишбүләк, Бәләбәй, Бөрө, Бөрйән, Дәүләкән, Дыуан, Ишембай, Ҡыйғы, Мәләүез, Мәсетле, Стәрлетамаҡ, Учалы, Саҡмағош районДарынан, Нефтекама, Күмертау һәм Өфө ҡалаларынан әсәләр бар. Миҙал 1998 йылда булдырылған. Ошо йылдар эсендә уға һигеҙ меңдән ашыу әсә лайыҡ булған. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, "Әсәлек даны" миҙалы менән бүләкләнгән күп балалы әсәләргә бер тапҡыр 50 мең һум аҡса түләнә.

✓Салауат районы Әлкә ауылы егете Марат Закиров махсус хәрби операцияла ҡатнашҡан өсөн Рәсәй Президенты указы менән Жуков миҙалы менән бүләкләнгән. Инженер-сапер подразделениеһы составындағы кесе сержант баҫыуҙарҙы, юлдарҙы һәм тораҡ пункттарҙы минанан таҙартҡан. Йыш ҡына дошмандың көслө уты аҫтында эшләргә тура килгән. Яҡташыбыҙ ҡуйылған барлыҡ бурыстарҙы теүәл үтәгән. Ә был ваҡытта уның өйөндә ҡыҙы тыуған, тип хәбәр итә "Салауат ерендә" гәзите.

✓Рәсәй Хөкүмәте төбәктәрҙең агросәнәғәт комплексы объекттарын төҙөү һәм яңыртыу өсөн сығымдарын өлөшләтә ҡаплай. Документҡа ярашлы, Башҡортостанға ошо маҡсатҡа 600,13 миллион һум бүленә. Аҡса һөтсөлөк һәм ит фермаларын, ауыл хужалығы продукцияһы һаҡлағыстарын, селекция-орлоҡсолоҡ һәм тоҡомсолоҡ үҙәктәрен төҙөүгә һәм ремонтлауға сығымдарҙың бер өлөшөн ҡаплай. Һүҙ илдең 43 төбәгендә 152 инвестиция проекты хаҡында бара.

✓Башҡортостандың баш ҡалаһынан Сәмәрҡәндкә тура рейстар асыла. Осош программаһы 2023 йылдың мартында эшләй башлай. Хөкүмәтара килешеүгә тейешле үҙгәрештәр индерелгән, тип хәбәр итте баш ҡала аэропортының генераль директоры Александр Андреев. Бынан тыш, киләһе йылдың майынан Минскиға тура рейстар асылырға тейеш. Самолеттарҙың ошо йүнәлештә осоуы уҡыусылар менән алмашыу программаларын тормошҡа ашырырға мөмкинлек бирә, тип билдәләне Радий Хәбиров.

*ҠЫҪҠАСА*

# ЛАЙЫҠЛЫЛАРҒА...

**Башҡортостанда 690-шар мең һумлыҡ грантҡа эйә булған урта һөнәри белем биреү йорттары уҡытыусыларының исемлеге раҫланды.** Тейешле бойороҡҡа Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров ҡул ҡуйған. "Башинформ" агентлығы хәбәр итеүенсә, эшендә юғары ҡаҙаныштарға ирешкән уҡытыусылар 690 мең һум аҡса алыу мөмкинлегенә эйә. Шарттар буйынса улар төп эш урынында кәмендә биш йыл эшләргә тейеш. Ошо уҡ ойошмала яңы вазифаға йәки өс йылдан һуң икенсе урта махсус уҡыу йортонда шундай уҡ вакансияға күсергә рөхсәт ителә. Дүрт йыл дауамында мастерҙар һәм уҡытыусылар республиканың Мәғариф министрлығына эш урыны тураһында белешмә тапшырырға тейеш. Алдан билдәләнгән ваҡыттан иртәрәк эштән киткән осраҡта аҡсаны республика ҡаҙнаһына кире ҡайтарырға кәрәк. Грант быйыл майҙа Радий Хәбировтың указы буйынса булдырылды.

✓**2022 йылдың 1 декабрендә илдә торлаҡ-коммуналь хужалыҡ хеҙмәттәренә тарифтар индексацияланды.** Рәсәй Федерацияһы Хөкүмәтенең 2022 йылдың 14 ноябрендәге 2053-сө ҡарарына ярашлы, республикабыҙҙа коммуналь хеҙмәттәр өсөн түләүҙәр уртаса 9 процентҡа арта. 1 декабрҙән Башҡортостанда электр энергияһына хаҡ уртаса 9 процентҡа, газға иһә 8,5 процентҡа күтәрелә. Һыу менән тәьмин итеү, һыу бүлеү, йылытыу, сүп-сар сығарыу хеҙмәттәре лә ҡиммәтләнә, ләкин 9 проценттан артырға тейеш түгел. Башҡортостандың Тарифтар буйынса дәүләт комитетында билдәләүҙәренсә, Рәсәй Федерацияһы хөкүмәтенең тарифтарҙы индексациялау ваҡытын 2023 йылдың 1 июленән 2022 йылдың 1 декабренә күсереү тураһында ҡарары илдә торлаҡ-коммуналь хужалыҡтың өҙлөкһөҙ эшен һәм инфраструктураһы үҫешен тәьмин итеү, халыҡҡа сифатлы коммуналь хеҙмәттәр күрһәтеү кәрәклеге менән аңлатыла. Бынан һуң тарифтар 2024 йылдың 1 июленә тиклем индексацияланмай.

✓**Башҡортостанда Ҡаҙағстан Республикаһының почетлы консуллығы институты булдырылды.** Был хаҡта республика Хөкүмәтенең оператив кәңәшмәһендә Башҡортостандың тышҡы иҡтисади бәйләнештәр һәм конгресс эшмәкәрлеге министры Маргарита Болычева хәбәр итте. Институт Өфөлә урынлашасаҡ, Башҡортостандың баш ҡалаһында Ҡаҙағстандың почетлы консулы итеп Семен Пилюгин тәғәйенләнде. "Институтты ойоштороуҙы раҫлаған документты ноябрь айында алдыҡ. Бөтә вәкилдәрҙең дә бәйләнеш өсөн мәғлүмәттәрен министрлыҡ сайтында ҡарарға мөмкин", - тип билдәләне Маргарита Болычева.Уның әйтеүенсә, Башҡортостандың тышҡы сауҙа әйләнешендә Ҡаҙағстан 9 процентҡа яҡын өлөш менән икенсе урынды биләй.

✓ **Республикала икенсе балаға әсәлек капиталы 779 мең һумға тиклем арта.** Түләнгән, әммә әлегә файҙаланылмаған әсәлек капиталы 2023 йылдың 1 февраленән инфляция кимәле буйынса индексациялана. Был хаҡта "Аңлатабыҙ. Башҡортостан" порталы хәбәр итә. Әгәр ғаилә тәүге балаға аҡса алмаған булһа, икенсе балаға әсәлек капиталы 779 мең һумғаса, аҡсаны алған осраҡта 589,5 мең һумға тиклем арта. Әсәлек капиталының бер өлөшө тотонолһа, файҙаланылмағаны индексациялана. Әсәлек капиталын белем биреүгә, торлаҡ шарттарын яҡшыртыуға (шул иҫәптән ипотекаға), әсәнең пенсияһының тупланма өлөшөн булдырыуға, инвалид балаларҙы йәмғиәттә социаль яраҡлаштырыуға, 3 йәшкә тиклемге балаларға айлыҡ түләүгә тотонорға мөмкин.

*ТӨРЛӨҺӨНӘН*

# МӨҺИМ ТЕМАҒА ҺӨЙЛӘШЕҮ



**Ошо көндәрҙә "Торатау" конгресс-холында билдәле сәйәсмәндәр, ғалимдар, журналистар ҡатнашлығында РФ Президентының Рәсәй халҡының традицион рухи-әхлаҡи ҡиммәттәрен һаҡлау һәм нығытыу буйынса дәүләт сәйәсәте нигеҙҙәре тураһындағы указы буйынса түңәрәк ҡор ойошторолдо.**

Башҡортостан халыҡтары ассамблеяһы рәйесе Зөһрә Рәхмәтуллина Рәсәй йәмғиәте күптән Көнбайыштың беҙҙең традицион ҡиммәттәргә һөжүменә ҡаршы торорлоҡ ошондай документ булдырылыуын көтөүен әйтеп үтте. "Төп маҡсат - төрлө менталитетлы, дин һәм идеалдар менән йәшәгән йәмғиәтте берләштереү. Беҙҙең традицион ҡиммәттәр аҡса эшләүҙе пропагандалаған сит ил фильмдарынан, мәҙәниәтенән яҡлауға мохтаж. Беҙ ошо яуызлыҡҡа бергәләп ҡаршы торорға тейеш", - тип билдәләне Зөһрә Йыһанур ҡыҙы.

Башҡортостан Башлығы ҡарамағындағы Кеше хоҡуҡтары һәм граждандар йәмғиәте институтын үҫтереү буйынса советтың яуаплы секретары, БР Стратегик тикшеренеүҙәр институты директоры Владимир Савичев фекеренсә, йәштәрҙең бөгөн ғаилә ҡиммәттәренең мөһимлеген, яҡындарҙың һәм туғандарҙың янда булырға тейешлеген аңлауы мөһим. "Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, беҙҙә бөтә күңел асыу индустрияһы башҡа ҡиммәттәргә йүнәлтелгән. Бөгөн беҙҙең Советтар Союзындағы кеүек бәхетле бала саҡ, яҡшы ғаиләләр тураһында балалар, үҫмерҙәр фильмдары юҡ. Быларҙың барыһы ла йәштәрҙең аңына ныҡ тәьҫир итә. Социологик һорауҙарҙан күренеүенсә, республикала йәштәрҙең 9,5 проценты ғаилә ҡорғоһо килмәй, был бик хәүефле факт. Беҙҙең маҡсат - тормоштоң яңы моделен һәм традицион ҡиммәттәргә яраҡлашҡан социаль мөнәсәбәттәр булдырыу", - тине Владимир Савичев.

Традицион ҡиммәттәргә кешенең ғүмере, хоҡуғы, азатлығы, илһөйәрлек, граждандыҡ тойғолары, Ватанға хеҙмәте, уның яҙмышы өсөн яуаплылыҡ хисе, юғары әхлаҡи идеалдары, ныҡлы ғаилә һәм ижади хеҙмәт инә. Зөһрә Рәхмәтуллина әйтеүенсә, хеҙмәт традициялары һәм эш кешеләренә ихтирамлы мөнәсәбәт борондан килә. Башҡортостандың күп милләтле халҡы һәр ваҡыт үҙенең хеҙмәт ҡаһарманлығы менән дан тота һәм был традициялар әле лә һаҡлана. Республика Дәүләт Йыйылышы депутаты, иҡтисади фәндәр докторы Рөстәм Ахунов хеҙмәт ҡиммәте стандарты ни тиклем юғарыраҡ, эшкә ҡарата мөнәсәбәт тә шул тиклем юғары буласаҡ, тип иҫәпләй. Уның фекеренсә, дәүләт тәбиғи, технологик, финанс ресурстарға эйә булырға мөмкин, әммә юғары квалификациялы кадрҙар булмаһа һәм кешеләрҙең үҫеш кимәле күтәрелмәһә, уның бер ниндәй фәтүәһе юҡ. Бөгөнгө тиҙ үҙгәреп торған заманда кешелек капиталының роле лә тиҙ үҫә. "Кешелек капиталы" - етештереү барышында ҡулланылған, ғаилә һәм ил өсөн мөһим булған һәләт, белем, күнекмә, интеллект һәм кеше һаулығы ул. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, әлегә беҙҙең илдә кешелек капиталы тулыһынса ҡулланылмай, Рәсәйҙә хеҙмәт ҡиммәттәрен трансформациялау бара. Шуны билдәләп китеү мөһим: яҡын киләсәктә урта һөнәри белем юғары белемгә ҡарағанда нығыраҡ һорау менән файҙаланасаҡ. Республика предприятиелары квалификациялы эшсе кадрҙарға ҡытлыҡ кисерә. Өҫтәүенә, урта һөнәри белем бөгөн йәштәргә хеҙмәт баҙарына тиҙерәк сығырға һәм аҡса эшләргә мөмкинлек бирә", - тип һыҙыҡ өҫтөнә алды ғалим.

"Киске Өфө" гәзитенең баш мөхәррире Гөлфиә Янбаеваның фекеренсә, традицион ҡиммәттәрҙе һаҡлау ғаиләлә илһөйәрлек, телһөйәрлек тәрбиәләүҙән, үҙ халҡыңдың йолаларын нығытыуҙан башлана. "Бөгөн Рәсәйгә ҡаршы ҙур мәғлүмәти һуғыш бара, ул күпкә ҡурҡынысыраҡ, беҙ уға ҡаршы тора белергә тейеш", - тип иҫәпләй журналист.

Махсус хәрби операцияла ирекмән сифатында ҡатнашҡан "Башҡорт энциклопедияһы" директоры Илгиз Солтанморатов йәмғиәткә халыҡсанлыҡ тойғоһон ҡайтарыу кәрәклегенә ышана. Уның әйтеүенсә, бөгөн икенсел стандарттар заманы үтте, махсус хәрби операция Рәсәй халҡының элеккесә дошманға ҡаршы туплана алыуын һәм үҙенең ысын рухи-әхлаҡи ҡиммәттәрен күрһәтә алды.

# БАЛАЛАРҒА - БАЙРАМ



**Башҡортостанда Яңы йыл шыршыһына уҡыу алдынғылары һәм махсус хәрби операцияла ҡатнашыусыларҙың балалары саҡырыла. Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров республикала Яңы 2023 йылды байрам итеү тураһында указға ҡул ҡуйҙы. Тейешле документ рәсми мәғлүмәт порталында баҫылған.**

Республикала Хөкүмәттең беренсе вице-премьеры Рөстәм Моратов рәйеслегендә яңы йыл сараларын әҙерләү һәм үткәреү буйынса ойоштороу комитеты төҙөлдө. Ойоштороу комитетына республикала Яңы 2023 йылды байрам итеү буйынса саралар планын әҙерләү һәм раҫлау бурысы йөкмәтелде. 22 декабрҙә республика Яңы йыл шыршыһы була. Уға Башҡортостан райондарынан һәм ҡалаларынан Донецк Халыҡ Республикаһы, Луганск Халыҡ Республикаһы, Запорожье өлкәһе, Херсон өлкәһе, Украина биләмәләрендә барған махсус хәрби операцияла ҡатнашыусыларҙың, хәрби һәм хеҙмәт бурысын үтәгәндә һәләк булған хәрбиҙәрҙең, эске эштәр органдары хеҙмәткәрҙәренең балалары, уҡыу алдынғылары, предмет олимпиадалары һәм спорт ярыштары еңеүселәре, художестволы үҙешмәкәрлек фестивалдәре лауреаттары, аҙ тәьмин ителгән ишле ғаиләләрҙән балалар, шулай уҡ һаулыҡ мөмкинлектәре сикле, етем һәм ата-әсә ҡарауынан мәхрүм ҡалған балалар саҡырыла. Уларҙың барыһына ла Яңы йыл бүләктәре тапшырыла. Башҡортостанда республика Яңы йыл шыршыһында ҡатнашҡан балаларға өс көнлөк ял ойошторола. Яңы йыл бүләктәренән тыш, һөнәри белем биреү ойошмаларында уҡыған етем һәм ата-әсә ҡарауынан мәхрүм ҡалған балаларға матди ярҙам күрһәтелә. Республиканың муниципаль район һәм ҡала округтары хакимиәттәре мәғариф ойошмаларында һәм мәҙәниәт учреждениеларында, майҙандарҙа яңы йыл байрамы сараларын әҙерләй.

Әйткәндәй, "Берҙәм Рәсәй" партияһының төбәк бүлексәһе булышлығында "Башҡортостан" дәүләт концерт залы Ижади "Теләктәр шыршыһы" акцияһын ойоштора. Акцияла ҡатнашыу өсөн ижади йүнәлештәге матди булмаған теләктәр ҡабул ителә: "Роль" ("Спектаклдә, фильмда роль башҡарырға, сәхнәлә билдәле артист менән сығыш яһарға хыялланам" һәм башҡалар); "Осрашыу" ("Билдәле артист, йырсы, спортсы һ.б. менән осрашырға хыялланам"); "Маҡсат" ("Сәхнә артындағы тормошто күрергә хыялланам", "Йондоҙ менән йырларға" һәм башҡалар), кинотеатрҙарға, концерттарға, спорт сараларына (хоккей) барыу. Теләктәр 15 декабрҙән 29-ына тиклем pr.gkz@yandex.ru электрон почтаһына һәм "Башҡортостан" дәүләт концерт залы алдында ҡуйылған йәшниктә ҡабул ителә.

## Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Тауыш бир! Өфө 2022 йылда Рәсәйҙең иң матур һәм танылыу алған ҡалаһы булыуы мөмкин. 2022 йылда Рәсәйҙең иң матур һәм танылыу алған ҡалаһын - "Рәсәй ҡалаһы"н һайлау өсөн тауыш биреү башланды. "Тап һеҙ яратҡан ҡалағыҙ өсөн тауыш бирә һәм Рәсәйҙең иң күркәм ҡалаһын һайлауға йоғонто яһай алаһығыҙ", - тип хәбәр иттеләр баш ҡала хакимиәтенең матбуғат хеҙмәтенән. 2022 йылдың 30 декабрендә Мәскәү ваҡыты менән көндөҙгө сәғәт 3-тә тауыш биреүгә йомғаҡ яһала. Ошо һылтанма буйынса үтеп тауыш бирергә мөмкин: https://город-россии.рф/select-ufa.

✓Баш ҡалала төҙөләсәк вуз-ара студенттар кампусына федераль бюджеттан 12 миллиард һум самаһы аҡса бүлеү планлаштырыла. Ә объекттың дөйөм суммаһы 20 миллиард һумдан ашыу буласаҡ. Башҡортостан Хөкүмәтенең Премьер-министры Андрей Назаров белдереүенсә, проект 150 мең квадрат метр майҙанда объекттар төҙөүҙе күҙаллай, шуларҙың 70 мең квадрат метры - торлаҡ бинальары буласаҡ.

✓Өфө тимер юл вокзалынан көҙгө саҡырылыштың тәүге эшелоны оҙатылды. 200 егет Алыҫ Көнсығышҡа хәрби хеҙмәт үтергә юлланды. Уларҙы һауа-йыһан, ҡоро ер ғәскәрҙәренә, хәрби-диңгеҙ флотына таратасаҡтар. Республиканың хәрби комиссары Михаил Блажевич әйтеүенсә, призывниктар хәрби хеҙмәтте ил территорияһында үтәсәк, улар махсус хәрби операцияға йәлеп ителмәйәсәк. Хәрби хеҙмәт ваҡыты үткәс, өйҙәренә ҡайтарыласаҡтар. Көҙгө саҡырылыш 31 декабргә тиклем дауам итә, РФ Ҡораллы Көстәренә республиканан 4 мең егет саҡырыла.

✓2022 йылда Рәсәй Федерацияһының Мәғариф министрлығы беренсе тапҡыр опека органдары белгестәре эшмәкәрлеге абруйын күтәреүгә, уларҙың ыңғай имиджын булдырыуға йүнәлтелгән "Бала яғында" Бөтә Рәсәй конкурсын үткәрҙе. Унда ил субъекттарынан 164 белгес ҡатнашты. Өфө ҡалаһы "Мәғлүмәт технологиялары лидеры" номинацияһында еңеүсе булды. Бүләкләү 9 декабрҙә Мәскәүҙә үтәсәк.

✓Өфө Яңы йылды ҡаршыларға әҙерләнә. Әлеге ваҡытта ҡала хеҙмәттәре объекттарҙы биҙәү менән мәшғүл. Урамдарға ҡуйыласаҡ гирляндаларҙың дөйөм оҙонлоғо 18 километр тәшкил итә, уларға барлығы 48000 лампа ҡуйылған. Байрам иллюминацияһы монтаж эштәре тамамланыу менән ҡабыҙыласаҡ.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

# АҠМУЛЛА МӘКТӘБЕНДӘ



**М. Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университетында "Беҙҙең Аҡмулла" мәғрифәт мәктәбе" асылды.**

Проекттың маҡсаты - Башҡортостандың студент йәштәре араһында мәғрифәтселек һәм гуманизм идеяларын популярлаштырыу, башҡорт телендә ижад иткән йәш шағирҙарға һәм прозаиктарға ярҙам итеү. Команданы башҡорт филологияһы факультеты студенттары һәм аспиранттары тәшкил итә, куратор - башҡорт теле һәм әҙәбиәте кафедраһы уҡытыусыһы, Көнсығыш телдәре үҙәге етәксеһе - Айтуған Ҡолан-чин. Әҙәби ҡотобханала - Мәғрифәт мәктәбенең үҙәгендә һәләтле йәштәр ижад менән шөғөлләнә, ҡәләм оҫталары менән осрашып, уларҙан оҫталыҡ дәрестәре ала, шиғриәт кисәләре үткәрә.

Проекты тормошҡа ашырыуҙа ҡатнашыусылар Мифтахетдин Аҡмулла тормошо һәм ижады менән бәйле урындарҙа экскурсияларҙа була, Аҡмулланы өйрәнеүселәрҙең, Аҡмулла премияһы лауреаттарының "алтын лекция"ларын тыңлай. Быларҙың барыһы ла студенттарға билдәле мәғрифәтсенең биографияһының һәм ижадының төрлө яҡтары менән яҡындараҡ танышыу мөмкинлеген бирә. Ҡотобханала йәш шағирҙар һәм прозаиктар өсөн БР Яҙыусылар берлеге рәйесе Зәки Әлибаев менән йәш шағирә Айгөл Ғәбитова оҫталыҡ дәрестәре үткәрә. "Көҙгө нағыш, әллә һағыш" шиғриәт кисәһендә университет студенттары һәм республиканың йәш шағирҙары ҡатнаша.

Башҡорт филологияһы факультеты студенттарының "Тулҡын" әҙәби түңәрәге ағзалары үҙҙәренең әҫәрҙәренән йыйынтыҡ сығарған. Уға 19 авторҙың ижады ингән. Шулай уҡ проект сиктәрендә республика ижади конкурсы үткән. Уның маҡсаты - башҡорт телендә ижад иткән мәктәп уҡыусыларының һәм студенттарҙың һәләттәрен асыу. Әҙәби конкурста ҡатнашыусылар араһында Урал Йәнбирҙин, Эльвина Ғәлләмова, Фәнис Ҡанчурин, Сабрина Хәбибуллина, Гүзәл Ғәбделхаҡова, Элина Муллаярова, Айсия Ейәнбаева, Гөлдания Миңлеғолова Айгөл Сөләймәнова тиғән исемдәр телгә алына. Уларға киләсәктә әҙәбиәтебеҙҙең йондоҙҙары булырға яҙһын.

ФИНАНС ӘЛИФБАҺЫ

# УЙҘЫРМАЛАР

**Инфляция тураһындағы ысынбарлыҡты һәм был өлкәләге уйҙырмаларҙы белергә теләйһегеҙме? Ошо һүрәттәрҙе ҡарап, ул уйҙырмаларҙы юҡҡа сығарып була. Рәхим итегеҙ:**







Әйткәндәй, шәхси инфляцияны иҫәпләп сығарырға ла була. Сайтта https://fincult.info/ инфляция калькуляторы бар. Төрлө тауарҙар һәм хеҙмәттәр өсөн айына күпме аҡса тотоноуығыҙҙы күрһәтегеҙ һәм шәхси йыллыҡ инфляцияға баһа алырһығыҙ - һуңғы йылда шәхси ҡулланыу кәрзинегеҙҙең хаҡы күпмегә үҙгәргәнен күрерһегеҙ.

**Рәсәй банкы бүлексәһе - Башҡортостан Республикаһы буйынса Милли банк.**

ҠЫҪҠАСА

# РӨХСӘТҺЕҘ ҠЫРҠМА!

**Башҡортостанда йәш ылыҫлы ағастарҙы законһыҙ ҡырҡыуҙан һаҡлау буйынса "Шыршы-2022" операцияһы башланды.** Акция 2022 йылдың 31 декабренә тиклем дауам итә. Башҡортостан Республикаһының Урман хужалығы министрлығынан хәбәр итеүҙәренсә, был ваҡытта йәш ылыҫлы ағастарҙы рөхсәтһеҙ әҙерләү урындарында тәүлек әйләнәһенә күҙәтеү ойоштороласаҡ. Шулай уҡ шыршылар һатылған урындарҙа рейдтар үткәрелә. "Яңы йыл шыршыларын законһыҙ ҡырҡҡан өсөн административ һәм енәйәт яуаплылығы ҡаралған. Граждандар өсөн штраф күләме - 3-4 мең, вазифа биләүселәргә - 20-40 мең, юридик шәхестәргә - 200-300 мең һум. Штрафтан тыш, закон боҙоусы урман фондына килтерелгән зыянды ҡапларға тейеш. Әгәр зыяндың суммаһы 5 мең һум һәм унан күберәк тәшкил итһә, закон боҙоусы енәйәт яуаплылығына тартылыла. Ошо статья буйынса иң күбендә алты йылға тиклем иректән мәхрүм ителеү янай", - тине Башҡортостан Республикаһының урман хужалығы министры урынбаҫары Юнир Садиҡов.

✓ **Өфөлә Көнсығыш сығыу-инеү юлы төҙөлөшө графиктан алда бара. Башҡортостандың Транспорт һәм юл хужалығы министрлығында белдереүҙәренсә, ул баш ҡала өсөн дә, республика өсөн дә мөһим объект булып тора.** Әле был объект төҙөлөшө 70 процентҡа үтәлгән. 2024 йылға иһә ул тулыһынса тамамланып, ҡулланыуға тапшырыласаҡ. Мәғлүм булыуынса, Көнсығыш "ҡапҡалары" төҙөлөшөндә Рәсәйҙә етештерелгән төҙөлөш материалдары өлөшө 95 процент алып тора. Волга буйында тормошҡа ашырылған проекттар араһында ул иң ҙуры, бер нисә ҡатмарлы инфраструктура объекттын: тоннелде, Өфө аша һалынған күперҙе, эстакаданы, бер нисә сиселешле автомобиль юлын үҙ эсенә ала. Сафҡа индерелгәс, Салауат Юлаев проспекты менән М-5 трассаһын тоташтырған юл түләүле буласағы күҙаллана. Уның аша тәүлегенә 22 мендән ашыу автомобиль үтәсәк тип планлаштырыла, сөнки ҡала үҙәгенә, тығындарҙа ултырмайынса, 10 минутта барып етергә мөмкин буласаҡ.

✓ **Өфө янындағы Миловка паркында 1225 урынлыҡ мәктәп төҙөлөшө тамамланды. Бында "Миловка паркы"нан, "Йәштәр" биҫтәһенән һәм яҡын-тирәләге ауылдарҙан балалар уҡыясаҡ, тип хәбәр итте Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров.** "Миловка паркындағы мәктәпте һалып бөттөк. Был объект ҡатмарлы булды. Уны иртәрәк асырға теләгәйнек, әммә проблемалар килеп тыуҙы, ваҡытын күсерҙек. Мәктәп ҙур, иркен, 1225 урынға иҫәпләнгән. Бинала - дүрт блок, урта һәм өлкән звено өсөн айырым корпустар. Үҙ ҡаҙанлығы һәм трансформатор подстанцияһы бар. Яҡшы йыһазландырылған кластар, мәктәптән тыш эш өсөн кабинеттар, кескәйҙәр өсөн уйын бүлмәләре. Өлкәнерәк балалар өсөн - лаборанттар бүлмәһе, китапхана, интерактив компьютер комплексы, малайҙар өсөн ағас эше оҫтаханаһы һәм ҡыҙҙар өсөн тегеү оҫтаханаһы", - тип яҙҙы ул "Бәйләнештә"ге сәхифәһендә. Мәктәптә спорт менән шөғөлләнеү өсөн уңайлы шарттар булдырылған - ике ҙур спорт залы, душ, кейенеү бүлмәләре, сауҡы һаҡлағыс, саф һауала физкультура менән шөғөлләнеү өсөн спорт зоналары - баскетбол, волейбол, бадминтон өсөн майҙансыҡтар һәм башҡалар, тип билдәләнә төбәк етәксеһе.

Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

## Файҙалы май

❖ Был май гайморит, мускулдар тартылыу, быуындар һыҙлау, яраланыу, йүтәл, ирендәр ярылыу, ауыҙ эсе яраланыу, ҡолаҡ елһенеү осраҡтарында ярҙам итә. Ниндәй осраҡ булыуға ҡарап, тампон һалырға, ыуырға, һөртөнөргә кәрәк. Майҙы әҙерләү өсөн 100 грамм зәйтүн майына 40 грамм тәбиғи балауыҙҙы ваҡлап ҡушырға, 2 ҡалаҡ шәкәр өҫтәргә. Шунан талғын утҡа ҡуйып, бер массаға әүерелгәнсе яҡшылап болғатып торорға. Аҙаҡ уттан алырға. Һыуынһа, ҡулланырға мөмкин.

## Календула

❖ Календула сәскәһен эҫе төшмәҫ элек йыйырға кәрәк, мәҫәлән, иртәнге сәғәт 10-ға, йәки киске сәғәт 5-тән һуң. Сәскәләрҙе йолҡҡослап сығырға һәм ҡағыҙға йоҡа ғына итеп йәйеп һалырға. Уны өйҙә йәки һарайҙа ҡояш нурҙары төшмәгән, әммә йылы урында түбәгә элеп ҡуйып киптерергә. Тулыһынса киптергәнсе, ике көн һайын бутап торорға. Был рәүешле әҙерләнгән календуланан бер нисә ауырыуҙан дауа булырҙай төнәтмә эшләргә була. Теләгән тиклем миҡдарҙағы (0,5, 07, йәки 1 литрлыҡ) банканың яртыһына тиклем календула сәскәһен тултырып, өҫтөнә сығарғанс 70 процентлыҡ спирт ҡойорға. Спирт урынына араҡы ҡулланырға ла ярай. Шунан бер-ике һауыт меновазин ҡушып, яҡшылап һелкетергә. Сәскәләр шыйыҡса менән тотош ҡапланырға, сыланырға тейеш. Шунан ҡараңғы урынға ҡуйып, 2 аҙна төнәтергә. Ваҡыты-ваҡыты менән һелкетеп болғатып торорға. Был төнәтмәне һыҙлаған быуындар һәм мускулдар, бил, арка, муйынға ыуып йоҡлау яҡшы. Ангина йәки киҙеү менән сирләгәндә төнәтмәне балтырҙарға, табандарға, маңлайға, сикәләргә һөртөү температураны төшөрөргә ярҙам итә. Хатта маститҡа компресс эшләргә була. Артроз булғанда һыҙланыуҙы баҫа.

## Аяҡ тырнағында бәшмәк

❖ 100 грамм һөтлөгәнгә (молочай) 3 л ҡайнар һыу ҡойоп, ҡапҡас менән ябырға һәм 30 минут төнәтеп һөҙөргә. Аяҡтарҙы ошо төнәтмәгә 20 минут тығып ултырырға. Был рәүешле тулыһынса һауыҡҡанға тиклем көн һайын дауаланырға.

**Ғәлиә ШӘМСИЕВА әҙерләне.**

✓ *Мәктәптәрҙә туған телдәрҙе ҡыҫыу, әлбиттә, һиҙелә һәм был дәрестәрҙең ҡыҫҡартылыуында сағыла, башҡорт ата-әсәләре балалары башҡорт телен уҡыһын өсөн ғариза яҙа.*



*ЙОЛАНДАН ЙҮН ТАП!*



# БАШҠОРТ БИҘӘҮЕСТӘРЕ

Ҡыҙ балалар түштәренә биҙәүестәр тағып йөрөүе тураһында мәғлүмәттәрҙе төбәкте өйрәнеүсе ғалимдарҙың, яҙыусыларҙың хеҙмәттәрендә осратырға мөмкин. Мәҫәлән, XIX быуаттың күренекле мәғрифәтсеһе М. Өмөтбаев ҡыҙ балаларҙың һаҡал тағыуҙарын һыҙыҡ өҫтөнә ала. Шулай уҡ XIX быуаттың аҙағында төбәкте өйрәнеүсе Петр Назаров та балаларҙың биҙәүестәр тағып йөрөүенә иғтибар итә. Яҙыусы Владимир Николаевич Львов XX быуат башында Дим буйында йәшәүсе башҡорт ғаиләһендә ҡунаҡта булған ваҡытта матур итеп кейенгән алты йәшлек Шәмсинур исемле ҡыҙыҡайҙың түшендә биҙәүес күреп ҡала: ул ололарҙыҡына оҡшатып эшләнгән була. Ҡулына алғас та һәлмәк икәнлеген тоя. Ҡыҙыл туҡыманан торған нигеҙгә көмөш тәңкәләр, ҡурғаштан һуғылған түңәрәктәр тегелгән. Ситенән иһә мәрйен төҫөндәге сәйлән теҙелгән. Көмөш аҡсалар араһында Екатерина, Елизавета һәм Петр осорона ҡарағандары өҫтөнлөк итә. Шулай уҡ яңыраҡ тегелгәндәре лә урын алған. Күренеүенсә, ҡыҙҙар ҙа бәләкәйҙән ололарҙыҡына оҡшаш биҙәүестәр тағып йөрөгәнлеге тураһында һүҙ алып барырға нигеҙ бар. Яҙма сығанаҡтарҙа теркәлгән бындай мәғлүмәттәрҙе элекке фотоларға ҡарап та тулыландырырға мөмкин. Мәҫәлән, түбәндәге фотола биҙәнеү әйберҙәре таҡҡан ҡатын менән ике баланы күрергә мөмкин. Формаһы һәм биҙәлеше йәһәтенән ҡарағанда улар Санкт-Петербург ҡалаһындағы Рәсәй этнография музейында һаҡланыусы һаҡалға оҡшаған.







С.И. Руденконың "Башҡорттар" китабында урын алған фотола ҡатай башҡорттары төшөрөлгән (3-сө фото). Күренеүенсә, төрлө йәштә булыуҙарына ҡарамаҫтан, ҡатын-ҡыҙҙарының барыһы ла шул төбәккә хас булған яғалар тағып алған. Балаларҙыҡы ҙурлығы йәһәтенән генә бер ни тиклем айырылып тора. Был, үҙ сиратында, уларҙы эшләүҙәге традицияларҙың ни тиклем көслө булғанлығына ишара яһай.



**Азат ҒАРИПОВ,**
**этнограф.**
**"Башҡорт биҙәнеү әйберҙәре" китабынан.**

*АФАРИН!*

# БАШҠОРТ ТЕЛЕ...

## Мәскәүҙә бәйге тотто

**(Башы 1-се биттә).**

**Мәлде файҙаланып, балаларға кескәй саҡтарынан уҡ әсә теленә һөйөү орлоҡтары һалған тәрбиәсе - Бөрйән районының Мәһәҙей ауылы ҡыҙы, 2007 йылдан 308-се Башҡорт балалар баҡсаһында эшләгән Рәшиҙә Рәхим ҡыҙына төбәнек һорауҙарыбыҙҙы.**



➔ **Бөтә Рәсәй конкурсы сиктәрендә "Туған телгә ҡыҙыҡһыныу тыуҙырыусы мәктәпкәсә белем биреү ойошмаһы тәрбиәсеһе" номинацияһында Башҡортостан беренсе тапҡыр ҡатнаша һәм шунда уҡ ҙур уңыш - беренсе урын. Тәүге тәьҫораттар ниндәй?**

- Тәьҫораттар иң ыңғай һәм иң яҡты. Әлбиттә, юлға бер аҙ ҡурҡыңҡырап, икеләнеп сыҡҡайным, сөнки үҙем эшләгән мәғариф учреждениеһы ғына түгел, тотош республика беҙгә ҡарап тора, беҙгә ышаныс белдерә. Шуға, "Ышаныстарын аҡлармынмы?" тигән уйҙар ҙа ҡайнаны башта. Әммә жюри ағзаларының алсаҡлығы, изге күңеллелеге, конкурсанттарҙың бер-береһенә ихтирамлы һәм хөрмәт менән ҡарауы шунда уҡ тынысландырҙы. Беҙ бер-беребеҙгә дәғүәсе түгел, ә коллега булдыҡ, ярҙам ҡулы һуҙырға әҙер торҙоҡ.

Театр гардеробтан башлана, тигән кеүек, конкурсты ойоштороуҙың юғары кимәлдә уйланылыуы беҙҙе ҡаршы алып, урынлаштырыуҙан уҡ күренеп торҙо. Ҡыҫҡаһы, был сара артабан үҫешем өсөн сираттағы баҫҡыс булды, республика педагогтарының ышаныСын аҡланым, тип уйлайым.

➔ **Еңеүсе берәү булһа ла, уның артында тотош коллективтың тырышлығы һәм хеҙмәте ята...**

- Эйе, был конкурсҡа мин яңғыҙым ғына әҙерләнмәнем. Эшләгән коллективымда барыһы ла ярҙам итте, иң мөһиме, миңә ышандылар, сөнки 2021 йылда "Башҡортостандың баш ҡалаһы мәктәпкәсә белем биреү ойошмаһының иң яҡшы педагогы" ҡала һөнәри конкурсының "Туған телгә өйрәтеү буйынса иң яҡшы тәрбиәсе" номинацияһында еңеү яулағайным, быйыл "Башҡортостан Республикаһы мәктәпкәсә белем биреү ойошмаларында туған телдә белем биреүсе йыл педагогы" республика һөнәри конкурсы лауреаты булдым. "Һаумы, һаумы әкиәт!" конкурстарында ҡатнашып, төбәк-ара кимәлгә барып еттек. "Бишек йыры"нда ҡатнашып, ҡала кимәлендә 1-се урын алдыҡ. "Иң яҡшы авторлыҡ уйыны" конкурсында ҡала буйынса икенсе урын яуланым.

Мөдиребеҙ Фәйрүзә Мусабирова шәхсән өтәләнеп йөрөнө, дәресемде ҡарап, ҡайҙа нимәне, нисек үҙгәртеү тураһында фекерҙәрен әйтте, сығыштарҙы яҙыуҙа ла ныҡ терәк булды. Өлкән тәрбиәсебеҙ Мәйсәрә Хамматова уйындар эшләшергә ярҙам итте. Дөрөҫөн әйткәндә, улар икеһе лә идеялар генераторы һәм ошо идеяларын коллегалары менән бүлешеп, һәр саҡ уларҙы тормошҡа ашырырға дәртләндереп торалар.

➔ **Бөгөн туған телгә ҡарата төрлө ҡараш йәшәй, хатта башҡорт ауылдарында ла балалар баҡсаларында тәрбиә башҡорт телендә алып барылһа ла, балалар русса һөйләшә. Быныҡ сәбәптәре нимәлә һәм балаларҙы башҡорт телен өйрәнеүгә нисек ҡыҙыҡһындыраһығыҙ?**

- Был күренештең сәбәптәрен инде күптән асыҡлап бөттөләр, тиер инем. Бөгөн үҫешкән технологиялар заманында йәшәйбеҙ һәм хатта гаджеттар аша балалар Алисаға һорау биреп, йәнһүрәттәр табып ҡарау мөмкинлеген белә. Интернетты, телевизорҙы асһаң да йәнһүрәттәр, кинолар нигеҙҙә рус телендә, башҡорт телендәгеләре бик һирәк. Әммә күп нәмә ғаиләнән тора, балала телгә һөйөү ғаиләлә һалына, тиер инем. Әммә шуныһы аяныслы: беҙгә башлыса башҡорт ата-әсәләр килә һәм балалары менән русса һөйләшә. Ошо күренеш күңелде ҡыра. Шуға ҡарамаҫтан беҙ, тәрбиәселәр, башҡорт теленә һөйөүҙе бәләкәйҙән һалырға тырышабыҙ һәм был беҙҙең бурысыбыҙ ҙа. Быныҡ өсөн төрлө алымдар ҡулланып ҡарайбыҙ. Минең ошо конкурсҡа алып барған темам башҡорт телен дидактик уйындар аша үҫтереүгә арналды, сөнки бәләкәй ваҡытта балалар донъяны нигеҙҙә уйындар аша өйрәнә. Күргәҙмә материалдар булғанда, дәрестә балалар ҡыҙыҡһына, уйында ҡатнашырға ынтылып тора.

➔ **Республикала ғына түгел, федераль кимәлдә туған телдәр буйынса төрлө саралар һәм конкурстар үтеп тора, әммә йәмғиәттә "Туған телдәрҙе ҡыҫалар", тигән фекер нығынған. Ысынлап та, туған телдәрҙе, шул иҫәптән башҡорт телен дә ҡыҫалармы, әллә был "ғаилә-мәғариф системаһы-йәмғиәт" өсмөйөшөнөң эшләп еткермәүеме?**

- Мәктәптәрҙә туған телдәрҙе ҡыҫыу, әлбиттә, һиҙелә һәм был дәрестәрҙең ҡыҫҡартылыуында сағыла, башҡорт ата-әсәләре балалары башҡорт телен уҡыһын өсөн ғариза яҙа. Балалар баҡсаһына килгәндә, ундай ҡыҫым һиҙелмәй, әммә күп нәмә үҙебеҙҙән дә тора, әүҙем булырға кәрәк. Беҙ ҡала кимәлендә лә, республика кимәлендә лә башҡортса үткән төрлө сараларҙан ситтә ҡалмаҫҡа тырышабыҙ. Мәҫәлән, Милли кейем көнө, фольклор байрамдары, башҡорт теленән диктант яҙыуҙа ла коллективыбыҙ әүҙем ҡатнаша.

➔ **Ҡабат конкурсҡа урап ҡайтҡанда, был сарала мәктәпкәсә учреждениеларҙан ҡатнашыусылар күп булдымы? Рәсәйҙең ниндәй субъекттары вәкилдәренән фәһем алырға, уларҙың эш алымын өлгө итеп ҡулланырға мөмкин, йәғни үҙегеҙ өсөн файҙалы ысулдар күрҙегеҙме?**

- Рәсәй кимәленә, йәғни финалға үтеүселәр күп булманы, әммә баһалама ағзалары әйтеүенсә, күптәр ситтән тороп ҡатнашыу турынан төшөп ҡалған. Төньяҡ Осетия, Ҡабарҙы-Балҡар, Алтай Республикаларынан килгән ҡатнашыусыларҙың сығыштары, эш алымдары оҡшаны. Уларҙың үҙ ҡулдары менән эшләгән биҙәүестәре бик матур ине. Әммә Башҡортостан делегацияһын барыһы ла, төплө итеп, ныҡлы итеп әҙерләнгәнһегеҙ, тип маҡтанылар.

➔ **Башҡорт теленең һәм башҡорт телендә тәрбиә биреүсе балалар баҡсаларының киләсәген нисек күҙаллайһығыҙ?**

- Башҡорт балалар баҡсаһында эшләгән тәрбиәселәр, педагогтар ҡурҡмайынса ошондай мәртәбәле конкурстарҙа әүҙем ҡатнашһалар, үҙ эштәренә ата-әсәләрҙе йәлеп итеүгә, уларҙы ла туған тел менән ҡыҙыҡтырыуға өлгәшһәләр, балалар баҡсаһында ла башҡорт теле йәшәр тип уйлайым һәм быға ныҡлы ышанам.

**Зәйтүнә НИҒӘМӘТЙӘНОВА әңгәмәләште.**

*БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР*

# ТӘБИҒӘТТЕҢ...

## ураҙа ғына миҙгеле



Ышылдай-бышылдай еребеҙгә ҡыш та килеп етте. Шулай ышылдаған өсөн дә был миҙгелде ҡыш тип атайҙарҙыр, күрәһең. Йәйелгән өсөн йәйҙе - йәй, яҙылған өсөн яҙҙы - яҙ, көҙрәйгән өсөн көҙҙө көҙ тип атаған һымаҡ.

Ағастар, хайуандар, бөжәктәр, йәнлектәр, йыландар ҡышҡы йоҡоға талды, уларҙың ураҙаһы башланды. Әгәр ҙә ҡыш булмаһа, был тереклек төрҙәре нисек ураҙа тотор ҙа, нисек йоҡлар ине икән, тип тә ҡуяһың. Улар, күп кенә кешеләрҙән айырмалы рәүештә, йылына бер тапҡыр ураҙа тотмаһа, оҙайлы йоҡоға талмаһа, тереклек төрө булараҡ юҡҡа сыға икән.

Тап шуның өсөн дә ҡыш булмаған яҡтарҙағы тереклек менән беҙҙәгеһе ныҡ айырыла. Нимә генә тимә, беҙҙең тәбиғәт тә, башҡа йән эйәләре лә ҡыш булмаған яҡтарға ҡарағанда матурыраҡ, күркәмерәк. Мосолманса Ураҙа тотҡаны өсөн!

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**

*ХӘҠИҠӘТИ ҺҮҘ*

# БОРОНҒО БАШҠОРТОСТАН

## Беренсе киҫәк. Боронғо дәүер.



### Икенсе бүлек. Бронза быуаты

Эш шунда, Арҡайым тибындағы ҡомартҡыларҙың фәнни әһәмиәтен пропагандалауға экстрасенстар ҡушылып китеп, мендәрсә тарих һөйөүселәр аңына Арҡайымдың айырым энергетик көскә эйә булыуы хаҡында мистик идеяларҙы һеңдерергә тырыша. Ошондай пропагандистик шау-шыуға кемдәрҙеңдер йүнәлтмә биреүе хаҡында уйланырға ерлек тыуа. Бындай идеяларҙың фәнгә бер ниндәй ҙә ҡатнашлығы булмауын беҙ яҡшы аңларға тейешбеҙ. Әйткәндәй, Рәсәй Фәндәр академияһының Археология институты 2007 йылда Арҡайым ҡорона инған ҡомартҡыларҙы артабын өйрәнеү һәм пропагандалау мәсьәләһе буйынса ойошторған дискуссияла ҡатнашыусылар ошондай уйҙырмаларҙы ҡаты тәнҡитләне.

Тағы ла бер мәсьәләне иғтибарҙан ситтә ҡалдыра алмайбыҙ. Арҡайым темаһына арналған байтаҡ ҡына баҫма материалдарҙа авторҙар Арҡайым кеүек ҡомартҡыларҙы төҙөүселәрҙең һәм уларҙа йәшәүселәрҙең арийҙар булыуы һәм боронғо иран телендә һөйләшеүе хаҡындағы тезисты раҫларға тырыша. Бер үк ваҡытта әҙәбиәттә бронза быуатындағы Көньяҡ Урал ҡәбиләләрендә боронғо финугыр, төрки телдәрендә аралашыусылар булыуы мөмкинлеге хаҡындағы фекерҙәр әйтелде. Ошо айҡанлы, дала Евразияһының боронғо ҡәбиләләренең телдәре хаҡындағы заман фәненең торошон һыҙыҡ өҫтөнә алып, әйтеп үтелгән фекерҙәрҙең береһенә лә өҫтөнлөк бирә алмайбыҙ. Евразия далаларында барса боронғо дәүерҙәрҙә ҡатмарлы миграция процестары барыуын бәхәсһеҙ факт, тип иҫәпләһәк, Көньяҡ Урал һәм уға сиктәш төбәктәр ҡәүемдәренең этно-тел йәһәтенән шул тиклем тығыҙ ҡатнашып йәшәүе улар араһында, әле атап үтелгән тел төркөмдәренә ҡарағандарынан башҡа, хәҙер инде үле тип нарыҡланған телдәрҙә аралашыусылар булыу мөмкинлеге лә фараз итеү дөрөҫөрәк булыр.

### Өсөнсө бүлек. Иртә тимер эпохаһы

**Көньяҡ Урал ҡәбиләләре хаҡындағы боронғо яҙма сығанаҡтар**

Б.э. тиклем X-IX быуаттар арауығында кешеләр бар ерҙә лә тиерлек тимер металлургияһын үҙләштерә һәм унан эш һәм һуғыш ҡоралдары, биҙәүестәр етештерә башлай. Үҙенең ҡатылығы һәм арзан булыуы менән ул ошоға тиклем билдәле булған металдарҙан (баҡыр, бронза) өҫтөн була, шуға күрә тимерҙең киң таралыуы матди мәҙәниәттең, бигерәк тә етештереү өлкәһендә, тамырҙан үҙгәреүенә килтерә: ул ер һәм ағас эшкәртеүҙә, башҡа өлкәләрҙә хеҙмәт етештереүсәнлеген күп тапҡырҙарға арттыра, матди байлыҡтың күбәйә барыуына һәм уның ырыу-ҡәбилә башлыҡтары ҡулында тупланыуына килтерә.

Көньяҡ Уралда ике төрлө тормош рәүешенән - дала зонаһында күсмә малсылыҡтың, урманлы дала яҡтарында ултыраҡ малсылыҡ һәм ер эшкәртеүҙең ахырынаса формалашыуын иртә тимер быуатының иң икенсе бер мөһим моменты итеп ҡарау фарыз. Хеҙмәттең ошондай бүленеше - тәү тормош йәмғиәтенең етештереүсе көстәре үҫешендә алға табан тағы ла бер аҙым ул, сөнки тәбиғәт шарттарына максималь рәүештә яраҡлаштырылған хужалыҡ өлкәләренең интенсив үҫеше өсөн ҙур мөмкинлектәр булдыра.

Иртә тимер быуатында йылҡысылыҡ менән шөғөлләнеүҙең бигерәк тә киң ҡолас алыуы далаларҙы тулыһынса үҙләштереү мөмкинлеген бирә. Кеше хеҙмәте емешлерәк була бара: малдарҙан, шулай уҡ иттән, һөттән, тире һәм йөндән хасил булған продукцияның файҙаланылғандан ҡалған күләме быуаса күрелмәгәнсә арта, малсылыҡ һәм ер эшкәртеү менән шөғөлләнгән райондарҙа йәшәүсе ҡәбиләләр араһында алыш-биреш итеү көсәйә. Дала кешеләренең аттарҙы һыбай йөрөү өсөн файҙаланыуы, атлы яугирҙар төркөмдәренең барлыҡҡа килеүе айырым райондарҙың мәҙәни-тарихи йомоҡлоғон юҡҡа сығара, күрше йәшәүселәр, айырым ҡәбиләләр, халыҡтар һәм дәүләттәр араһында тағы ла тығыҙыраҡ иҡтисади һәм мәҙәни бәйләнештәр урынлашыуына булышлыҡ итә. Кешеләр (ырыу коллективы ағзалары) араһында элекке осорҙарҙа барлыҡҡа килгән социаль тигеҙһеҙлек хәҙер инде арта, көсәйә бара, һәм ошо нигеҙҙә примитив дәүләтселек формалары булған иртә синфи йәмғиәт формалаша башлай.

Б.э. тиклем I мең йыллыҡ урталарында яҙма сығанаҡтарҙа тәүләп Урал тауҙары районында йәшәгән ҡәбиләләр хаҡында өҙөк-өҙөк кенә мәғлүмәттәр теркәлә. Бындай мәғлүмәттәр Көньяҡ Урал төбәге хаҡында етерлек кимәлдә аныҡ белемдәре булған антик авторҙарҙың хеҙмәттәрендә сағылыш тапҡан.

Сығанаҡтарҙың бик тә ҡапма-ҡаршылыҡлы, ҡайһы саҡта томанлы мәғлүмәттәрен аңларға ярҙам итеүсе үҙенсәлекле асҡыс сифатында әлегә тиклем һаҡланып ҡалғандарының иң боронғоһо булған Птолемей картаһын (II быуат) атап була. Урал тауҙары унда Риммий тауҙары исеме менән бирелгән, унан Каспий диңгеҙенә ҡойоусы Даих (Яйыҡ) йылғаһы ағып сыға (Бында бер иҫкәрмә биреү урынлы булыр: Птолемей картаһында Даикс (Daix) йылғаһынан төньяҡта күрһәтелгән тауҙар Норос тауҙары, тип нарыҡланһа, Риммикай тауҙары байтаҡҡа һулдараҡ төшөрөлгән, әлеге дәүерҙә булмаған, шул уҡ Каспийға ҡойоусы Римм йылғаһы ла һүрәтләнгән; шуныһы ҡыҙыҡ, әллә беҙҙең Уралда шул архаик заманда ук Нарыҫтау, тип аталып йөрөгән тауҙар теҙмәһе булдымы икән? - **Тәрж. иҫк.**)

Карта үҙенең теүәллеге менән таң ҡалдыра. Унда Волга төньяҡтан, боронғо авторҙар Гиперборей тауҙары тип атаған Төньяҡ Уралдан (Кама йылғаһы башынан) аға, Волга менән Дон араһындағы тар ғына муйынтыҡ һәм Волганың Урал тауҙарынан баш алған ике һул ҡушылдығы күрһәтелгән. Ҡайһы бер беҙҙең заман тикшеренеүселәре ошо ҡушылдыҡтарҙың Һаҡмар һәм Танылыҡ, икенселәре - Кинель булыуын ҡуҙаллай.

Көньяҡ Уралдың төп йылғаһы булған Яйыҡтың, XVIII быуатта Е. Пугачев етәкселегендәге крәҫтиәндәр ихтилалы баҫтырылғандан һуң Урал, тип исеме үҙгәртелгән йылға атамаһының килеп сығышы ҙур ҡыҙыҡһыныу уята.

Тарихи әҙәбиәттә Даих йылғаһы (дөрөҫөрәге - Даикс. - **Тәрж. иҫк.**) атамаһының Птолемейса варианты Арал диңгеҙе һәм Урал тауҙары арауығында киң массив булып йәйелеп йәшәгән күсмә ҡәбиләләр - дахо-массагеттар исеменән барлыҡҡа килеүе хаҡында нигеҙле фекер бар.

Дахо-массагеттарҙың башҡа бер дөйөмләштерелгәнерәк атамаһы - сактар. Яҙма сығанаҡтарға ярашлы, ошо сак-дах-массагеттарҙың айырым төркөмдәре сактар, массагеттар, дайҙар, дахтар тип аталып йөрөтөлгән, әммә, күренеүенсә, Көньяҡ Урал далаларында бик боронғо замандарҙан бирле (бәлки, бронза эпохаһынан алып) дах ҡәбиләһе берләшмәһенән сығыусылар өҫтөнлөк иткән һәм уларҙың Дах-Даих атамаһынан Яйыҡ йылғаһы исеме барлыҡҡа килгән.

**Нияз МӘЖИТОВ.**
**Әлфиә СОЛТАНОВА.**
**Арыҫлан ТАЙМАСОВ тәржемәһе.**

**(Дауамы. Башы 28-се һанда).**

*МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ*

# НАМАҘ ҠЫЛЫУСЫНЫҢ...

## алдынан үтмә



**Бәйғәмбәребеҙ (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) әйткән: "Намаҙ уҡып ултырыусы алдынан үтеп киткән кеше үҙенең ниндәй ҙур гонаһ ҡылғанын белһә, доға уҡыуҙың тамамланыуын 40 көн көтөргә лә әҙер булыр ине".**

Был гонаһ тураһында бөтә хәҙистәрҙә лә әйтелә. Башҡалар был хатаны ҡылмаһын өсөн иманлы кеше үҙе лә хәстәрлек күрергә бурыслы. Намаҙ уҡырға йыйынғанда, ул ултырған урынды ситләп үтһендәр өсөн, алдына берәй әйбер һалып ҡуйырға мөмкин. Кеше намаҙ ҡылыусы алдынан үткәнен һиҙмәй йә был ҡылыҡтың гонаһ икәнен белмәй икән, эргәһендә булған мосолмандар уны иҫкәртергә тейеш. Унаң юлын ҡыйып, "Собханаллаһ" тип әйтергә кәрәк. Был талап намаҙ ҡайҙа уҡылыуға ҡарамаҫтан - асыҡ һауаламы, мәсеттә, башҡа урындамы - үтәлергә тейеш. Намаҙ ҡылыусы ҡарашын сәждә урынына төбәргә һәм ян-яҡҡа ҡарамаҫҡа тейеш. Сит тауыштар иһә иманлының тыныслығын боҙа һәм Аллаһ менән аралашырға ҡамасаулай. Шуға гонаһ намаҙ ҡылыусыны борсоған кешегә яҙыла.

*БӨЙӨК ЕҢЕҮГӘ - 77*



# ҠАҺАРМАНЛЫҠ ТАРИХЫ

## Днепр ярҙары - батырлыҡ майҙаны

62-се гв. атлы полкы, һыу аша сыға торған ҡорамалдарҙы йүнәтеп, 27 сентябрҙән 28-нә ҡаршы төндә Дымарка ауылынан көнбайыштараҡ Днепр аша сыға башлай. Беренселәрҙән булып лейтенанттар Букаев һәм Югатов командалығында ҡул пулеметтары наводчиктарынан һәм 12 автоматсынан торған төркөм уң яҡ ярға сығып, позиция ала, улар артынан башҡа подразделениелар ҙа имен-аман ғына йылға аша сығып өлгөрә. 28 сентябрҙә полк Нивки ауылы йүнәлешендә һөжүм башлай.

28 сентябрь иртәһенә 16-сы гв. дивизияһының өс полкы ла, уның танктарға ҡаршы һәм миномет батареялары менән бергә, уң яҡ ярҙа була. Был саҡта дивизияға беркетелгән танк полкы, артиллерия полкы, шулай уҡ 76 миллиметрлы полк батареялары һул яҡ ярҙа ҡалған була. 27 сентябрҙә кис етеүгә дивизия командиры, гв. полковнигы Григорий Белов, штабтың оператив бүлеге начальнигы, гв. подполковнигы Герасим Черников полктарҙың элемтә офицерҙары менән Днепрҙың уң яҡ ярына сыға.

Дошман совет ғәскәрҙәренең уң яҡ ярға сығыуын, ныҡлы оборонаға иҫәп тотҡан үҙ частарының ҡаушап ҡалыуын кисерә алмай, беҙҙең яугирҙарыбыҙҙы, нисек итеп булһа ла, кире һул ярға ҡыҫырыҡлап сығарырға ынтыла. Улар төнөн совет яугирҙары биләгән позицияларҙы "ҡапшай", беҙҙең һалдаттарҙан кемде лә булһа ҡулға төшөрөп, һорау алырға ниәтләй. Шулай, беҙҙең 60-сы гв. полкының 1-се эскадроны яугиры Кинжәбаев Түле төнөн секретта тора. Ул, һис бер керпек тә ҡаҡмайынса, немец позицияларына ығындағы яланды күҙәтә. Ярты төн ауышыуға, ул ҡыштырлаған, яҡынлашып килгән немец һалдаттарының аяҡ аҫтында ҡоро ботаҡтар һынған тауыштарҙы шәйләп ҡала. Төн ҡараңғылығына иҫәп тотоп, немецтарҙың ҙур ғына бер төркөмө 1-се эскадрон флангыһына сығырға ниәтләй. Һис көтмәгәндә, төн тынлығын ярып, Кинжәбаев ташлаған граната шартлауы яңғырай. Беҙҙең яугирҙар иҫкәртелә, ә Кинжәбаев карабиныының штыгы бер-бер артлы өс дошман һалдатына ҡаҙала, ул бөтөнләйгә ҡаушап ҡалған немец офицерын әсиргә ала. Немец һалдаттары артҡа сигенергә мәжбүр була. Эскадрон дошмандың төнгө һөжүме хәүефенән ҡотолоп ҡала. Артабан, уң ярҙағы плацдармды киңәйтеү өсөн барған алыштарҙа ла ошо ҡаҙаҡ егете һыр бирмәй, байтаҡ ҡына немец һалдаттарын сафтан сығара. 1944 йылдың 15 ғинуарындағы СССР Юғары Советы Президиумы Указы менән уға Советтар Союзы Геройы исеме бирелә. Ул, һуғыштан иҫән ҡайтып, тыуған Ҡаҙағстанында оҙаҡ йылдар буйына ауыл хужалығында эшләй.

**Вәли ИҘРИСОВ әҙерләне.**

**(Дауамы бар).**

✓ *Әҙерлекле егеттәр хәрби хеҙмәтен Сыбаркүлдәге хәрби часта үтә ала. Быйыл өсөн йәш казак хәрби хеҙмәткә саҡырылғас, йыйылыу пунктында казак ойошмаһы биргән белешмәне беҙгә тапшыра һәм тап ошо хәрби часҡа ебәрелә.*

ХӘТЕР ЯҢЫРТЫП...

**Байрамдарҙың, юбилейҙарҙың төрлөһө була - сағыуы, тантаналыһы, киң ҡолас менән бар донъяға ишетелерлек итеп билдәләнгәндәре һәм баҫалҡы, шым ғына итеп үткәрелгәндәре. Шулай ҙа бер дата, түңәрәк булыу-булмауына ҡарамай, йыл һайын билдәләүгә хоҡуҡлы. Ул 1917 йылдың 15 ноябрендә Башҡортостан өлкә шураһы тарафынан Өфө губернаһының - көньяҡ, Ырымбур губернаһының төньяҡ өлөштәренән торған территорияла Башҡортостан милли-территориаль автономияһы иғлан ителеүе. Шул саҡта яңы ғына барлыҡҡа килгән дәүләтте яҡлау һәм һаҡлау өсөн милли ғәскәр - казаклыҡ тибында ойошторолған башҡорт ғәскәре тергеҙелә. Ул ни бары ике йыл ғына ғәмәлдә була, әммә ошо ваҡыт эсендә башҡорттар автономияны яҡлап ҡалырға һәм нығытырға өлгәрә, сөнки халыҡтың быға тиклем башҡорт-мишәр ғәскәрендә кантон системаһы бөтөрөлгәнгә тиклем тупланған тәжрибәһе була һәм ул быуындан-быуынға тапшырыла.**

# БАҪАЛҠЫ БАЙРАМ,

## йәки Башҡорт казактарының яңынан ойошҡаны



Быйыл августа башҡорт йәмәғәтселәре Ырымбур казак ғәскәренең казаклыкты тергеҙеүгә булышлыҡ итеүсе төбәк-ара йәмәғәт ойошмаһының Башҡортостан буйынса "Башҡорт-мишәр казак бүлеге" төбәк бүлексәһен рәсми теркәй. Рәсәйҙә РФ Хөкүмәтенең ҡарары менән казактар йәлеп ителгән дәүләт хеҙмәте төрҙәре билдәле. Улар: ойошма ағзаларының иҫәбен алыу, йәш быуынға хәрби-патриотик тәрбиә биреү, уларҙы хәрби хеҙмәткә әҙерләү менән бер рәттән, ғәҙәттән тыш хәлдәр эҙемтәләрен бөтөрөүҙә ҡатнашыу; тәбиғәтте, дәүләт һәм муниципаль милеккә булған объекттарҙы, мәҙәни мираҫ объекттарын, йәмәғәт тәртибен һаҡлау, экологик һәм янғынға ҡаршы хәүефһеҙлек тәьмин итеү, терроризмға ҡаршы көрәш, ил сиген һаҡлау. Һәм, әлбиттә, был эшмәкәрлекте улар дәүләт органдары һәм компетентлы органдар менән берлектә алып барырға тейеш.

Яңы ғына теркәлгән Башҡорт-мишәр казак бүлеге 15 ноябрҙә үҙенең бәләкәй генә байрамын ойоштороҙо. Бер яҡтан, ул Башҡортостан милли-территориаль автономияһына хөрмәт билдәһе булһа, тап ошо көндө казактарға дәрәжә бирелде. Сарала Силәбе өлкәһенән, республика район-ҡалаларынан вәкилдәр ҡатнашты. Чесноковка ауылы мәсете имамы Фидан хәҙрәт оло ҡорға фатиха биргәс, "Арғымаҡ" этно-рок төркөмө солисы Ринат Рамазанов ҡурайҙа башҡорт халҡының рәсми булмаған гимны "Урал"ды яңғыратты. Саҡырылған ҡунаҡтарҙың сығышы артабан да музыкаль "күстәнәс" менән аралашып барҙы.

Башҡорт казактарына Ырымбур казак ғәскәренең ғәскәр атаманы Валерий Захаров шәхсән чин бирҙе. Был көндө өс кеше - казак, ике кеше - приказлы казак, берәү - өлкән урядник, ете кеше - подхорунжий, ике кеше - хорунжий, ике кеше - йөҙ башы (сотник), икәү - подъесаул, икәү - есаул, берәү - ғәскәр старшинаһы чинына лайыҡ булды. Ҡайһы берәүҙәргә шунда уҡ ике чин бирелде.

### Теманы дауам итеп…

***Альберт ИСМАИЛ, Башҡорт-мишәр казак бүлеге атаманы:*** Башҡорт-мишәр казаклығын тегеҙеү идеяһы күптән - уҙған быуаттың 90-сы йылдарынан, Рәсәйҙә казаклыҡты тергеҙеү тураһында беренсе ҡанундар сыҡҡандан алып йөшәп килә. Башҡорт йыйындарында ла казаклыҡты башҡорттарҙың ырыу структураһына индереү мөмкинлеге тураһында фекерҙәр булды, сөнки тарихҡа күҙ һалып, ревизия сказкаларын ҡараһаҡ, һәр ауылда тиерлек казак хеҙмәтендә булған башҡорттар - есаулдар, хорунжийҙар, писарҙар, поход йөҙ баштары булыуын күрәбеҙ.

Башҡорт казаклығын тергеҙеү Бөтә Рәсәй казак йәмғиәте структураһында тормошҡа ашырыла. Бигерәк тә бында Нефтекама башҡорттарының инициативалылығын билдәләргә кәрәк. 2015 йылда Халыҡтар дуҫлығы йортонда "Башҡортостан Республикаһында казаклыҡ тарихы һәм үҫеше" темаһына түңәрәк ҡор үтте, унда Өфө, Нефтекама, Мәләүез, Күмертау ҡалаларының төрлө казак йәмәғәт ойошмалары вәкилдәре ҡатнашты.

2020 йылда беҙ беренсе круг (йыйылыш) үткәрҙек, унда 20 казак ҡатнашты. Шул ваҡытта уҡ Башҡорт-мишәр казак бүлеге тип аталырға ҡарар иттек. Бындай йыйылыштар йыл һайын үтһә лә, быйыл ғына коммерцияға ҡарамаған ойошма булараҡ теркәлә алдыҡ. Был инде беҙгә федераль закондар, Президент указдары, муниципаль ҡарарҙар һ.б. хоҡуҡи акттар нигеҙендә Рәсәй казаклығы хоҡуҡтары менән ҡулланыу мөмкинлеге бирә.

***Руслан ЗАРИПОВ, БР-ҙың "Я ПАТРИОТ" граждандар-патриотик тәрбиә йәмғиәт ойошмаһы етәксеһе, БР-ҙың Ҡатнаш хәрби беҙәлеш (ММА) федерацияһы президенты:*** Беҙгә барлыҡ тарихи ваҡиғаларҙы өйрәнергә, тергеҙергә кәрәк. Тарихын өйрәнмәгән, ихтирам итмәгән, уны үҙ мәнфәғәтендә боҙоп күрһәткән халыҡтың киләсәге юҡ икәне барыбыҙға ла мәғлүм. Рәсәй - күп милләтле ил, уның халҡы - уның биҙәге генә түгел, уның тереге лә. Беҙ Ырымбур казак ғәскәренең Башҡорт-мишәр казак бүлегенең исем туйына арналған сара шаһиты булдыҡ. Материалдар эҙләү һәм табыу, уларҙы өйрәнеү, бер епкә теҙеү - ҙур һәм ентекле башҡарылырға тейешле эш. Әммә ул киләсәктә уҡытыусылар, уҡыусылар, тарихсылар өсөн яҡшы материал, әҙер әсбап буласаҡ.

"Я ПАТРИОТ" ойошмаһы бер нисә йыл рәттән үҙ көсөбөҙ менән иң яҡшы шәжәрә төҙөү буйынса "Илһөйәрлек һәр ғаиләлә. Минең шәжәрәм" республика конкурсын үткәрәбеҙ. Бындай сараларҙы йышыраҡ ойошторорға кәрәк. Улар халыҡты ҡыҙыҡһындырмай, тип, халыҡ өсөн уйларға кәрәкмәй - беҙҙең конкурсҡа 400-ҙән ашыу эш килде, хатта күрше өлкәләрҙән дә ҡатнашыусылар булды. Илһөйәрлек темаһы яңы ойошторолған Башҡорт-мишәр казак бүлеге эшмәкәрлеге планында ла төп урында тора. Ғөмүмән, лайыҡлы граждандар, ил патриоттарын тәрбиәләйбеҙ тиһәк, барлыҡ институттар - йәмәғәт ойошмалары, мәғариф, спорт, мәҙәниәт учреждениелары бергәләп, бер төптән эшләргә кәрәк. Шулай итеп кенә беҙ балаларыбыҙҙы алкоголизм, наркомания кеүек кире күренештәрҙән йолоп ҡала алабыҙ. Мәктәп, ата-әсәләр һәм уҡыусылар араһында яҡшы, эшлекле, сәләмәт бәйләнеш булдырылһа, тәрбиә лә тейешле кимәлдә буласаҡ. Шуға күрә, сәләмәт йәш быуын, уларҙа илһөйәрлек тәрбиәләү йәһәтенән бергәләп, әүҙемерәк эш алып барырға кәрәк.

***Салауат ХӘМИҘУЛЛИН, тарих фәндәре кандидаты, өлкән урядник:*** Башҡорт халҡының барлыҡ тарихы хәрби хеҙмәттән тора. Башҡорттар хазар ҡағанатынан алып Евразия империяһында ойошторолған барлыҡ хәрби йәмғиәттәрҙә лә ҡатнаша. Мәскәү батшалығы составына ингәс тә, аҫаба хоҡуғы һаҡланыу шарттарында, ярым автономиялы йәмғиәт хоҡуғында хәрби хеҙмәт үтәй, көньяҡ-көнсығыш сикте тулыһынса һаҡлай. Дөйөм алғанда, автономиялы хәрби ойошма булып тора һәм бойондороҡһоҙ һуғыштар алып бара, сөнки батша хөкүмәте башҡорттарҙың ҡаҙаҡтарға, ҡалмыҡтарға барымта яһауын һуңынан ғына ишетеп белә.

Ырымбур экспедицияһынан һуң Башҡортостан тулыһынса Рәсәй империяһы составына инә һәм хәрби ойошма ла Рәсәй империяһының Ҡоралл көстәренә ҡарай. XVIII быуат һуңында башҡорт-мишәр ғәскәре төҙөү тураһында ҡарар ҡабул ителә. Ҡатлам тураһындағы положение буйынса улар казак тип иҫәпләнмәй, йәғни казак ҡатламы була, әммә ғәскәр башҡорт-мишәр ғәскәре тип атала. Шул уҡ ваҡытта казактарға һуғыштарҙа ҡатнашҡан өсөн ҡаҙна ере бирелә, ҡоралланыу өсөн эш хаҡы түләнә, ә башҡорттар үҙ иҫәбенә ҡоралланырға тейеш була. Шулай уҡ казак ҡатламында булған башҡорттар ҙа бар, улар Урал, Ырымбур казак ғәскәрендәге башҡорттар. XIX быуат һуңында хатта үҙҙәрен башҡорт казактары тип атаған этнографик төркөм дә барлыҡҡа килә, улар бөгөн дә бар.

Тарихҡа бәләкәй генә экскурс башҡорттарҙың хәрби хеҙмәтендә казак традицияларының ят булмауын, уларҙың һәр саҡ халҡыбыҙға хас булыуын күрһәтә. Шуға күрә бөгөнгө сара - шул традицияның дауамы ул. Ә традиция дауамы, ул традицияға ҡаршы түгел, ул файҙалы һәм беҙҙең тарихи хәтеребеҙҙе һаҡлауға, үҙебеҙҙең кем икәнлегебеҙҙе аңлауға йүнәлтелә.

***Рәжәб КӨМӨШБАЕВ, Башҡортостан Республикаһы Хәрби комиссариатының хәрби-патриотик эш буйынса бүлек начальнигының өлкән ярҙамсыһы:*** Казаклыҡтың дәүләт хеҙмәте тураһындағы Федераль ҡанун нигеҙендә беҙ казаклыҡ хәрәкәтенә ярҙам итәбеҙ. Был 104-се ҡанунда казактарҙың бурыстары һәм йәштәргә хәрби-патриотик тәрбиә биреү сараларын ҡайҙа үткәреү урыны аныҡ билдәләнгән. Шулай уҡ 7-се статья ойошманың финансланыуына ҡағыла: әгәр ойошма Юстиция министрлығында теркәлеү үтһә, ул дәүләт тарафынан финансланыуға хоҡуҡлы.

Бөгөн ҡайһы бер уҡытыусылар, мәктәп директорҙары казак ойошмалары менән бик эшләргә теләмәй. Был - проблема, әммә атап киткән закон нигеҙендә белем усаҡтарына йышыраҡ мөрәжәғәт итергә кәрәк. Ошо көндәрҙә беҙ республиканың барлыҡ хәрби комиссариаттарына казак йәмғиәттәренә теркәлеү, йәштәргә патриотик һәм физик тәрбиә биреү буйынса саралар ойоштороуҙа ярҙам күрһәтеү буйынса хаттар ебәрҙек. Тағы шуныһы: әҙерлекле егеттәр хәрби хеҙмәтен Сыбаркүлдәге хәрби часта (Силәбе өлкәһе, танк дивизияһы) үтә ала. Быйыл өсөн йәш казак хәрби хеҙмәткә саҡырылғас, йыйылыу пунктында казак ойошмаһы биргән белешмәне беҙгә тапшыра һәм тап ошо хәрби часҡа ебәрелә.

Әйткәндәй, былтырҙан алып Әлкәләге хәрби гарнизонда ("Патриот" паркы) 10-сы синыф егеттәре өсөн күнекмә йыйындары ойоштороло башланы. Бөгөн барлыҡ саралар шунда үтә. Казактарҙың күнекмәләрен дә шунда үткәрергә була, кәрәк булғанда, ярҙам итергә әҙербеҙ.

***Валерий ЗАХАРОВ, Ырымбур казак ғәскәренең ғәскәр атаманы:*** Мин Башҡортостанға һәр саҡ ҡыуанып киләм, бында үҙебеҙҙәгегә ҡарағанда нығыраҡ аңлау табам. Казактар бөгөн төрлө. Ни өсөн төрлө, сөнки үҙҙәренең тарихын, тәрән тамырҙарын белмәйҙәр. Бөгөн мин бик күп тарихи дәлилдәр ишеттем. Минең төп маҡсатым - халыҡтарҙы берләштереү, халыҡтың аңын асыу. Ә беҙҙең халыҡ - ул 33 бөйөк ырыу. Бөйөк Пушкиндың 33 батыры тураһындағы юлдарҙы барығыҙ ҙа беләләр. 33 батыр - ул 33 ҡеүәтле ырыу. Беҙ берҙәм бөйөк халыҡ, ниндәйҙер төркөмдәргә, бәләкәй ойошмаларға бүленмәгәнбеҙ һәм дошмандарыбыҙға беҙҙе бүлгеләп, юҡ итергә мөрхәт бирмәгәнбеҙ. Ә бөгөн тап шулай бүлгеләп юҡ итергә маташалар. Шуға беҙгә йүнәлешле дөрөҫ һайларға кәрәк. Артабан нимә булырын белмәйем, әммә казактар һәр саҡ һәр ваҡиғаға әҙер булырға тейеш.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Бөгөн тарихсылар араһында ла башҡорт казаклығы тураһында төрлө фекерҙәр йөшәй. Бәғзеләр уларҙы казак булмаған ти, икенселәре иһә башҡорт казактары булыуын раҫлай. Төрлө гравюраларҙа ла башҡорт казактары һүрәтләнә. Уҙған быуаттың 90-сы йылдарында ла Өфөлә Ростәм Искужин башҡорт казаклығын тергеҙә башлағайны. Әгәр тарих ниндәйҙер арауыҡта ҡабатлана икән, тимәк, миссия тулыһынса үтәлмәгән һәм уны кемдер үтәп, ғәләм алдындағы бурысты ябып ҡуйырға тейеш. Бәлки, бөгөнгө казактарҙыр? Уныһын инде Ваҡыт ғәли йөнәптәре үҙе күрһәтер һәм баһалар.**

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

ФӘҺЕМ

# МУТЛАШЫУСЫМЫ УЛ, ӘЛЛӘ...

## зирәк кешеме?

**Өлкә гәзиттәренең береһендә бер яҡташыбыҙҙың хоҡуҡ һаҡлау органдарына телефон аша мутлашыусыларҙың курьерын ҡулға алырға ярҙам итеүе хаҡында уҡыным. Был - булған хәл тип яҙалар. Мутлашыусы икәнен белеп тә, уға үҙенең адресын әйтергә батырсылыҡ иткән кеше - гүзәл зат вәкиле! Театрҙа эшләүсе артист ҡатын, үҙен "зыян күреүсе пенсионер" итеп күрһәтер өсөн грим һалып, әбей ҡиәфәтенә инә һәм аҡса артынан килеүсе курьерҙы ҡаршы ала. Алдан исҡәртелгән полиция хеҙмәткәрҙәре эҙәрлекләп барып, әлеге енәйәтсене тотоп ала. Ә төп мутлашыусының үҙен, сит илгә сығып ҡасыуы сәбәпле, эләктерә алмайҙар..**



Гәзитебеҙ биттәрендә, телетапшырыуҙарҙа фәлән-фәлән кешенең мутлашыусыларға бер нисә йөҙ мең, хатта миллион һумын күсергәнлеге хаҡындағы хәбәрҙәр йышайҙы һуңғы осор. Шундай енәйәтселәрҙең телефон тоҙағына башлыса әбей-бабайҙар эләгә. Кеше аҡсаһын уның өйөнә инеп, урлап йә талап алып китеүсе бурҙарҙан бер нәмәһе менән дә айырылмай тиерлек бындай әҙәм аҡтыҡтары. Тик ҡорбанына физик көс кенә ҡулланмай улар. Кешеләр бындайҙарға аҡсаһын "үҙ теләге менән" бирә. Ошондай хәлдәргә лә хәҙер күнегеп бөтөп барабыҙ шул, йәмәғәт.

Һуңғы йылдарҙа тағы бер еңел ысул менән "мал табыусылар" хаҡында ла имеш-мимештәр ишетелгеләй башланы. Юҡ, улар енәйәтсе түгел! Ундайҙар һис кенә лә законды аша атламай, уларға кешеләр үҙҙәренең матди байлығын үҙ теләге менән генә түгел, ә ҙур ҡәнәғәтләнеү менән бирәләр, тиеү дөрөҫерәк булыр. Эйе, эйе, ысынлап та бирәләр, әммә һуңынан, эш үткәс кенә үкенә башлайҙар. Бер-ике йыл элек бер яҡташым күрше өлкәләрҙең береһендә бер олпат йәштәрҙәге ир менән булған хәл хаҡында һөйләгәйне. Мине генә түгел, ошо мәҡәләне уҡып ултырыусы күптәрҙе тетрәндерер был хикәйәт.

Йәшен тултырып, хаҡлы ялға сығып, ниһайәт, ял итәм икән, тип өмөтләнеп йөрөй бит инде оло йәштәге кешеләр. Үҙ эшенә һәр саҡ намыҫ менән ҡараған бындай кешеләрҙең ялға туктаған шул осоро, ысынлап та, ҡыуанысл мәл. Әммә бәғзе берәү ғүмер буйы ҡайҙалыр эшләп, пенсия фондына һалым-фәлән түләп йөрөп тә, өмөт иткән пенсия аҡсаһын күрмәй ҙә үлеп китә. Айырыуса ир-ат халҡы. Инде етмеште ҡыуып барғанында, һау-сәләмәт көйө пенсияға сығыу бәхетенә өлгәшкәнһең икән, ғүмерең ахырынаса ай һайын килеп тора торған шул аҡсаға ҡыуанып, йәшә лә йәшә инде!

Мәҡәләнең төп геройы булған әлеге ир-уҙаман да тап ана шулай көтөп алынған хаҡлы ялына сыҡҡан. Тик оҙаҡламай шул уҡ эшенә ҡабаттан урынлашҡан. "Ярай, эшләрлек рәте, һаулығы булһа ни, әйҙә, эшләһен. Күберәк аҡса, моғайын, ҡамасауламаҫ", тип уйлай бит инде һәр кеше бындай эшһөйәр кеше хаҡында. Әммә был кешенең эшләй башлау сәбәбе бөтөнләй башҡа булған шул: миллионға яҡын кредит алып, бурысын түләй башлаған. Ә нимәгә уға шунынсама аҡса кәрәк булған һуң? Балалары күптән инде башҡа сығып, айырым йәшәгән. Бәлки, шул ғәзиздәренең береһенең шундай суммаға мохтажлығы барлыҡҡа килгәндер?

Әммә эш бөтөнләйгә башҡала булған. Шатлыҡ та, ҡайғы ла әҙәм балаһы менән йәнәш йөрөй бит. Хаҡлы ялға сығыр мәле яҡынлашыуға был ирҙең әлектән бер хроник сир менән яфаланған ҡатыны, хәле ауырайып, түшәккә ята. Шул саҡ икенсе бер гүзәл зат (ҡарттың йәш сағындағы "яҡын танышы", тип әйтәйек), ҡатынының насарланыуы хаҡында ишеткәс тә ошо ғаилә хәле менән ҡыҙыҡһына башлай. Оҙаҡламай хужабикә баҡыйлыҡҡа күсә. Шул осорҙан алып әлеге гүзәл заттың йөрәгендә тол ҡалған ир-егеткә ҡарата "тәрән һөйөү хистәре ҡабаттан уяна". Ошо хаҡтағы эс серҙәрен әкренләп белгертә-белгертә, ир менән әүҙем аралаша башлай был ҡатын. Ғүмер буйы бергә йәшәгән хәләл ефетен юғалтҡан бабайҙың "ҡайғыһын уртаҡлашырға" хатта үҙенең ҡыҙҙары менән бергәләп тә килгеләй. Үҙе лә бер нисә йыл элегерәк ирен ерләгән булған икән. Тиҙ арала бабайҙың күңелендә һәүетемсә нескә хистәр уятыуға өлгәшеп, бер ай тирәһенән ир йортона күсенеп, уның менән бергә йәшәй ҙә башлай.

"Йәш кәләш" элекке сирле ҡатынына ҡарағанда ла яғымлыраҡ, алсағыраҡ булып сыға, иргә тейешенсә ҡәҙер-хөрмәт күрһәтә. "Һин - минең мөғжизәм! Инде нисәмә йыл һин тик минең хыялымда ғына булдың! Һин - минең таңым, бәхетем!" кеүегерәк йәш сағында ла ишетмәгән матур, "тылсымлы" һүҙҙәрҙе ишеткәс, олоғайып барған йөрәк йәшәреп, хатта иреп тә китә. Ҡатындың әлләҫасан уҡ балиғ булған ҡыҙҙары ла үҙҙәренең атайҙары урынында ҡалған был оло кешене ихтирам итә, өрмәгән ергә ултыртмай. Кемдер берәү ошо мәлдә: "Әйҙә, артабан да шулай бәхеткә күмелеп, рәхәтләнеп йәшәй бирһендәр. Бындай тормош кемгә эләгә әле!" - тип уйлай ҙа башлағандыр. Ошо хаҡта ишеткәс, миндә лә баштараҡ бына шундай фекер тыуғайны...

Алсаҡ ир яңы кәләшенә үҙенең банкта ятҡан ярты миллионы хаҡында ла һөйөнсөләп өлгөргән булған икән. Гүзәл зат оҙаҡламай "һөйөклөһөнә" фатирын һатып, ер-яңы өй һатып алырға тәҡдим яһай. Тик яҡшы өй һатып алыр өсөн фатир һатҡан аҡсаға әлеге биш йөҙ меңде ҡушҡас, тағы "ни бары миллион тирәһе генә" өҫтәргә кәрәк икәнлеге асыҡлана. Ирҙең пенсияһына банктан кредит алһаң, "бер нисә йыл эсендә генә" уны түләп тә бөтөрөп була икән. Ҡыҫҡаһы, әлеге ҡатын ирҙең күңелен иретеп, үҙенең планын томошҡа ашырып та ҡуя. Ә һатып алынған ҙур өйгә кем хужа тип уйлайһығыҙ? Хужа булыу түгел, ир хатта өлөшсө лә булып тормай...

Артабан нисек тә йәшәргә кәрәк бит: инде быуындары шығырҙауын да яҡшы тоя башлаған ир ҡабаттан элекке "ятраҡан" эшенә ҡайтырға мәжбүр була. Ул ғына ла түгел, хәҙер ул, төп эшенән тыш, "ҡалым" тигән нәмә менән дә булыша башлай. Сөнки, кредитты ай һайын түләүҙәрҙән тыш, көн һайын ашарға ла кәрәк икән. "Йәнкиҫәге" һәм уның ҡыҙҙары өсөн нимә генә эшләмәҫһең!..

Хәҙер инде был байғош ирҙә мөхәббәт ҡайғыһы юҡ. Яңы ҡатынына ҡарата булған нескә тойғолары үҙенең "елкәһендә эленеп" торған миллионды нисек түләп бөтөү хаҡындағы борсоулы уйҙар аҫтында күмелеп ҡала. Ҡатын да һуңғы осорҙа башлыса ирҙең күпме "ҡалым" аҡсаһы алып ҡайтыуы менән генә ҡыҙыҡһына. Ир, меҫкен, таныш-тоноштарына ла үҙенең ниндәй көнгә ҡалыуы тураһында зарлана башлай. Әммә: "Ҡайғырма, барыһы ла үтер",- тип йыуатыусы башҡа уға нисек ярҙам итергә мөмкин һуң? Хатта хоҡуҡ һаҡлау органдары ла уның был хәлен еңеләйтә алмаясаҡ, сөнки бында законға ҡаршы бер ни ҙә ҡылынмаған...

Ғәзиз атайҙарының олоғайған көнөндә ана шулай "ярыҡ кәмәлә" ултырып ҡалыуы хаҡында балалары ла хәбәрҙарҙыр, тип уйлайым. Шул яҡындарының күҙенә нисек ҡарайҙыр был атай кеше? Иртәме-һуңмы, һәр төрлө ҡартлыҡ сирҙәре баҫып китһә, тик үҙ балаларының ярҙамына ғына өмөт итә ала бит инде ул...

Был ҡорҙашты йәлләп, уның йәш кәләшенең зирәклегенә таң ҡалып, ошо хаҡта гәзиткә яҙа башлағас, элегерәк үҙем белгән икенсе бер таныш бабай иҫкә төштө. Тол ҡалғас, был ағай, башлыса, яңғыҙ йәшәне. Ҡабаттан өйләнмәне түгел, өйләнде ул, минең белеүемсә генә лә тағы ике мәртәбә никахлашты. Әммә оло йәштә булыуына ҡарамаҫтан, үҙе ифрат зирәк, тапҡыр булған был ҡартҡа, нишләптер, һәр саҡ әлеге миҫалдағы һымаҡ үҙ балаларын "артыҡ ныҡ ҡайғыртыусы" әбейҙәр осрай ине. Бабайҙың үҙенең бала-сағалары ла бар, әммә яңы ҡатындың уларҙы яратып етмәүе ҡарттың иғтибарынан һис кенә лә ситтә ҡалманы. Шуға күрәләр ҙә, ҡарт был ҡатындарҙың береһен дә оҙаҡ тотманы.

Ә икенсе бер танышым яңғыҙ ҡалғас, үҙенән байтаҡҡа йәшерәк берәү менән "граждандлыҡ никахында" йәшәп ҡараны, әммә бер йыл да тормай, ҡатын унан үҙе китте. Сөнки "фатирына теркәргә теләмәгән һаран бабай" менән артабан был гүзәлдең бергә йәшәү теләге булманы. Ҡарт "ни өсөндәр" үҙенең ике улын был ҡатынға ҡарағанда артығыраҡ күргән һәм фатирын шул ғәзиздәренең береһенә яҙҙырған, имеш...

Бәғзе берәүҙәр ҡарт кешегә артыҡ "егетләнмәй", бер аҙ ана шундайыраҡ зирәк булыу ҙа хәйерлерәктер, тигән фекерҙә. Һәр хәлдә, баштараҡ бәйән ителгән, "мөхәббәтенә иҫереп" аҡылын юйған "асыҡ ауыҙ" бабай һымаҡ булырға ярамай бит инде. Бәлки, башҡасараҡ фекерләүселәр ҙә барҙыр?..

Әлеге телефон аша мутлашыусыларға ҡабаттан әйләнеп ҡайтайыҡ әле. Уларҙы берәй ҡасан тапҡан, тотҡан осраҡтар хаҡында ишеткәнем юҡ. Башта иҫкә алған мутлашыусыға ярҙам итеүсе курьер егетте, әлбиттә, "енәйәтсе" тип тә атап була. Ә йөрәк хистәре менән уйнап, олоғайған кешене "кредит" һаҙлығына батырыусыларҙы, ҡарт кеше менән йәһәтерәк ЗАГС-ҡа инеп, хәйләләп, уның балаларының күҙен баҡтырып, фатирына хужа булырға ынтылыусыларҙы нисек атарға? Кем нисек, әммә мин уларҙы "зирәк" кешеләр тип кенә атауҙан уҙа алманым. Ҡыҙыҡ, улар үҙҙәрен нисегерәк тоя, кем тип атай икән?..

Ә шулай ҙа баштараҡ һөйләнгән күңелһеҙ осраҡта кемде ғәйепләргә? Үҙенең ятраҡан ҡыҙҙарының тормошон ҡайғыртыусы яңы кәләштеме? Бәлки, кемдәргәлер сәйер ҙә тойолор, әммә минең уйымса, был бәләлә әлеге зыян күреүсе "башһыҙ" ир кеше тик үҙе генә ғәйепле. Уны нисек кенә йәлләһәм дә, бына шундай инаныуҙамын әле мин. Шуға ла оло йәштәрҙәге бәғзе берәүҙәрҙе ошондай хәлдәр тураһында иҫкәртеүҙе кәрәк тип таптым. Йәш ваҡыттарҙы, ғәҙәттә, "тиле йәшлек" тип тә атайҙар. Шул саҡтарҙа ебәргән хаталарҙы "йәшлек хатаһы" тигәндәрен дә ишеткеләгәнем бар. Былар - барыһы ла аңлашыла. Тик бына инде олоғайған көнөндә кешеләр бер аҙ аҡыллыраҡ булһын ине.

**Хәлил ҺӨЙӨНДӨКОВ.**

***✓ "Улар атайымды һәләк иткән! Ә мин... Мин... Улар менән йылмайып һөйләшәм, ялсылары кеүек ярҙам итәм, ас кеше кеүек өҫтәлдәренә ултырып, тамаҡ туйҙырам! Ниндәй оят! Оят! Позор!"- тип һыҡтай уның күңеле...***



*Серҙәшем, фекерҙәшем булған олатайыма, рәхмәт һәм ихтирам менән*

**Зөлфирә ҠАҘАҠБАЕВА**

# МИНЕҢ ЯРАТҠАН БАШҠОРТОМ

**(Повесть)**

Ысынлап та, уларҙа исемдә мәғәнәһенә ҡарап, тап килгәнен һайлап ҡушыу йолаһы бар икән. Мәҫәлән, ҡыҙына шәмәхә төҫөнә тартым күҙле булып донъяға килгәс, уйлап та тормай Иоланта тип атағандар. Баҡтиһәң, был "фиалка", беҙҙеңсә "миләүшә" тигәнде аңлата икән. Ошоно белгәндән һуң Мир йыш ҡына ҡыҙға Миләүшә тип өндәшер булып китте. Үҙ телендә өндәшеү ҡәнәғәтлек килтерҙеме, әллә шулай ҡулай тип таптымы, үҙе уйлап та бирмәне, ә ҡыҙға иһә был ят исем бик ҡыҙыҡ тойолдо.

- Ә һинең исемең нимәне аңлата?- тип һораны ҡыҙ сираттағы тапҡыр һалдат уны Миләүшә тип атағас.

- Мир - ул тыныслыҡ тигәнде аңлата. - Егет уйламай ғына шулай тип тәржемәләне лә ҡапыл телен тешләне. Атаһы бит уға ошо исемде һайлаған, моғайын, уҡытыусы, грамоталы, русса гәзит уҡыған, радио тыңлаған, алдынғы кеше булараҡ донъяла барған ҡанҡойошто белгәндер, бөтөн Европаны баҫып алып килгән фашизмдың Совет иленә лә килеп етерен тойомлағандыр ҙа, улына ҙур өмөт менән Тыныслыҡ исемен биргәндер. Илебеҙ, еребеҙ тыныс булһын, тигән ниәттән. 1939 йылдың августында донъяға килгән улын һөйөп тә туя алмай, уға 2 генә йәш, өлкән улына 5 йәш тигәндә, уларҙы һәм йәш ҡатынын һуңғы тапҡыр ҡосағына алып, илбаҫарҙарға ҡаршы яуға киткән. "Ҡайтырмын, кәләш, көт! Уландарымды һаҡла!" - тигән атаһының һүҙҙәрен әйтеп, йыш ҡына илаулап алыр ине әсәһе сираттағы Еңеү көнө етһә. Ҡайтманы шул атаһы, гәзиз башы 1943 йылда Ҡырым ерендә ятып ҡалды. Уландарым үҫер, армия сафтарында үҙ бурыстарын үтәр, хатта үҙе яратып Мир исемен биргәне ул аяуһыҙ көрәшкән фашистар иленә барып хеҙмәтен үтәр, немецтар менән һин дә мин һөйләшеп, уларҙың ризығын ейеп ултырыр, тип башына ла килтермәгәндер бахыр атаҡайы! Был уйҙарҙан Мир урынынан һикереп тора, алдындағы ашын өҫтәлдән алып ташлауҙан саҡ тыйылып, тышҡа атыла. Иоланта унан ҡалмай, егеттең кинәт кенә нимәгә төҫө боҙолоуын, кәйефе төшөүен аңғармай, ни булыуын төпсөшөп, артынан атлай. Мир өндәшмәй, ҡаты-ҡаты баҫып, ишек алды буйлап йөрөй, алмағастың алмаһын өҙөп алып, сәсрәткәнсе ергә бәрә.

- Сволочь мин! Сволочь! Атайымдың ҡан дошмандары менән дуҫлашып, уларҙың ашын ашап ултырам! Һатлыҡйән мин! Бына кем - һатлыҡйән! - Күҙенә йәш бәреп сыға. Егеттең үҙ телендә нимәлер әйтеп әрләшеүен генә аңғарған, әммә мәғәнәһен аңламаған ҡыҙ зәңгәр шәмәхә күҙҙәрен уға төбәп, өнһөҙ генә аптыранып тора. Һалдаттың яурынына ҡулын тейгеҙеүгә, тегеһе ҡорт саҡҡандай, һикереп китә, ҡыҙҙың ҡулын һелкеп төшөрә:

- Ҡағылма! Ҡағылма! - тип шәп-шәп атлап, казармаһына ҡайтып китә. Теүәлләнмәгән эш тә, тәҙрәнән баш сайҡап ҡарап ҡалған Юрген ҡарт менән әбейе лә уны ҡыҙыҡһындырмай. Үҙ-үҙенә булған күрә алмау хисе уны шәберәк атларға, ямғыр һыуы йыйылып ятҡан күләүектәрҙе шаптырҙатып киҫеп үтергә, битенә бәрелеп ҡалған ағас ботаҡтарына иғтибар итмәй, алға ынтылырға бойора кеүек. "Шул кәрәк миңә һатлыҡйәнгә! Шул кәрәк! Улар атайымды һәләк иткән! Ә мин... Мин... Улар менән йылмайып һөйләшәм, ялсылары кеүек ярҙам итәм, ас кеше кеүек өҫтәлдәренә ултырып, тамаҡ туйҙырам! Ниндәй оят! Оят! Позор!"- тип һыҡтай уның күңеле... Битенән юлаҡ-юлаҡ күҙ йәштәре аға...

Ошо хәлдән һуң отделение командиры, өлкән сержант Зиннәтуллин Коссмандарҙың саҡырыуынан баш тартып, өс-дүрт айҙай уларҙың өйөнә аяҡ баҫманы. Гарнизонға үҙ эше менән килгән Юрген ҡарт уйҙарын белдермәй генә ҡарашы менән байҡап, баш ҡағып ҡына иҫәнләшеп үтһә, Иоланта иһә уҡыуҙан ҡайтышлай йыш ҡына тимер ҡойма ярығына килеп, Мирҙы көтөп ултырыр булды. Тәүҙә казарманың икенсе ҡатындағы тәҙрәһенән ҡыҙҙы шәйләһә лә, эргәһенә барманы егет. Көндәр, айҙар үтте, асыу һүрелде. Күңелен өйкәп торған төйөн яҙылды кеүек. Юргендың ғаиләһен дә, Иолантаны ла, өй ашын, өй йылыһын да һағыныуын, ниҙер етмәүен аңланы егет.

Бер көн шулай сираттағы сәйәси уҡыуҙарҙан һуң тәҙрәгә күҙ ташланы ла, күнегелгән урында ҡыҙҙың таныш тунын шәйләне. Ҡыш ине. Бөтә ер, парктағы ағастар ап-аҡ юрған менән ҡапланған. Ә ҡыҙҙың зәңгәр башлығы, зәңгәрһыукөрән туны ошо аҡлыҡта ап-асыҡ булып күренеп, үҙенә ылыҡтырып тора ине. Мир түҙмәне, йәһәт кенә кейенеп, тышҡа сыҡты һәм ағастарға ышыҡланып торған ҡыҙ янына ашыҡты. Йүгереп килеп, ҡыҙҙың яланғас ҡулдарынан тотто: улары өшөп бөткән ине. Нәфис бармаҡтарҙы тыны менән йылытып, үҙе лә һиҙмәҫтән ҡулының һыртып үбеп алды. Ныҡ һағынған икән дә баһа! Бығаса оҙон-оҙаҡ һөйләшеп ултырһалар ҙа, улар араһында егет менән ҡыҙ мөнәсәбәте булғаны юҡ ине. Мир уға ниндәйҙер танышына, күршеһенә, туғанына, йәки сит кешегә ҡараған һымаҡ ҡына ҡарай ине. Уның ҡатын-ҡыҙ затынан булыуы, матурлығы, һомғоллоғо уның күҙенә лә салынманы. Бәлки, "Ул бит немка!" тигән уймы, аңындағы бойороҡмо, уны был күҙлектән ҡарарға тыйғандыр. Һалдаттың ҡулдарын үбеүе ҡыйыулыҡ өҫтәнеме, әллә күптән егеттән бер ым-ишара көтөп йөрөгәнме, Иоланта ҡапыл ғына уның ҡосағына һырылды ла, башын күтәреп, аяҡ осталарына баҫты һәм бер секунд эсендә егеттең ирендәренән һурып үпте. Мирҙың башы әйләнеп, күҙ алдары ҡараңғыланғандай тойолдо. Уның әле бер кемде лә ҡосаҡлағаны, ирендәренә ҡағылғаны, хатта ҡатын-ҡыҙҙы оҡшатҡаны ла, уйлағаны ла юҡ ине.

- Иоланта! Миләүшә! Башҡа былай итмә! - тине лә боролоп казарма яғына йүгерҙе. Күңелендә быҫҡып ятҡан фашистарға нәфрәт йәнә баш ҡалҡытты. "Күрә алмайым! Күрә алмайым! Немка! Фашист ҡалдығы!"- тип мейеһен сүкене аҡылға буйһонған уйҙары. Ә йөрәге шатлыҡлы итеп йыш-йыш типте, унда ниндәйҙер икенсе тойғолар бөрөләнә башлағандай булды...

Тағы ла оҙаҡ ҡына осрашыуҙан ҡасып йөрөнө Мир. Тәүге үбеүҙән һуң татыған хистәр уны йәнә тетрәндерҙе. Йыш ҡына әсәһенең, күрше ҡыҙы Мөғлифәнең, ағаһы Римдең хаттарын алып уҡый, тыуған ерен, ауылын иҫенә төшөрә. Әсәһе менән ағаһы уның тиҙерәк өс йыллыҡ хеҙмәтен тултырып, имен-аман ҡайтып төшөүен көтә. "Тура өйгә ҡайт, ауылда, колхозда эш муйындан. Эшсе ҡул етешмәй, бигерәк тә тракторсы, комбайнер, шоферҙар кәрәк!" - тип яҙа әсәһе. "Мине хеҙмәтемде дауам итеп, артабан да ҡалыуымды үтенәләр. Старший сержант званиеһы биреп ташланылар, хәҙер мин отделение командиры,- тип яҙғайны шул Мир. - Бында халыҡ бик мул көн күрә. Их, әсәй, һине ошонда алып килеп күрһәтергә кәрәк ине. Халыҡ ҡандай рәхәтлектә йәшәй: ауыл өйөндә лә бөтөн кәрәкле нәмәһе, йыуына торған ванна, душ тигән әйберҙәре лә, хатта әбрәкәйе лә йорт эсендә, кранынан һыу килеп тора, беҙҙәгесә алыҫтан көйәнтәләп һыу ташыу уларҙа онотолған. Ошондай рәхәттә генә йәшәтер инем һине, әсәй!" "Атаңдың башына еткән нимесләрҙе маҡтап ултырма! Шул ярман ерендә йәшәргә уйлаһаң, әсәң барын онот! Һин минең улым түгел!" "Юҡты һөйләмә! Һин әсәйгә терәк, ситкә китеү, йә контракт менән тағы хеҙмәттә ҡалыуҙы уйлап та ҡарама! Беҙ еңгәң менән район үҙәгенә күстек, - тип яҙа ағаһы. - Бында балаларҙы ҡарай торған ясли асҡандар. Ике малайҙы шунда ҡалдырып, еңгәсәйең эшкә сыҡты. Беләһең бит уҡыған кешеләр етешмәй, ә минең йәмәғәтем районда берҙән-бер тип әйтерлек бухгалтер һөнәренә эйә".

Күрше ҡыҙы Мөғлифәнең хаттары тыныс, уйсан, аҙ һүҙле. Ул былай үҙе лә шундай холоҡло ҡыҙ. Белә-белгәндән бергә үҫтеләр, икеһенең дә атайҙары һуғыштан ҡайтмағас, бығаса ла әхирәт булышҡан әсәйҙәре үтә лә яҡынлашып, туғандар кеүек булып китте. Уртаҡ ашанылар, уртаҡ мунсаға төштөләр. Һуғыш йылында хатта утынды исрафламайбыҙ тип, бер-ике йыл ҡышты бер өйҙә, бергә сыҡтылар. Кемдең ашарға нимәһе бар - уртаҡ булды. Хәйер, ул саҡта нимә генә булһын инде: шыйыҡ өйрә, алабута ҡушылған арыш икмәге, боламыҡ. Тары бутҡаһы булһа, өйҙә байрам булыр ине. Рим, Мир менән Мөғлифә шулай бер туған һымаҡ үҫте. Мирҙан ике йәшкә кесе ҡыҙыҡай тыңлаусан, баҫалҡы ғына ине. Малайҙар нимә әйтһә, шуны үтәне. Асыҡһа ла, йыуа, ҡаҡы, ҡымыҙлыҡ кеүек ашарға яраҡлы үлән эҙләп, алыҫ яландарҙы гиҙгәндә лә арыным тип мыжыманы, эйәреп, һөйрәлеп ҡайтып йығылыр ине. Уҡырға барғас та, үҫмерлек ҡорона ингәс тә, уға ҡыҙ бала итеп ҡараманы малайҙар. Үҙҙәре кеүек бер кеше инде. Яҙған хаттарына яуап биргәндә лә Мир уны ҡыҙҙарҙан килгән хат тип уйламаны. Әле килеп Иоланта уны үбеп алғас, ҡылт итеп ошондай уй башына килде: ә нимә, мин шулай ҡыҙҙар ҡарарлыҡ, яратырлыҡ егет булып еткәнменме ни? Ул тиҙ генә Ҡыҙыл мөйөшкә инеп, оло көҙгөгә күҙ һалды. Метр етмештән артығыраҡ оҙон буйлы, саҡ ҡына тулҡынлана биргән ҡап-ҡара ҡыҫҡа сәсен артҡа һыпырып һалған, оҙонса йөҙлө, ҡара сәстәргә бөтөнләй тап килмәгән зәңгәр күҙле егет уға ҡараны. Төҙ танау, ҡыҙҙарҙыҡы кеүек ҡабарынҡы ирендәр, уртасанан саҡ ҡына оҙонса бит, яҫыраҡ эйәк. Сикәләре батынҡы, итлән түгел. "Атаҡ, ҡәҙимге генә икәнмен дә баһа! Ҡыҙҙар ҡарарлыҡ шул", - тип көлөмһөрәне Мир үҙенең сағылышына. Көҙгөләге сибәр егет тә уға ҡарап йылмайҙы. Мир йәнә йәһәтләп хаттарын ҡулына алды. Мөғлифә! Бәлки, ул да миңә еткән егет итеп ҡарайҙыр! Бәлки, шуға хат артынан хат яуҙыралыр, ә мин, алйот, бер ни уйламай, ябай бер ауылдашҡа яҙған һымаҡ ҡына сыймаҡлап ебәрәм. Ул тәүге тапҡыр ҡыҙҙың хатын йәйләп, һәр һүҙен иғтибарлап уҡып сыҡты. Бына һиңә мә! Егет ишаратына тип яҙған шул! Ә ул, иҫәр, ундай уйҙы башына ла килтермәне! "Ҡәҙерле Мир! ... Һағынышлы сәләмдәр менән... Һинең менән киске уйындарға йөрөгән саҡтар һағындыра... Һин булмағас, күңелһеҙ... Һинең хаттарыңа номерҙар ҡуйып, бөтәһен дә рәтләп, һалып барам. Һин дә йыйнап бар, ҡайтҡас, сиратлап уҡып, көлөшөп алырбыҙ... Балаларыбыҙға ла уҡытырбыҙ... Әсәйем менән һинең әсәйең хатта бер-береһенә "ҡоҙағый" тип шаяртышып алалар... "Киленем шәп булмаҡсы, бөтөн эште белә!"- тип әсәйең маҡтап, мине оялтып сығып китте..." Хат һайын ошодай нескә генә шаяртыу, ым, ишара булған да баһа! Ә Мир, һуҡыр, уны ябай хат, көндәгесә хәбәр һөйләү тип кенә ҡабул итте. Хатта немка менән танышыуын, немец телен рәхәтләнеп өйрәнеүен, уларға ҡунаҡҡа йөрөүен дә яҙып һалғайны. Нимә тип уйланы, нимә тип яуап бирҙе икән һуң Мөғлифә?

Мир хаттарҙы ҡат-ҡат аҡтарҙы, әммә был һорауына яуап таба алманы, сөнки ошо хәбәрҙән һуң Мөғлифәнән башҡаса хат килмәгән. Ҡасан килгән һуң һуңғы хаты? Ҡайһы бер хаттарына ҡыҙ үҙенең ҡасан яҙғанын теркәгән, ҡайһыларында юҡ, уларын Мир конверт тышындағы мисәт буйынса ҡасан ебәрелгәнен, йә ҡасан килгәнен айырып ҡарап, сиратлап һалып сыҡты. Теүәл бер йыл хат булмаған! Тимәк, ысынлап та, Мөғлифә уға өмөт бағлап йөрөгән, әрменән ҡайтыр, өйләнешербеҙ, тип уйлаған. Мирҙың немка менән дуҫлашыуын уҡып, башҡаса хат яҙып тормаған... Был уйҙан егеткә нисектер еңел булып китте. Яратманы бит ул Мөғлифәне, оҡшатманы ла. Шулай бергә үҫтек, уйнаныҡ, уҡыныҡ, хат алыштыҡ. Ябай аралашыу, дуҫлыҡмы, туғанлыҡмы шунда. Ә бер-береңә тартылыу, оҡшатыу, һағыныу булманы бит! Бәлки, ошолай өҙөлөшөп ҡуйыу яҡшыраҡтыр ҙа, бушҡа өмөтләнмәһен күрше ҡыҙы, үҙенең яратҡанын осратыр, кейәүгә сығыр. Бәлки, Мир ҙа кәләш алып ебәрһә, ҡатышып, ҡунаҡҡа ла йөрөшөрҙәр әле...

**(Дауамы. Башы 45-47-се һандарҙа).**

*ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!*

# АУЫРЛЫҠТЫ ЙЫРҘАР ЕҢЕЛӘЙТӘ...




**"Тормош менән аралар боҙолған саҡтарҙа, көн яҡтыһы күҙгә күренмәҫ булғанда, ҡапыл иҫемә төшә: донъяла йыр бар бит әле. Тимәк, инанырға, сабыр итергә, йәшәргә кәрәк. Һуңғы ҡабым икмәгем, һуңғы йотом һыуым менән бергә һуңғы тапҡыр ишетер йырым булһа, үкенергә ҡалмаҫ, тип йыуанам".**

Халыҡ шағиры Мостай Кәримгә эйәреп, әлдә йыр бар әле донъяла, тибеҙ. Йыр бар икән, тимәк, йәшәйбеҙ, сөнки ул йыуата, уйландыра, моңландыра, рухландыра, һағышты баҫа, көсдәрт өҫтәй, ауырлыҡты еңеләйтә... Йырҙың ошо ҡөҙрәтле көсөнә бөгөн айырыуса мохтажбыҙ.

Ауырлыҡты йырҙар еңеләйтә. "Юлдаш" радиоһы үткәргән йыр фестивале лә тап ошо девиз аҫтында үтте. "ЮлдашХит - 2022" - радиола йыл дауамында барған хит-парадҡа йомғаҡ яһау сараһы. Тыңлаусыларыбыҙ ай һайын яңы сыҡҡан йырҙар араһынан күңелдәренә яҡын башҡарыусылар өсөн тауыш биреп, һайлап барҙы. Иң күп тауыш йыйған йырсылар "ЮлдашХит" сәхнәһенә күтәрелеп, йылдың төп йырҙарын башҡарҙы.

Бынан тыш, төрлө быуын кешеләрен берләштергән йырҙар менән әсир иткән талант эйәләре лә үҙ сығыштары менән һөйөндөрҙө. Был инде "Юлдаш-хит" концертының матур йолаһы. Мәҫәлән, Башҡортостандың халыҡ артисы Азамат Тимеровтың улы Арыҫлан менән башҡарған "Йылғалар төнөн һөйләшә" йырын тамашасы бик йылы ҡабул итте. Шуныһы иғтибарға лайыҡ: атаһының йыры улынан да оҙағыраҡ йәшәй икән. Арыҫланға әле 18 йәш булһа, йырға - 32 йыл...

"ЮлдашХит" йыр фестивалендә иң юғары баһа - ул халыҡ һөйөүе һәм "Юлдаш" радиоһының халыҡ артисы" тигән исем. Быйыл был исемгә Фәриҙә Ғаззалова, Дамир Тайыпов, Иҙел Нурғәлин дәғүә итте. Тамашаға килгән тыңлаусылар улар өсөн сәхнә экранына сығарылған QR-код аша үтеп, тауыш бирҙе. Халыҡ һөйөүен Иҙел Нурғәлин яуланы. Әйткәндәй, былтыр был исемгә лайыҡ булған артистар күп тә тормай Хөкүмәт наградалары да алды. Был йола дауам итер, тип ышанабыҙ.

Йыл һайын "Юлдаш" радиоһы республика мәҙәниәте үҫешенә тос өлөш индергән шәхестәрҙе ололай, йыр сәнғәтендә тырышып эшләгән йәштәрҙе лә билдәләп үтә. Быйыл "Легенда" номинацияһында Башҡортостандың халыҡ артисы Зөлфирә Фәрхетдинова тәбрикләнде. Ҡыҫҡа ғына ғүмер эсендә бик емешле ижад иткән, 48 йәшендә генә беҙҙең аранан китеп барған Башҡортостандың атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре Илшат Яхин "Йыл композиторы" тип билдәләнде. Ул бик күп популяр йырҙар авторы, "Ирәндек моңдары", "Байыҡ", "Башҡорт йыры" конкурстары, "Салауат йыйыны", "Йөрәк һүҙе" проекттарына көйҙәр яҙыусы. Беҙҙең республикала төшөрөлгән һәр кинола һәм сәхнәгә сыҡҡан һәр спектаклдә тиерлек уның музыкаһы яңғырай. Өфөләге "Ете ҡыҙ" фонтанының музыкаль биҙәлеше лә - уның ижад емеше.

Башҡортостандың халыҡ шағиры Гөлфиә Юнысоваға иһә "Йыл шағиры" номинацияһы тапшырылды. "Юлдаш" радиоһында уның һүҙҙәренә ижад ителгән, барыһы ла яттан белгән "Аҡҡош күле", "Ашығамын", "Балаларға фатиха", "Беҙ йәш саҡта", "Дим буйҙары" йырҙары йыш яңғырай.

Йылдың иң яҡшы аранжировка яһаусыһы тип Раян Абдуллин, ә "Автор-башҡарыусы" номинацияһында Эдуард Хәснөтдинов билдәләнде. Әйткәндәй, фестиваль Эдуард Хәснөтдинов Миләүшә Ғәлиева менән берлектә ижад иткән "Ауырлыҡты йырҙар еңеләйтә" йыры менән тамамланды. Унда ошондай юлдар бар:

*Кешеләргә күп тә кәрәк түгел,*
*Ҡояш кәрәк, икмәк, тыныслыҡ.*
*Һәм тағы ла моңло йырҙар кәрәк,*
*Ауырлыҡты еңеп сығырлыҡ.*

Ауырлыҡты еңеләйткән йырҙар һәр ваҡыт яңғырап торһон.

**Гүзәл ЗАРИПОВА.**

*ЗАУЫҠ*

# САЛАУАТТЫҢ ӘМИНӘҺЕ БУЛЫП...

*Римма ҒӘЛИМОВА*



### Эске азатлыҡ

Урмандарҙа аҙашып та йөрөй
Иректәге болан балаһы...
Ябыҡ бүлмәләрҙә хәл итеlә
Кемдең ҡасан, нимә алаһы.

Эске азатлығым ҡәҙерлерәк
Баһаланмай ҡалған баһалай,
Наградалар өсөн һуғыш бара -
Был бәйгелә еңә ялағай.

Берәүҙең дә битен йыртҡым килмәй,
Түрәләргә ярай алмайым.
Пенсияма өҫтәлмәһен әйҙә,
Мин быйыл да ҡоро ҡалайым.

Бикле ишектәрҙә хәл ителә
Кемдең ҡасан, нимә алаһы,
Эске азатлығым ҡыйбат минә,
Үтеп бара болан балаһы.

Шул боландай кереп ҡасыр инем
Урман эстәренә ваҡлыҡтарҙан,
Йәшәрлектәр ҡалманы бит, тиеп
Төңөлгәнбеҙ инде хаҡлыҡтарҙан.

Әйтегеҙсе, кемдәр иҫән ҡалды
Баш күтәреп сыҡҡан халыҡтарҙан?
Төрмәләргә көсләп япҡандарҙы
Ҡуҙәтәбеҙ һаман ярыҡтарҙан.

Көрәшергә хәл ҡалманы тамам,
Минут һайын башҡа һуғалар.
Беҙҙе емтек итеп йолҡҡослаған,
Донъя тотҡаһымы һуң улар?

Мәңге кеше өлөштәрен ашап,
Беҙгә ҡарап кемдәр ҡул саба?
Салауаттың Әминәһе булып,
Ҡыҙҙырмағыҙ мине, яу сабам...

Минең арттан күтәрелер халҡым,
Түҙемлеге бөткәс, беләмен.
Ҡалған булһа, ирҙәр - ҡалҡкан булыр,
Ошо яуҙа халҡым еңһен өсөн
Үҙем батырҙарса үләмен!

### Түрә

Ҡыйырһытты мине бөгөн берәү,
Булыр-булмаҫ түрә йораты...
Үҙ фекере, башы булмағанда
Йөрәк ҡабул итмәй ир-атты.
Үҙен кемдәр күтәргәнен хатта
Шундуҡ онотто бит мәлендә.
Мәкерлеге күҙҙәренә сыҡҡан,
Ҡорто оялаған тәнендә.
Танауының тишегенә ҡарап,
Күтәрелде хыял күктәренә.
Ҡайҙан сыҡҡанлығын танытҡырып,
Эй тибәһе ине "күттәренә"...
Күгә хәтеренә төшөргәнсе
Быға тиклем кемдән кем булғанын,
Аңлар микән бер саҡ уның һымаҡ
Башһыҙ түрә менән ил тулғанын...

### Көҙ

Йәйһеҙ генә көҙгә керҙем инде,
Һинме, минме хәҙер ут йота?
Ләйсән ямғырҙарҙы көткән саҡта
Болоттарҙы кем һуң ҡуйырта?
Үҙәк өҙәр көҙҙәр шулдыр инде,
Бер мин генә түгел түҙемле.
Меңәрләгән ҡатын минең хәлдә,
Битәрләү юҡ шуға үҙемде.

Ҡояш сығыр әле беҙгә лә тип,
Өмөт менән йәшәү ҙур хата.
Поезд ишектәре ябылған ул,
Хәтер үткәндәрҙе ҡуҙғата...
Хәтирәләр менән йәшәү генә
Ҡотҡарамы һуңғы аҙымдан?
Тыуғанда уҡ күрер яҙмышыбыҙ
Беҙҙең маңлайҙарға яҙылған.

Үҙгәртергә теләп яҙмыштарҙы
Ниндәй ҡиәфәткә кермәнек.
Бәхеттәргә лайыҡ булғанда ла
Бер генә лә рәхәт күрмәнек.
Урамдарҙа байрам көтә-көтә
Тоймағанбыҙ көҙгә кергәнде.
Дошманға ла хатта теләмәйбеҙ
Үҙебеҙҙең нимә күргәнде.

Шул көйө лә кеше ашағанды
Ашаныҡ та, кейҙек кейемен.
Күҙ йәш күрһәтмәйсә йәшәнек тә.
Илар саҡтарҙа ла бейенек.
Шуға ныҡбыҙ, тәүбәгә килер тип
Көтмәгеҙ һеҙ беҙҙе, ир-аттар.

Беҙ киткәс тә әллә күпме ҡыҙҙар
Беҙҙең яҙмыштарҙы ҡабатлар.

Сөнки йәшәү мәңге беҙҙән тора,
Беҙ булғанға бара донъяғыҙ,
Былар көҙгә кереп киткән, тиеп
Ҡабаланып, нөктә ҡуймағыҙ!
Алда әле беҙҙе ҡәҙерләгән
Мәсет ҡапҡалары асыла.
Саҡ атлаған бабайҙарҙы күреп,
Йөрәк ярһыуҙары баҫыла.

Тимәк көҙҙәр һәр кемгә лә килә,
Был йәшәүҙә кемдәр уңмаған,
Алла бабай бәхет өләшкәндә
Алдан ҡул һуҙырға һуңлаған.

### Ысын ирҙәр

Мин ирҙәрҙең ҡул көстәре менән
Асфальт түшәгәнен яратам.
Ихтирам юҡ йылы бүлмәләрҙә
Ҡағыҙ тотҡандарға ҡарата.
Мин ирҙәрҙең ҡара тиргә батып,
Ер һөргәнен генә яратам.
Ихтирамым арта торған һайын
Ауыл ирҙәренә ҡарата.

Мин ирҙәрҙең мазуттарға батҡан
Заводтағыларын яратам.
Ултырғыста ыштан ышҡыусылар,
Ихтирам юҡ һеҙгә ҡарата.
Сөнки ҡатын-ҡыҙҙың эш урынын
Һеҙ йүнһеҙҙәр алып бөттөгеҙ.
Лом күтәргән ҡатын боҙҙо яра,
Геморройға ҡатһын "к-тегеҙ".

Мин ирҙәрҙең эштән хәлдән тайып,
Арып ҡайтҡандарын яратам.
Мин ул ирҙе ҡосағыма алып
Тыным менән тирен ҡоротам.
Күпме ирҙәр эшһеҙлектән аҙып,
Бисәләргә ҡалып баралар.
Күпме тыуыр сабый тыумай ҡала,
Шуға әрней беҙҙең яралар...

ИНТЕРНЕТТАН



# ҺАЛҠЫНДАР... һағыныу тойғоһон көсәйтә

■ Үткәндәрҙе һағынып иҫкә алыу тойғоһо һалҡындар төшөү менән тағы ла көсәйә икән. Саутгемптон университеты (Бөйөк Британия) ғалимдары быны ҡыҙыҡлы тикшеренеү үткәреп асыҡлаған. Унда ҡатнашыусылар бер ай дауамында ҡасан был тойғоға йышыраҡ бирелеүҙәрен күҙәтергә тейеш була. Асыҡланыуынса, һалҡындар һағыныу тойғоһон нығыраҡ көсәйтә, имеш. Тикшеренеүҙәрҙең икенсе өлөшө өс бүлмәлә үткәрелгән. Уларҙың беренсеһендә температура - һалҡынса (+20), икенсеһендә - уртаса (+24), өсөнсөһөндә - эҫе (+28) булған. Һалҡын бүлмәлә ностальгия тойғоһо сағыуыраҡ булыуы күҙәтелгән, етмәһә, хәтирәләргә сумыусы кеше был осраҡта бүлмәнең ҡапыл йылынып китеүе тураһында белдергән. Был тикшеренеүҙәрҙең өсөнсө өлөшө музыка менән бәйле. Ниндәй ҙә булһа композиция кешелә ниндәйҙер хәтирәләр уятһа, уға шунда уҡ йылыраҡ булып киткән. Дүртенсе һынауҙа ғалимдар кешеләрҙең ҡулында боҙло һауытты ни тиклем оҙаҡ тотоп тора алыуын асыҡлаған - был осраҡта ла хәтирәләр йылылыҡ генераторы ролен үтәгән һәм һауытты оҙағыраҡ тотоп тороуға булышлыҡ иткән.

■ "Әгәр ҙә мин бай булһам, бәхетле булыр инем" тигән һүҙҙәрҙе ишеткәнегеҙ барҙыр, моғайын. Әммә ғалимдарҙың тикшеренеүҙәре күрһәтеүенсә, был фраза ошолайыраҡ яңғырарға тейеш икән: "Бәхетле булһам, бай ҙа буласаҡмын". Бында күңел байлығы күҙ уңында тотолмай, үҙен уңышһыҙ тип иҫәпләүселәргә ҡарағанда, тормошҡа шатлана белгән, үҙенә ышанған кешенең ҡулына аҡса йышыраҡ төшә. Америка ғалимдары үткәргән тикшеренеүҙәрҙә 15 мең кеше ҡатнашҡан һәм уларҙың барыһы ла бала һәм үҫмер сағығыҙҙа үҙегеҙҙе бәхетлеме, әллә бәхетһеҙ итеп тоя инегеҙме, тигән һорауға яуап биргән. Бәхтиһәң, бала сағында уҡ тормошо менән ҡәнәғәт булған һәм унан кинәнес алып йәшәүселәр ҙурайғас та эштә һәм матди өлкәлә уңышҡа еңелерәк өлгәшкән. Ғалимдар әйтеүенсә, үҫмерҙең эмоциональ хәле - уның оло тормоштағы уңыштарына нигеҙ булып тора.

■ Депрессияға бирелмәйем, тиһәң, йышыраҡ помидор аша, тип кәңәш итә Ҡытайҙың Тяньцзинь медицина университеты ғалимдары. Улар әйтеүенсә, кем аҙнаһына ике тапҡыр помидор ашай, депрессия уны мотлаҡ урап үтәсәк. 70 йәште үткән 1 мең кешенең ниндәй ризыҡҡа өҫтөнлөк биреүен тикшергәндән һуң, аҙнаһына 2-6 тапҡыр помидор ашаусыларҙа депрессия 46 процентҡа, ә көн һайын ашаусыларҙа 52 процентҡа һирәгерәк осраған.

■ Бетесда Һаулыҡ һаҡлау милли институты (АҠШ) ғалимдары белдереүенсә, киҙеү киҫкенләшкән осорҙа ҡулдар менән биткә тейеп алыу ғәҙәте был сирҙе йоҡтороу хәүефен тағы ла арттыра. Доктор Владимир Алонсо әйтеүенсә, танау йәки ауыҙға ҡулдары менән тейеп, кеше бактериялар һәм вирустар йоҡтора. Ҡулдарҙы йыш йыуыу бынан ҡотҡармай, сөнки кеше эргәһендә бактериялар һаны һәр секунд һайын үҙгәреп тора. Бигерәк тә йәмәғәт урындарында кеше предметтарға сәғәтенә уртаса 3,3 тапҡыр тейеп алһа, битенә 3,6 тапҡыр ҡағыла икән. Ҡағиҙә булараҡ, беҙҙе иммунитет һаҡлаһа ла, киҙеү эпидемияһы ваҡытында иғтибарлыраҡ булырға һәм ҡулдар менән биткә теймәҫкә тырышырға кәрәк, ти ғалимдар.

АҒИНӘЙ МӘКТӘБЕ

# СӘХНӘЛӘРҘӘН ГЕНӘ ЙЫЛМАЙМАҺЫН,

## көндәлек тормошобоҙҙо биҙәһен асылыбыҙ...

**Эйе, ниндәй генә төрөн алма, халыҡ ижады бер ҡасан да үҙ төҫөн, үҙ көсөн юғалтманы. Көнкүрешебеҙҙә лә, донъяуи мөнәсәбәттәрҙә лә, сәхнәлә лә. Киреһенсә, йылдар үткән һайын төҫтәре баҙыҡланыуын, ҡулланылышы киңәйә барыуын, фәлсәфәүи йөкмәткеһенең тәрәнәйеүен тоябыҙ ата-олатайҙарҙан, өләсәйҙәрҙән ҡалған ҡомартҡыларыбыҙҙың. Һуңғы йылдарҙа халыҡ ижадына иғтибар айырыуса артты, тиһәм, хата булыр һымаҡ хатта, шулай ҙа йыр-көйҙәребеҙ, бейеүҙәребеҙ, музыка ҡоралдарыбыҙ, кейемдәребеҙ, биҙәүестәребеҙ, ризыҡ-тәғәмебеҙ, йәшәү рәүешебеҙ кемлегебеҙҙе күрһәтеп тороусы кире ҡаҡҡыһыҙ көскә әйләнде. Бының сере, моғайын, үҙ асылыбыҙҙы үҙебеҙ баһаларға, унан да бигерәк, аңларға өйрәнеүебеҙҙәлер. Хәйбулла районының үҙәге Аҡъяр ҡасабаһында үткән "Гәләбәш түңе буйында" төбәк милли кейемдәр бәйгеһе лә ошо уйланыуҙарыма асыҡлыҡ индерҙе һәм... тетрәндерҙе.**




*Гран-приға лайыҡ булған Нәфиә Ҡәйепова (уртала).*

Илдә Бөйөк Ватан һуғышы бара. Бер көндө ирҙәр һуғышҡа китеп бөтөп, етем ҡалған ауыл фермаһында һаламға ут тоҡана. Һауынсы ҡатын-ҡыҙҙарҙың береһе, һалам янып китмәһен тип, өҫтөндәге сәкмәнен сисеп, утты ҡаплап өлгөрә. Сәкмән уйылып янып сыға, уның ҡарауы, ут һүндерелә. Сәкмәнһеҙ ҡалған ҡатын, өйҙөң түрендә элеүле торған өләсәһенән ҡалған ҡомартҡы еләндәрҙе һүтеп, үҙенә эш кейеме тегеп алырға ниәтләнә. Балаларҙың өҫ-башы ла туҙған, уларға ла кейем кәрәк. Әсәһенең дә, ҡәйнәһенең дә был еләндәрҙе һүтергә ҡулдары бармай, ун йәшлек ҡыҙ балаға ҡушыла был эш. "Әсәй, һүтмәйек еләндәрҙе, бигерәк матурҙар бит!" - тип әсәһенең ниәтен кире ҡағып та ҡарай ҡыҙ бала, әммә донъя йөгөн бер үҙе һөйрәгән, ун бер балаға ни кейҙереп, ни ашатырға белмәгән ҡатындың ҡарары ҡәтғи: "Бөтәһе лә - фронт өсөн, бөтәһе лә - Еңеү өсөн!", башҡаса сара юҡ. Ҡыҙ бала ырыуҙың ҡото булып иҫәпләнгән еләндәрҙе һүтергә мәжбүр була. Мөһөр баҫып сигелгән тамъян һәм үҫәргән ырыуҙарының боронғо еләндәре була улар. Ике өләсәһе, ике яғында доға уҡып, Аллаһтан ғәфү үтенә. Әллә ошо доғалар ныҡ тәьҫир итә, ҡыҙ бала үҙенең ниндәйҙер ярамаған эш эшләп ултырғанын бөтә йөрәге менән тоя, ҡасан да булһа ошо еләндәрҙе яңынан тегергә, тергеҙергә тейешлеген аңлап, уларҙың һәр биҙәген иҫендә ҡалдырырға тырыша. Еләндәрҙең биҙәктәрен онотмай ул. Үҫә төшә, биҙәктәрҙе һүрәткә төшөрә, шул биҙәктәрҙе, еләндәрҙе халыҡҡа ҡайтарыу уйы менән янып йәшәй башлай...

Сәхнәлә барған тамашала 2-се Аҡъяр урта мәктәбенең 3-сө синыфында уҡыусы Гөлмирә Бикбова уйнаған ун йәшлек ҡыҙҙа залда ултырған халыҡ республикабыҙҙа киң билдәле фольклорсы, сәсәниә, башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының милли кейемдәрен тергеҙеүсе Әсмә Мәүләмбирҙе ҡыҙы Усманованы таныны. 9 ғына йәшлек Гөлмирә Әсмә Усманованың бала сағын шул тиклем килештереп уйнаны, ошо бала үҫеп етер ҙә, еләндәрҙе тергеҙер әле, моғайын, тип ышанып, тетрәнеүҙән күҙҙәребеҙ йәшләнеп ултырҙыҡ. Үҫәргән, ҡыпсаҡ, тамъян, бөрйән, түңгәүер, юрматы ырыуҙары, Һамар, Ҡурған өлкәләре ҡатын-ҡыҙҙарының милли кейемдәренән торған уникаль коллекция менән Мәҙәниәт йортонда эшләп килгән Тыуған яҡты өйрәнеү музейы директоры Рәзилә Файзулла ҡыҙы Байғусҡарова һәм Әсмә Усманованың ҡыҙы Рәзилә Сәлимйән ҡыҙы Туғыҙбаева таныштырғайны инде. Әсмә Мәүләмбирҙе ҡыҙының тормош һәм ижад юлын яҡтыртҡан йөкмәткеле күргәҙмәлә күргән-ишеткәндәребеҙҙе Сәрүәр Суринаның "Хазина" тапшырыуы өсөн 2008 йылда төшөргән "Һигеҙ ожмах асҡысы" фильмы байытты. Әсмә Усманова үҙе иҫән ваҡытында төшөрөлгән был фильм. Башҡорт фольклоры буйынса "тере энциклопедия" - Әсмә Усманова менән танышып-аралашыуҙан мәхрүм булһам да, экрандан уны күреү, ғүмерен фольклор йыйыу буйынса фиҙаҡәр хеҙмәткә бағышлауының сәбәптәрен ишетеү күңелемде баҫты бер аҙ.

Нимә ул "гәләбәш түңе"? "Гәләбәш" - башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының үҙенсәлекле баш кейеме. Шлемға оҡшап торған, көмөш тәңкәләр, мәрйен менән нағышланған был затлы баш кейемен хан һәм тархан ҡатындары кейгән. Ҡайһы бер төбәктәрҙә уны "кәләбәш", "кәләпүш" тип йөрөткәндәр. Был боронғо баш






*Баймаҡтар.*

кейеме хаҡында И. Лепехин, Н. Казанцев, Д. Никольский яҙмаларында, С.И. Руденконың киң билдәле "Башҡорттар" монографияһында, П.С. Палластың иллюстрацияларында мәғлүмәттәр байтаҡ. Гәләбәштең һаҡланып ҡалған берҙән-бер данаһын Санкт-Петербург ҡалаһындағы Рәсәй этнографик музейында күрергә була.

Әсмә Усманова исеменә төбәк милли кейемдәр бәйгеһенең "Гәләбәш түңе буйында" тип аталыуын белгәс тә нимә ул "түң" тип ҡыҙыҡһынмай ҡалманым. Һаҡмар йылғаһының Хәйбулла районы буйлап аҡҡан өлөшөндә "Гәләбәш түңе" тип аталған ҡалҡыулыҡ бар, ҡайһы бер ауылдар был ҡалҡыулыҡты "Гәләбәш элгән" тип тә йөрөтәләр икән. "Ҡалҡыулыҡ", "уба" мәғәнәһен "түң" тип һөйләй, тимәк, хәйбуллалар. Көйөргәҙеләр "дүң" тиҙәр, Ишембай районында ҡалҡыу ерҙе "ҡабаҡ" тип йөрөтәләр. Легендаларға ярашлы, Һаҡмар буйы ҡыҙҙары ошо ҡалҡыулыҡҡа уйынға йөрөгәндәр. Бер ҡыҙ бала, тиҫтерҙәре алдында нәҫелдәренең байлығы менән маҡтанырға теләп, уйынға гәләбәш кейеп килгән. Баш кейеме ауыр булғанлыҡтан, уны сисеп, ағасҡа элеп торған шлаған һоҡланғыс шәхестең биографияһына ҡағылышлы ошо мәғлүмәттәрҙе уҡығас, унын өсөн йәшәү мәғәнәһенә әйләнгән шөғөлдөң тағы бер сәбәбен асыҡланым: нәҫел ҡото ҡан аша Әсмә Усмановаға күскәндер, юғиһә, туғыҙ йәшлек баланың олатаһы менән өләсәһенән ҡалған еләндәрҙе һүткәндәге тетрәнеүҙәрен нисек аңлатаһың! Үҙендә йәшәгән ҡан хәтеренең көслө булыуын асыҡ тоя Әсмә Усманова. Уҡытыусы булып эшләгән йылдарында, бер тапҡыр ҙа Өфөнө лә күрмәгән көйө, уҡыусылары менән Ленинградҡа экскурсияға юллана. Эрмитажда йөрөгәндә боронғо әйберҙәрҙең ҡәҙерләп һаҡланыуына хайран ҡала. Петр Беренсенән ҡалған затлы кейемдәрҙе күреп: "Беҙҙә булмағанмы ни батшалар ғына кейә торған затлы кейемдәр? Ниңә беҙ сәхнә өсөн махсус яраҡлаштырып тегелгән кейемдәр менән генә сикләнәбеҙ? Тергеҙергә кәрәк башҡорттоң боронғо затлы кейемдәрен", - тип әҫәрләнә һәм милли кейемдәрҙе халыҡҡа ҡайтарыу эшенә тотона. Күп уҡый, эҙләнә, ауылдан-ауылға йөрөй, белгән-күргәндәрен системаға һалыу өсөн башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының милли кейойошторолған милли ризыҡтар күргәҙмәһендә Урал арьяғы башҡорттары өҫтәленең бренды булған сейәле, муйыллы, ҡарағатлы ҡороттарын, майҙарын, майлы талҡандарын ауыҙ һыуын ҡойорлоҡ итеп маҡтаһалар ҙа, сәхнәгә менгәс, бер аҙ баҙап ҡалды ағинәйҙәр. Матур ғына, үҙебеҙсә генә итеп ҡаушанылар. Ни эшләйһең инде, сәхнәнең үҙ талаптары, унда атлап йөрөү өсөн дә махсус белем кәрәк. Ярай әле Мәҙәниәт йортоноң бейеүселәре оҫта: һәр конкурсанттың кейем коллекцияларын, биҙәүестәрен тамашасыларға килешле генә итеп тәҡдим иттеләр. Подиумдарҙы биҙәгән моделдәрең ары торһон: тыйнаҡ йылмайыуҙары, тилбер генә итеп атлап йөрөүҙәре кейгән кейемдәрен, таҡҡан ҡашмау-селтәрҙәрен биҙәрлек. Һоҡланып ҡарап ултырҙым: үҙебеҙҙекеләр - үҙебеҙҙекеләр инде!

Ағинәйҙәрҙең һәр береһендә Әсмә Усманова рухы һаҡлана, һәр береһе үҙ эше менән яна! Ябай ғына ауыл ҡатындарының: "Өләсәйемдең һандығында һаҡланған кейемдәрҙән тыш, Руденконың, Шитованың хеҙмәттәренән ҡарап өйрәндем милли кейемдәрҙе тегеү серҙәрен", - тип тороуҙары ысынлап һоҡландырҙы, Ағинәйҙәр мәктәбенең әйтеп аңлатҡыһыҙ мөһим эш эшләүҙәренә ышандырҙы. Хәйбулла районы Сәғит ауылы ағинәйҙәренең сығышын ҡарағанда тағы ла нығынды был ышанысым. Улар милли һыҙаттарыбыҙҙы сәхнә кейемдәрендә генә күреүҙән азат: көндәлек кейемдәрен милли орнаменттар, элементтар менән биҙәп, ысын ағинәйҙәр булып сығып баҫтылар сәхнәгә! Тормошта ла ысын ағинәйҙәр икән улар: "Ошо кейемдә килен төшөрәбеҙ, ҡыҙ оҙатабыҙ, бәпес ҡаршылайбыҙ, егеттәребеҙҙе лә ошо кейемдә әрмегә оҙатабыҙ", - тиҙәр. Өләсәйҙәребеҙ рухы, күңелебеҙ күрергә теләгән ағинәйҙәребеҙ улар һынында үтеп инһен ине тормошобоҙға, беҙҙең генә түгел, йәштәребеҙҙең йәшәү рәүешенә әйләнһен ине улар күтәреп сыҡҡан изге ғәмәлдәр.

Бәйгенең быйылғы еңеүсеһе (Гран-при) тип Хәйбулла районы оҫтабикәһе Нәфиә Ҡәйепова табылды. Баһалама ҡоро ағзалары ла оҫтабикәләр иңенә төшкән бурысты аңлап эш итте. Был бәйге - модельерҙар, стилистар майҙаны түгел, милли асылыбыҙҙы аңлатыу, баһаларға өйрәтеү, юғала барған булмышыбыҙҙы халыҡҡа ҡайтарыу майҙаны. Милли асылдарын аңлағандарҙан, баһалағандарҙан өлгө алайыҡ. Сәхнәләрҙән генә йылмаймаһын асылыбыҙ, көндәлек тормошоҙҙо, көндәлек тормоштағы үҙебеҙҙе биҙәһен.

***Библиографик белешмә: Әсмә Мәүләмбирҙе ҡыҙы Усманова (1930-2015) - педагогик хеҙмәт ветераны, республикабыҙҙа киң билдәле фольклорсы. Юғары белемле. РСФСР-ҙың мәғариф алдынғыһы, Башҡортостан уҡытыусылары съездары делегаты (1967, 1969 йй.), бик күп миҙал эйәһе. I Республика сәсәндәр бәйгеһе лауреаты, I Бишек йыры бәйгеһендә гран-при, "Урал батыр" эпосы буйынса сәсәндәр бәйгеһендә шулай уҡ гран-при яулай. Хәйбулла районы Утарбай ауылында тыуған. Орск Уҡытыусылар институтының физика-математика бүлеген тамамлағандан һуң, 1951-1993 йылдарҙа, Аҡъяр мәктәбендә физика уҡытыусыһы булып эшләй. 1980 йылда Хәйбулла районының "Ветеран" ансамблен ойоштора, 1985 йылда "Ҡош юлы" фольклор төркөмөн төҙөй. Ике төркөм менән дә халҡыбыҙҙың бик күп онотолған йырҙарын, йолаларын, уйындарын тергеҙә, төрлө конкурстарҙа, фестивалдәрҙә, йыйындарҙа призлы урындар яулай.***

һәм онотоп ҡайтып киткән. Иҫенә төшөп, кире килеп эҙләһә лә гәләбәшен таба алмаған.

Затлы баш кейеме Әсмә Усманованың нәҫелендә лә һаҡланған була. Атаһының "Һинең дә гәләбәшең булыр ине. Граждандар һуғышы башланғас, бола үткәнсе тип, ынйы-мәрйендәр, затлы таштар, тәңкәләр менән биҙәлгән кәләпүште ваҡытлыса йәшереп торорға тип ярлы туғандарыбыҙға биргәйнек. Һуңынан улар, тиреҫлеккә күмеп ҡуйғайныҡ, урлап киткәндәр, тип бирмәнеләр", - тип һөйләгәненен яҡшы хәтерләй Әсмә Усманова. Бар ғүмерен халыҡ ижадын йыйыу, туплау, тергеҙеү эшенә бағыемдәре буйынса махсуслашҡан белгес - тарих фәндәре кандидаты С.Н.Шитова менән осраша.

Бәйгенең үҙенә әйләнеп ҡайтҡанда, Әсмә Усманова исеменә "Гәләбәш түңе буйында" төбәк милли кейемдәр бәйгеһе быйыл бишенсе тапҡыр уҙғарылды. Быйылғы йыйында Хәйбулла, Йылайыр, Баймаҡ, Көйөргәҙе районларынан барлығы 16 ағинәй ҡатнашты, уларҙың иң олоһона 73 йәш. Эйе, уларҙың һәр береһе модельер йә тегенсе түгел, милли кейемдәр тегеү эшенә ҡан саҡырыуы, рух ҡушыуы буйынса тотонған ябай ауыл ҡатындары. Үҙ эштәрен яҡлау өсөн сәхнәгә күтәрелгәнгә тиклем фойела

**Ғәлиә КӘЛИМУЛЛИНА.**



Йылайырҙар.





Көйөргәҙеләр.

УҢЫШ ҠАҘАН



# БӘХЕТКӘ УН АҘЫМ

## Бер аң нисек итеп күп кешегә ярҙам итә ала?

Хәҙер һеҙ күп нәмәне беләһегеҙ. Ләкин нимәнелер үҙ аллы эшләй алмайым, тигәнгә һаман ышанаһығыҙмы? Моғайын, хәҙер минең һеҙгә был донъяны нисек тиҙерәк яҡшыртыу өсөн билдәле бер аҙым тәҡдим итеүемде көтәһегеҙҙер? Һеҙ хаҡлы. Быны шулай эшләп була.

**Донъяны нисек яҡшыртырға?**

- Яҡшылап ултырығыҙ, күҙҙәрегеҙҙе йомоғоҙ, өс тапҡыр тәрән итеп тын алығыҙ һәм әлеге ваҡытта донъяның һуғыш барған бер районын алығыҙ.
- Юғары бейеклектән һуғыш театрын күҙәтәм, тип күҙ алдына килтерегеҙ. Ошо урынды нисек итеп мөхәббәт менән - яҡтырып торған томан менән ҡаплап алыуығыҙҙы күҙ алдына килтерегеҙ.
- Уйығыҙҙа ғына: "Тыныслыҡ, тыныслыҡ, тыныслыҡ", - тип ҡабатлағыҙ.
- Күҙҙәрегеҙҙе асығыҙ һәм ысынбарлыҡҡа урап ҡайтығыҙ.

Был күнекмә ни бары минуттан ашыу ваҡытығыҙҙы алыр, әммә унын ярҙамында низағтың оҙайлығын һәм тәрәнлеген ҡыҫҡартырға мөмкин. Эш шунда: һеҙҙең аңығыҙҙың энергияһы башҡа кешеләрҙең, шул иҫәптән һуғышта ҡатнашыусыларҙың да аң энергияһы, иң мөһиме - Ижадсы менән бергә ҡушыла. Бынан тыш, был күнекмәне бер һеҙ генә башҡармайһығыҙ.

**Тормошто яҡшыртыу өсөн, мәҫәлән, башҡа картиналарҙы күҙ алдына килтерергә мөмкин:**

- Кешеләр күпләп асыҡҡан берәй төбәкте күҙ алдына килтерегеҙ ҙә, уңыш йыйыу башланыуын күҙаллағыҙ. Балалар туҡ, амбарҙар һәм келәттәр аҙыҡ-түлек менән тулы. Уйығыҙҙа ғына: "Сәләмәтлек, сәләмәтлек, сәләмәтлек", - тип ҡабатлағыҙ.
- Енәйәтселек юғары булған берәй төбәкте күҙ алдына килтерегеҙ. Мәҫәлән, ҡаланың ҡараңғы һәм ҡурҡыныс урамы, ти. Уйығыҙҙа ғына уны яҡты нур менән яҡтыртығыҙ. Тирә-яҡта яҡты һәм хәүефһеҙ, тип күҙаллағыҙ. Уйығыҙҙан ғына: "Мөхәббәт, мөхәббәт, мөхәббәт", - тип ҡабатлағыҙ.
- Хәйерселәр йәшәгән районды күҙ алдына килтерегеҙ. Ул кешеләргә нисек итеп байлыҡ яуыуын күҙаллағыҙ. Тәбиғәттең байлыҡ символы итеп Б. Франклин рәсеме төшөрөлгән 100 долларлыҡ купюраларҙы күҙ алдына килтерегеҙ. Уйығыҙҙа ғына: "Байлыҡ, байлыҡ, байлыҡ", - тип ҡабатлағыҙ.

Мин һеҙгә ошо идеялар менән танышыу өсөн генә түгел, ә аңығыҙҙы донъяуи проблемаларҙы хәл итеүгә йүнәлтеүегеҙ өсөн рәхмәтемде белдерәм.

**Роберт СТОУН.**
**(Дауамы бар).**



### 5 ДЕКАБРЯ ПОНЕДЕЛЬНИК

**ПЕРВЫЙ КАНАЛ**

5.00 Телеканал "Доброе утро". [0+]
9.00, 3.00 Новости.
9.10 Премьера. "АнтиФейк". [16+]
9.50 "Жить здорово!" [16+]
10.40, 11.30 "Горячий лед". Фигурное катание. Чемпионат России по прыжкам. Трансляция из Санкт-Петербурга. [0+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
12.45, 14.15, 18.05, 20.20, 23.45, 3.05 Информационный канал. [16+]
17.15 "Мужское / Женское". [16+]
20.00 Вечерние новости (с субтитрами).
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Шифр". Новые серии. Памяти Сергея Пускепалиса. [16+]
22.45 "Большая игра". [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

**РОССИЯ 1**

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Кто против? [12+]
16.30 Малахов. [16+]
21.20 Т/с "Тайны следствия-22". [16+]
22.25 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
1.00, 2.00 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
3.00, 4.00 Т/с "Личное дело". [16+]
4.43 Перерыв в вещании.

**БСТ**

7.00 "Сәләм".
10.00 "Байык-2022". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]
11.00 Новости недели (на рус.яз).
11.45, 14.45, 16.45 Интервью. [12+]
12.00, 6.00 "Это моя профессия". [12+]
12.30, 16.30, 17.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз).
12.45 Счастливый час. [12+]
13.30, 14.30, 18.30, 22.30, 0.30 Новости (на баш. яз).
13.45, 23.45 Бәхетнамә. [12+]
15.00 М/с "Нурбостан сәйәхәте". [6+]
15.30 "Гора новостей". [6+]
15.45 Т/с "Ышан". [6+]
17.00 Тәмле. Мы вместе! [12+]
17.45 Специальный репортаж. [12+]
18.00 Автограф. [12+]
19.00, 20.30 Вечерний телецентр.
20.00 "Сәнгелдәк". [0+]
20.15 Пофутболим? [12+]
22.00 Тайм-аут. [12+]
23.00 Башкирские каникулы. [12+]
1.00 "Башкорт йыры". [12+]
1.45 Спектакль "Нэркэс". [12+]
4.00, 5.00 Вечерний телецентр. [12+]

### 6 ДЕКАБРЯ ВТОРНИК

**ПЕРВЫЙ КАНАЛ**

5.00 Телеканал "Доброе утро". [0+]
9.00, 3.00 Новости.
9.05 Премьера. "АнтиФейк". [16+]
9.40 "Жить здорово!" [16+]
10.30, 11.20, 14.15, 18.05, 20.20, 23.45, 3.05 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
17.15 "Мужское / Женское". [16+]
20.00 Вечерние новости (с субтитрами).
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Шифр". Новые серии. [16+]
22.45 "Большая игра". [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

**РОССИЯ 1**

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Кто против? [12+]
16.30 Малахов. [16+]
21.20 Т/с "Тайны следствия-22". [16+]
22.25 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
1.00, 2.00 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
3.00, 4.00 Т/с "Личное дело". [16+]
4.43 Перерыв в вещании.

**БСТ**

7.00 "Сәләм".
10.00 "Ете егет". [12+]
10.45 Специальный репортаж. [12+]
11.00 Республика LIVE #дома. [12+]
11.30, 12.30, 16.30, 17.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз).
11.45, 14.45, 16.45 Интервью. [12+]
12.00, 6.00 Моя планета Башкортостан. [12+]
12.45 Счастливый час. [12+]
13.30, 14.30, 18.00, 22.30, 0.30 Новости (на баш. яз).
13.45, 23.45 Бәхетнамә. [12+]
15.00 Детей много не бывает. [6+]
15.30 "Гора новостей". [6+]
15.45 Т/с "Ышан". [6+]
17.00 "Дорога к храму". [0+]
17.45 "Криминальный спектр". [16+]
18.20 Хоккей. "Авангард" (Омск) - "Салават Юлаев" (Уфа). КХЛ.
21.00 Полезные новости. [12+]
22.00 "Это моя профессия". [12+]
23.00 Атлас Баженова: Башкортостан. [6+]
23.30, 3.45 История одного села. [12+]
1.00 "Башкорт йыры". [12+]
1.45 Спектакль "Убей меня голубчик". [12+]
4.00, 5.00 Вечерний телецентр. [12+]

### 7 ДЕКАБРЯ СРЕДА

**ПЕРВЫЙ КАНАЛ**

5.00 Телеканал "Доброе утро". [0+]
9.00, 3.00 Новости.
9.05 Премьера. "АнтиФейк". [16+]
9.40 "Жить здорово!" [16+]
10.30, 11.20, 14.15, 18.05, 20.20, 23.45, 3.05 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
17.15 "Мужское / Женское". [16+]
20.00 Вечерние новости (с субтитрами).
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Шифр". Новые серии. [16+]
22.45 "Большая игра". [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

**РОССИЯ 1**

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Кто против? [12+]
16.30 Малахов. [16+]
21.20 Т/с "Тайны следствия-22". [16+]
22.25 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
1.00, 2.00 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
3.00, 4.00 Т/с "Личное дело". [16+]
4.43 Перерыв в вещании.

**БСТ**

7.00 "Сәләм".
10.00 Тәмле. Мы вместе! [12+]
10.30, 17.45 "Орнамент". [6+]
10.45 "Курай даны". [12+]
11.00 Республика LIVE #дома. [12+]
11.30, 12.30, 16.30, 17.30, 21.30 Новости (на рус. яз).
11.45, 14.45, 16.45 Интервью. [12+]
12.00 Дознание. [16+]
12.15 Пофутболим? [12+]
12.45, 3.15 Счастливый час. [12+]
13.30, 14.30, 18.30, 22.30, 0.30 Новости (на баш. яз).
13.45, 23.45 Бәхетнамә. [12+]
15.00 "МузКәрәҙ". [6+]
15.30 "Гора новостей". [6+]
15.45 Т/с "Ышан". [6+]
17.00 "Это моя профессия". [12+]
18.00, 23.00 Автограф. [12+]
19.00, 20.30 Вечерний телецентр.
20.00 "Сәнгелдәк". [0+]
20.15 Полезные новости. [12+]
22.00 Историческая среда. [12+]
1.00 "Башкорт йыры". [12+]
1.45 Спектакль "Белые ночи Акмуллы". [12+]
4.00, 5.00 Вечерний телецентр. [12+]
6.00 Следопыт. [12+]
6.30 Новости (на рус. яз). [0+]

### 8 ДЕКАБРЯ ЧЕТВЕРГ

**ПЕРВЫЙ КАНАЛ**

5.00 Телеканал "Доброе утро". [0+]
9.00, 3.00 Новости.
9.05 Премьера. "АнтиФейк". [16+]
9.40 "Жить здорово!" [16+]
10.30, 11.20, 14.15, 18.05, 20.20, 23.45, 3.05 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости.
17.15 "Мужское / Женское". [16+]
20.00 Вечерние новости (с субтитрами).
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Шифр". Новые серии. [16+]
22.45 "Большая игра". [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

**РОССИЯ 1**

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Кто против? [12+]
16.30 Малахов. [16+]
21.20 Т/с "Тайны следствия-22". [16+]
22.25 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
1.00, 2.00 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
3.00, 4.00 Т/с "Личное дело". [16+]
4.43 Перерыв в вещании.

**БСТ**

7.00 "Сәләм".
10.00 Башкирские каникулы. [12+]
10.45 История одного села. [12+]
11.00, 22.00 Республика LIVE #дома. [12+]
11.30, 12.30, 16.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз).
11.45, 14.45, 16.45 Интервью. [12+]
12.00 Историческая среда. [12+]
12.45, 3.15 Счастливый час. [12+]
13.30, 14.30, 20.00, 22.30, 0.30 Новости (на баш. яз).
13.45, 23.45 Бәхетнамә. [12+]
15.00 "Сулпылар". [0+]
15.30 "Гора новостей". [6+]
15.45 "Городок АЮЯ". [0+]
16.00 Тайм-аут. [12+]
17.00 "Криминальный спектр". [16+]
17.20 Хоккей. "Сибирь" (Новосибирск) - "Салават Юлаев" (Уфа). КХЛ.
20.15 "Сәнгелдәк". [0+]
20.30 Вечерний телецентр.
23.00 Колесо времени. [12+]
1.00 "Башкорт йыры". [12+]
1.45 Спектакль "Посетитель". [12+]
4.00, 5.00 Вечерний телецентр. [12+]
6.00 "100 имен Башкортостана". [0+]

### 9 ДЕКАБРЯ ПЯТНИЦА

**ПЕРВЫЙ КАНАЛ**

5.00 Телеканал "Доброе утро". [0+]
9.00 Новости.
9.05 Премьера. "АнтиФейк". [16+]
9.40 "Жить здорово!" [16+]
10.30, 11.20, 14.15, 2.10 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
17.15 "Мужское / Женское". [16+]
18.00 Вечерние новости.
18.35 "Человек и закон" с Алексеем Пимановым. [16+]
19.40 "Поле чудес". [16+]
21.00 "Время".
21.45 "Голос. Дети" возвращается. 10-й юбилейный сезон. [0+]
23.20 Х/ф "Аниматор". [16+]
1.15 Т/с "Судьба на выбор". [16+]
5.00 Д/с "Россия от края до края". [12+]

**РОССИЯ 1**

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.15 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Кто против? [12+]
16.30 Малахов. [16+]
21.30 Дуэты. [12+]
23.45 Улыбка на ночь. [16+]
0.50 Х/ф "Я не смогу тебя забыть". [12+]
4.10 Т/с "Личное дело". [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

**БСТ**

7.00 "Сәләм".
10.00 Атлас Баженова: Башкортостан. [6+]
10.30, 18.00 "Йома". [0+]
11.00 Республика LIVE #дома. [12+]
11.30, 12.30, 16.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз).
11.45, 14.45, 16.45, 22.00 Интервью. [12+]
12.00 Историческая среда. [12+]
12.45 "Алтын тирмә". [0+]
13.30, 18.30, 22.30, 1.30 Новости (на баш. яз).
13.45 Д/ф "Рождение истории". [12+]
15.00 "Городок АЮЯ". [6+]
15.15 "МузКәрәҙ". [0+]
15.30 "Гора новостей". [6+]
15.45 Патриот РФ. [12+]
16.00 "Аль-Фатиха". [12+]
17.00, 5.45 Башкирские каникулы. [12+]
17.45 "Курай даны". [12+]
19.00 "Честно говоря". [12+]
19.45 История одного села. [12+]
20.00 "Сәнгелдәк". [0+]
20.15 Полезные новости. [12+]
20.30 "Башкорт йыры-2022". Телевизионный конкурс среди профессиональных исполнителей башкирской песни. [12+]
23.00 "Ете егет". [12+]
23.45 Презентация Межрегионального поэтического конкурса "Минен Рәми". [0+]
2.00 "Башкорт йыры". [12+]
2.45 Спектакль "Асылъяр". [12+]
5.15 "100 имен Башкортостана". [12+]

### 10 ДЕКАБРЯ СУББОТА

**ПЕРВЫЙ КАНАЛ**

6.00 Телеканал "Доброе утро. Суббота". [0+]
9.00 "Умницы и умники". [12+]
9.45 "Слово пастыря". [0+]
10.00 Новости.
10.15 Премьера. "ПроУют". [0+]
11.10 Премьера. "Поехали!" [12+]
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 Д/с Премьера. "Бог войны. История русской артиллерии". [12+]
13.45 Д/ф "Все, что успел". К 65-летию со дня рождения Михаила Евдокимова. [12+]
14.25 Х/ф "Бег". К 95-летию со дня рождения Владимира Наумова. [12+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.20 Премьера. "Снова вместе. Ледниковый период". [0+]
21.00 "Время".
21.35 "Сегодня вечером". [16+]
23.40 Х/ф Премьера. "Нотр-Дам". [16+]
1.25 Д/с "Великие династии". [12+]
2.20 "Моя родословная". [12+]
3.00 Д/с "Россия от края до края". [12+]
3.35 Х/ф "Бег". [12+]

**РОССИЯ 1**

5.00 Утро России. Суббота.
8.00 Местное время. Вести-Башкортостан.
8.20 Местное время. Суббота.
8.35 По секрету всему свету.
9.00 Формула еды. [12+]
9.25 Пятеро на одного.
10.10 Сто к одному.
11.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 Доктор Мясников. [12+]
12.35 Т/с "Склифосовский". [16+]
18.00 Привет, Андрей! [12+]
21.00 Х/ф "Лекари душ". [12+]
1.05 Х/ф "Вопреки всему". [12+]
4.20 Х/ф "Когда цветет сирень". [16+]
5.55 Перерыв в вещании.

**БСТ**

7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]
7.30, 18.30 Новости (на баш. яз).
7.45 "Ете егет". [12+]
8.30 "Это моя профессия". [12+]
9.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз).
9.30 М/ф "Мультфильмы". [0+]
10.00 "Елкән". [6+]
10.30 "Гора новостей". [6+]
10.45 Преград. Net. [6+]
11.00 "КультУра". [6+]
11.15 "МузКәрәҙ". [0+]
11.30 Детей много не бывает. [6+]
12.00 Тәмле. Мы вместе! [12+]
12.30 Новости (на баш. яз). [12+]
13.00 Үткән гүмер. [12+]
13.30 Башкорттар. [6+]
14.00 "Дарю песню". [12+]
16.00 Колесо времени. [12+]
17.00 "Оҙон көй". Гала-концерт Межрегионального конкурса башкирской песни. [12+]
19.00, 4.15 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]
19.45 Специальный репортаж. [6+]
20.00 "Сәнгелдәк". [0+]
20.15 Полезные новости. [12+]
20.30 "Байык-2022". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]
22.00 Республика LIVE #дома. [12+]
22.30, 0.00 Новости недели (на баш. яз).
23.15 "Башкорт йыры-2022". Телевизионный конкурс среди профессиональных исполнителей башкирской песни. [12+]
0.45 "Башкорт йыры-2021". [12+]
1.30 Спектакль "Вот так случилось..". [12+]
3.45 Тормош. [12+]
5.00 "Млечный путь". [12+]
6.00 Интервью. [12+]

### 11 ДЕКАБРЯ ВОСКРЕСЕНЬЕ

**ПЕРВЫЙ КАНАЛ**

6.00, 10.00 Новости.
6.10 Х/ф "Бег". [12+]
6.55 Играй, гармонь любимая! [12+]
7.40 "Часовой". [12+]
8.10 "Здоровье". [16+]
9.20 "Мечталлион". Национальная Лотерея. [12+]
9.40 "Непутевые заметки" с Дмитрием Крыловым. [12+]
10.10 Премьера. "Жизнь своих". [12+]
11.05 Премьера. "Повара на колесах". [12+]
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 Д/ф Премьера. "Голос наших побед". К 100-летию Николая Озерова. [12+]
13.20 Х/ф "Безымянная звезда" и "Покровские ворота". Легендарные фильмы Михаила Козакова. [12+]
18.25 Д/ф "Михаил Задорнов. От первого лица". [16+]
19.10 Премьера. "Поем на кухне всей страной". [12+]
21.00 "Время".
22.35 "Что? Где? Когда?" Зимняя серия игр. [16+]
23.45 Д/с "Романовы". [12+]
0.45 "Камера. Мотор. Страна". [16+]
2.05 "Моя родословная". [12+]
2.45 "Наедине со всеми". [16+]
3.30 Д/с "Россия от края до края". [12+]
4.57 Перерыв в вещании.

**РОССИЯ 1**

6.15, 2.30 Х/ф "Арифметика подлости". [16+]
8.00 Местное время. Воскресенье.
8.35 Когда все дома с Тимуром Кизяковым.
9.25 Утренняя почта с Николаем Басковым.
10.10 Сто к одному.
11.00, 16.00 Вести.
11.50 Х/ф "Лучшая подруга". [12+]
17.00, 19.00 Песни от всей души. [12+]
18.00 Всероссийский открытый телевизионный конкурс юных талантов "Синяя Птица".
20.00 Вести недели.
22.00 Москва. Кремль. Путин.
22.40 Воскресный вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
1.30 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
4.11 Перерыв в вещании.

**БСТ**

7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]
7.30 Новости (на баш. яз).
7.45 "Йома". [0+]
8.15 Тормош. [12+]
8.45 "Курай даны". [12+]
9.00 Новости (на рус. яз).
9.30 "Бай". [12+]
10.00 "Книга сказок". [0+]
10.15 "АйТеко!" [6+]
10.30 "Гора новостей". [6+]
10.45 "Сулпылар". [0+]
11.15 М/с "Нурбостан сәйәхәте". [6+]
11.30 "Кош юлы. Балалар". [6+]
11.45 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]
12.30 Новости недели (на баш. яз). [12+]
13.15 Башкирские каникулы. [12+]
14.00 "Дарю песню". [12+]
15.15 "Алтын тирмә". [0+]
16.00 "Дорога к храму". [0+]
16.30 Историческая среда. [12+]
17.00, 3.45 "Честно говоря". [12+]
17.45 К 100-летию российского джаза. Концерт эстрадно-джазового оркестра угии им. З.Исмагилова. [12+]
19.15 Әлләсе... [6+]
20.00 Атлас Баженова: Башкортостан. [6+]
20.30 Территория женского счастья. [12+]
20.45 Дознание. [16+]
21.00, 22.30 Республика LIVE #дома. [12+]
21.30 Новости недели (на рус.яз).
22.15, 6.45 Специальный репортаж. [12+]
23.00 Автограф. [12+]
23.30 Спектакль "Эти свободные бабочки". [12+]
3.00 История одного села. [12+]
4.30 Моя планета Башкортостан. [12+]
5.00 "Млечный путь". [12+]
6.00 Итоги недели (на рус. яз). [0+]

*БАШ ЭШЛӘТМӘК*

# ӘҘӘБИ МИРАҪ




**Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.**

**47-се һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Нәжми. Тағараҡ. Шағир. Һағыш. Айсыҡ. Әҙәбиәт. Ҡоралай. Аббат. Етеҙ. Аты. Фил. Карап. Лама. Сеул. Радар. Регби. Ниәт. Кәңәш. Алеут. Быймасы. Йырсы.

**Вертикаль буйынса:** Ҡаразирә. Һарауыс. Лупа. Сик. Тары. Әлибай. Шәйех. Нағыш. Филтә. Шаммас. Ғәбиҙуллин. Ирбис. Инҡар. Ыҙа. Ата. Карта. Бина. Алла. Ҡот. Пират.

*СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ*



## М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**6 декабрь "Ҡара йөҙҙәр"** (М. Ғафури). 16+

**10 декабрь "Һинһеҙ килгән яҙҙар"** (З. Ҡадырова), мелодрама. 18.00 16+

## Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**6 декабрь "A.S.P.: Перезагрузка"**, әҙәби шишәмбе. 6+

**9 декабрь "Алтын юбилей"** Зөлфиә Афзалова концерты. 6+

**"Подарок далеким планетам"**, Башҡорт теле көнөнә театрлаштырылған концерт. 6+

**10 декабрь "В ожидании чуда"**, буласаҡ әсәйҙәр өсөн концерт. 13.00 0+

**11 декабрь "Диксиленд",** ғаилә өсөн концерт. 15.00 6+

## Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе

**6 декабрь "В начале славных дел",** музыкаль-әҙәби лекторий. 6+

**9 декабрь "Минең ҡатынымдың исеме Морис"** (Р. Шарт), комедия. 16+

**10 декабрь "Урал легендалары"**, мюзикл. 12.00 6+

**11 декабрь "Протяни миру руку"** музыкаль-әҙәби лекторий. 6+

**Премьера! "Аҡ ҡалфаҡ"** (М. Фәйзи), драма. 18.00 12+

## Салауат дәүләт башҡорт драма театры

**6 декабрь "С чего начинается Родина?"** әҙәби-музыкаль лекторий. 6+

**7 декабрь Премьера! "Ынйыҡай менән Юлдыҡай"** (Х. Ғәбитов, Г. Саламатова инсц.), шиғри драма. 12+

## А. Мөбәрәков исемендәге Сибай дәүләт башҡорт драма театры

**5 декабрь "Приключения лесного Эха",** әкиәт. 11.00 0+

**6 декабрь "Тау артында ниҙәр бар?"** (Т. Ғиниәтуллин, Н. Ғәйетбай инсц.), драмаһы менән Әбйәлил районы Байым ауылында. 12+

**8 декабрь "Тау артында ниҙәр бар?"** (Т. Ғиниәтуллин, Н. Ғәйетбай инсц.), драма. 12+

# НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1444 һижри йыл.*

| Декабрь (Йомадиәл әүүәл) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалка | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 5 (11) дүшәмбе | 7:53 | 9:23 | 13:30 | 15:03 | 16:48 | 18:18 |
| 6 (12) шишәмбе | 7:55 | 9:25 | 13:30 | 15:03 | 16:48 | 18:18 |
| 7 (13) шаршамбы | 7:56 | 9:26 | 13:30 | 15:03 | 16:47 | 18:17 |
| 8 (14) кесе йома | 7:57 | 9:27 | 13:30 | 15:02 | 16:47 | 18:17 |
| 9 (15) йома | 7:59 | 9:29 | 13:30 | 15:02 | 16:47 | 18:17 |
| 10 (16) шәмбе | 8:00 | 9:30 | 13:30 | 15:02 | 16:46 | 18:16 |
| 11 (17) йәкшәмбе | 8:01 | 9:31 | 13:30 | 15:02 | 16:46 | 18:16 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

*ИҪКӘРТӘБЕҘ!*

# СЫСҠАН ҠУРҠЫНЫСЫ БАР

**2022 йылдың ғинуар-октябрь айҙарында Башҡортостанда 1724 кеше бөйөр синдромлы геморрагик биҙгәк менән ауырыған, тип хәбәр итә Роспотребнадзорҙың Башҡортостан Республикаһы буйынса идаралығы. Ауырыу кимәле 100 меңгә 42,9 кеше тәшкил иткән. Был 2021 йыл менән сағыштырғанда 6,3 тапҡырға күберәк.**

Сысҡан биҙгәге 54 районды 47-һендә, 14 ҡаланың 7-һендә теркәлгән. Ауырыу кимәле Благовещен, Тәтешле, Өфө, Краснокама, Асҡын райондарында уртаса күрһәткестән 2 һәм унан да күберәк тапҡырға артҡан.

"Сир вирусы кешенән кешегә күсмәй. Уға ҡаршы вакцина юҡ, иҫкәртеү ҡағиҙәләрен үтәргә кәрәк", - тип иҫкә төшөрәләр ведомствола. Төп иҫкәртеү саралары - биләмәләрҙе, биналарҙы таҙартыу, кимереүселәрҙе ағыулау, шәхси гигиена ҡағиҙәләрен үтәү. Һыуҙы ҡайнатмайынса, хатта шишмәләрҙән дә эсергә ярамай, ти белгестәр.

"Аҙыҡ-түлекте кимереүселәр тейә алмаҫлыҡ урында, яҡшы ябылған һауыттарҙа һаҡлағыҙ. Сысҡан тейгән ризыҡты ашамағыҙ, ашар алдынан һәр ваҡыт ҡулығыҙҙы йыуығыҙ, ауыҙығыҙға үлән һәм һалам алмағыҙ.

Саңлы эш башҡарғанда, бесән, һалам өйгәндә шәхси һаҡланыу сараларын үтәгеҙ, битлек һәм бирсәткә кейеп эшләгеҙ. Йыуғанда дезинфекция сараһын ҡулланығыҙ, һепермәгеҙ, саң һурҙырғыс менән һурҙырмағыҙ, балаҫ-келәм, түшәк кәрәк-яраҡтарын ҡаҡмағыҙ, сөнки ауырыу саң аша йоға", - тип кәңәш бирә Роспотребнадзор белгестәре.

✓ *Кешене белгең килһә - ҡылығына, баланы белгең килһә, уйынына ҡара.*
*(Башҡорт халыҡ мәҡәле).*

ҠЫҪҠА ӘҢГӘМӘ

# РУХ КӨСӨ БЕЙЕТӘ БЕЙЕҮСЕНЕ...

**Бейеүсе сәхнәлә бер мәл генә балҡып яна, тиҙәр. Әммә үҙ эшенә мөкиббән киткән шәхестәргә был һүҙҙәр тап килеп етмәйҙер ул. Быға Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе сәхнәһендә утыҙынсы йыл алһыҙ-ялһыҙ дәртләнеп ижад итеүсе Башҡортостандың халыҡ артисы Рәил Рәис улы ЛОҠМАНОВтың да үрнәге дәлил. Был хаҡта уның үҙенә лә һорау бирҙек.**



**Бейеүҙе ғүмерлек һөнәрегеҙ итеп һайлауға нимә этәргес булды?**

- Бейеүҙе бала саҡтан яратып үҫтем. Ғаиләбеҙ менән шулай сәнғәткә ғашиҡ кешеләр инек беҙ: олатай ҡурайҙа уйнаны, атай бейене. Бала саҡта ҡунаҡтар йыйылғанда ҡурайҙа уйнап, беҙҙе, балаларҙы, бейетерҙәр ине. Атайым Сибайҙа үҙешмәкәр ансамблдә бейеүсе булды. Унан инде мин Темәс ансамблендә, ә һигеҙенсе кластан һуң Йылайыр совхоз-техникумына уҡырға барып, ундағы Нияз Байегетов етәкселегендәге "Йәйғор" ансамблендә бейенем. Етәксебеҙ Хәлил Ишбирҙин менән дуҫтар булған икән, ул беҙҙе килеп ҡарап, Стәрлетамаҡта бейеү театры асырға ниәтләүен белдереп, шунда саҡырҙы. Ватан алдындағы бурысымды үтәп ҡайтҡандан һуң, 1993 йылда Стәрлетамаҡҡа килдем һәм бына утыҙынсы ижад миҙгелем дә килеп еткән.

Шулай ҙа 2006-2012 йылдарҙа кәләшем менән Өфөлә "Далан" төркөмө менән дә эшләп алдыҡ, әммә ятаҡан эшебеҙгә кире ҡайттыҡ. Быны былдай бер эш урынына, йәки бер һөнәргә тоғролоҡ беҙҙең осор кешеләренә күберәк хас һыҙаттыр. Йәштәр ул тиклем бейеүгә тартылып бармай хәҙер, халыҡ бейеүҙәре буйынса айырыуса йәш кадрҙарға ҡытлыҡ һиҙелә. Бейергә теләктәре ҙур булһа ла, донъя көтөү өсөн финанс мәсьәләләрен хәл итергә ашығып, эстрада йырсылары менән ҡуша йөрөүҙе, ниндәйҙер шәхси эштәр менән булыуҙы хуп күрәләр. Беҙҙең бейеү театрында ла егеттәр әҙәйҙе, элек күп булған ҡыҙҙар ҙа һирәкләнде.

Шуға балаларҙы бейеүгә ылыҡтырыу, өйрәтеү мөһим. Был йәһәттән дә эшебеҙ бара: 2012 йылда кәләшем мәрхүмә менән ҡайтып, балаларға төркөм асҡайныҡ. Бөгөн был эш "Торатау" халыҡ бейеүҙәре өлгөлө ансамбле булып үҫеп етте, унда дүрт төркөмдә 5-16 йәшлек балалар шөғөлләнә. Лицейҙа "Ирәндек" ансамблендә эшләйем. Тауҙарҙы яулап алып барам шикелле. Үҙем дә бишенсе тиҫтәне ҡыуып барыуға ҡарамаҫтан, йәштәр менән ярышып эшләп йөрөйөм, шөкөр.

**Йәштәр бейеүсе һөнәрен һайлап бармай, тинегеҙ. Был шул матди етешлеккә генә бәйлеме икән?**

- Беҙ ҙә эш башлаған матди етешлек әллә ни булманы. Рух тигән нәмә ййлап бөтөүенә бәйлелер был. Ғаиләлә һалынырға тейеш был төшөнсәгә халыҡ бейеүҙәрен башҡарыу теләге лә, ошо өлкәлә халҡына файҙа килтереп эшләү ҙә, туған теленде белеү ҙә - бөтәһе лә бәйле. Тырыштар донъя мәшәҡәттәренән ҡурҡып тормай ул. Тик елкә кәрәк, йыбанмаҫҡа, ике-өс урында эшләүҙән дә ҡурҡмаҫҡа кәрәк. Ул юлды беҙ ҙә үттек. Сәхнәлә йәшәргә кәрәк. Әлбиттә, был көсөргәнешле лә була, әммә эшенде яйға һалып алһаң, һөҙөмтәһен күрһәң - күнелгә йыуаныс табаһың. Мин балалар менән Йылайыр совхозында уҡып йөрөгәндә үк эшләй башланым, бейеүҙәр өйрәтергә саҡыра торғайнылар. Балалар менән бер ритмда булырға, түҙемле булырға, уларҙы яратып, аңлап эшләргә кәрәк.

**Көнделегеҙгә ҡайһы бейеү яҡын?**

- Береһен генә айырып атай алмам. Бейеүҙең һәр ҡайһыныһын яратып, күнелде һалып башҡарырға кәрәк. Мин башҡорт халыҡ бейеүҙәренә өҫтөнлөк бирәм. "Торатау" ансамблендә лә төрлө милләт балалары шөғөлләнеүгә ҡарамаҫтан, башҡорт бейеүҙәрен өйрәтәм. Башҡортостанда йәшәгәс, балалар бәләкәйҙән башҡорт халҡының мәҙәниәтен белеп үҫһендәр, ә аҙаҡ колледж, башҡа уҡыу йорттарында икенсе халыҡ бейеүҙәрен өйрәнерҙәр әле, тигән инаныстамын. Башҡорт, урыҫ, татар, сыуаштар ҙа бар араларында, бөтәһе лә башҡортса һаулыҡ һорашып инәләр, шул рухта үҫтерәбеҙ.

**Сәхнәлә асыҡ йөҙ, йылмайған килеш күреп өйрәнгәнбеҙ һеҙҙе. Һеҙ йәшәү көсөн ҡайҙан алаһығыҙ?**

- Мин балаларымдан табам йәшәү көсөн. Өлкән ҡыҙым Лиана, икенсеһе Әҙилә, ейәнсәрем Гөлмиә илһам сығанаҡтарым. Эштә лә, өйҙә лә моңайып ултырырға ваҡыт юҡ. Кисәге генә Баймаҡҡа туғандарға барып ҡайттыҡ, туғандар менән бергә ҡатышып йәшәү мөһим. Дәрт менән йәшәргә кәрәк, тормош мәшәҡәттәренә бирешеп, күнел төшөнкөлөгөнә бирелеп ултырмаҫҡа. Һаулыҡ бар, эш бар, туғандар бар - шунан да оло ҡыуаныс юҡтыр. Туғандар менән аралашып торорға кәрәк, хәҙерге заманда бер минут та етә бит хәл белешергә.

**Киләсәккә ниндәй пландарҙы тормошҡа ашырыу ниәте бар?**

- Төп эш урыным - Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһендә көндәлек эштәр, үҙ яйы менән бара. Төрлө ауылдарға концерттар менән йөрөү планлаштырылған. "Юлдаш хит"ҡа, "Байыҡ"ҡа саҡырҙылар, унда ла "һелкенеп" ҡайтырға кәрәк. Үҙемдең репертуарымды яңыртырға әлегә уй юҡ.

**Сәриә ҒАРИПОВА**
**әңгәмәләште.**

ҮӘТ, ШУЛАЙ!

## "МИРАҪ"ТАР - ЫРЫМБУРҘА



**21 ноябрҙән 27-һенә тиклем Өфөнөң "Мираҫ" йыр һәм бейеү ансамбле Ырымбур өлкәһендә концерттар менән сығыш яһаны. Ырымбур, Орск, Медногорск, Татар Ҡарғалыһы, Һарыҡташ, Александровка һәм Плешаново тамашасыларына башҡорт коллективының үҙенсәлекле программаһы күрһәтелде.**

"Мираҫ" икенсе тапҡыр Ырымбур өлкәһендә гастролдә булып ҡайтты, - тип белдерҙеләр коллективтың матбуғат хеҙмәтендә. - Ул саҡта концертҡа башҡа ауылдарҙан да килгәйнеләр. Был юлы концерттар тағы ла ҙурыраҡ уңыш һәм аншлаг менән үтте. Зал дәртле ҡурай моңона бейергә төштө, сағыу, онотолмаҫлыҡ сарала ҡатнашыу мөмкинлеге өсөн аяғүрә баҫып алҡышланы".

Артистар тамашасыларҙы бейеүҙәр, ҡурай һәм ҡыл-ҡумыҙ моңо, төрлө халыҡтарҙың йырҙары менән хайран ҡалдырҙы. Коллектив программаһында "Сатыр эргәһендә", "Йыуаса" башҡорт вокал-хореография композициялары, "Оҫта ҡуллы ҡыҙҙар", "Маршрут" бейеүҙәре, "Байыҡ", "Ишбирҙе ҡасҡын", "Ҡурай бәйете" халыҡ йырҙары бар ине. "Мираҫ" тамашасыларҙы башҡа милләттәрҙең ижады менән таныштырҙы. "Бик шәп булды! Бөтә хис-тойғоларҙы әйтеп бөтөрөрлөк түгел! Барыһы ла бик матур: костюмдар ҙа, артистар ҙа... "Мираҫ" беҙҙең кәйефте күтәрҙе, тамашасылар бик күп ине. Ҙур рәхмәт", - тине Ырымбур өлкәһендә йәшәүсе Ләйсән Бикйәнова концерттан һуң.

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

## АЛЫҪ ЮЛ ДА...
### яҡындағыһынан башлана

Кешене белгең килһә - ҡылығына, баланы белгең килһә, уйынына ҡара.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Түҙемлек һаҡлаған кешелә асыу булмай.

**(Франциск Ассизский).**

Йән ябай ғына ул, ә яуызлыҡ иһә шул тиклем ҡатмарлы.

**(Филипп Сидни).**

Мәңгелек тойғоноң ләззәтен татығанда ғына минутлыҡ тойғоларҙы ҡыуып була.

**(Августин).**

Белемең булмаһа ла, намыҫың булһын.

**(Немец халыҡ мәҡәле).**

Ике төрлө белем була. Береһе беҙҙе тормошто нисек үҙгәртеп ҡорорға, икенсеһе нисек йәшәргә өйрәтә.

**(Генри Адамс).**

Нимә эшләргә кәрәк, барыһы ла эшләнгән, хәҙер иһә нимә эшләмәҫкә кәрәк икәненә иғтибар итергә ваҡыт.

**(Макс Бирбом).**

Һәр кемдең, ай һымаҡ, яҡтыртылмаған яҡтары була һәм ул уны бер кемгә лә күрһәтмәй.

**(Марк Твен).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Ике эшҡыуар икенсе бер ҡалаға эшлекле осрашыуға барырға йыйына. Улар унда шәхси фирмалары өсөн файҙалы килешеү төҙөргә тейеш була. Әммә аэропорт юлында улар ултырған машина аварияға осрай. Эшҡыуарҙар, билдәле, самолетҡа һуңлай һәм файҙалы килешеү төҙөлмәй ҡала. Аҙаҡ ишетелеүенсә, эшҡыуарҙар ултырырға тейешле самолет та һауала һәләкәткә осрай, бар пассажирҙар һәләк була. Әлеге эшҡыуарҙар был хәл тураһында дауаханала ишетә.**

**Автомобиль һәләкәте ваҡытында алған яраларын дауалағандан һуң, был эшҡыуарҙар үҙҙәренең ҡәҙимге эшенә тотона. Әммә уларҙың икеһенең дә эше әллә ни ырап китә алмай. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, эшҡыуарҙарҙың береһе үҙен бәхетһеҙ, ә икенсеһе бик ныҡ бәхетле итеп тоя. Ни өсөн шулай килеп сыға һуң? Эйе, уларҙың тормошо тыштан ҡарағанда үҙгәрмәгән кеүек, юл һәләкәтенә тиклем дә, унан һуң да бер үк төрлө эш менән шөғөлләнәләр. Хикмәт шунда ғына: беренсе эшҡыуар ғүмере буйы бизнесын үҫтерергә булышлыҡ итәсәк файҙалы килешеүҙе өҙгән баяғы юл һәләкәте ваҡиғаһын әрләп йәшәй, ә икенсе эшҡыуар шул юл һәләкәтен барлыҡҡа килтереп, ғүмерен һаҡлаған Хоҙайға рәхмәт әйтеүҙән бушамай..."**

“Киске Өфө” гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы
№ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.
1 582218 911006 22048

**Баш мөхәррир:**
**Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Сәриә ҒАРИПОВА,
Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
ООО "СПУТНИК-ЮГ" нәшриәтендә баҫылды
(453400, Башҡортостан Республикаһы, Дәүләкән ҡалаһы, Мәжит Ғафури урамы, 4, офис 203).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |
| **Матбуғат таратыу** | **252-39-99** |

**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -**
2 декабрь 17 сәғәт 30 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44** телефоны буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**

Тиражы - 3540
Заказ - 1526